ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

КискеӨфө

31-6 июль - август (майай - урағай) 2026

№30 (1225)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Ахмаҡ бер ниҙе лә ғәфү итмәй һәм онотмай; бер ҡатлылар барыһын да ғәфү итә һәм барыһын да онота; аҡыллылар ғәфү итә, әммә бер ниҙе лә онотмай.

(Томас Сас).

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Илһөйәрлек паркы

6

Әсәй-өләсәйҙәрҙән күскән һөләтем,

яратап башҡарған хеҙмәтемә әүерелде

8-9

"Мин бөгөн ҡол да, ҡунаҡ та

Ижад тигән илһамда..."

11

Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ...

12

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

КӨН ТЕМАҺЫ

БЕРӘҮ ГЕНӘ...

Башҡортостанда яғыулыҡ баҙарында хәл еңелдән түгел, әммә контролдә тотола, тип билдәләне БР сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры урынбаҫары Эдуард Мостафин брифингта.

Оперштаб мәғлүмәттәре буйынса, үткән аҙнала Өфөнөң мониторинг алып барылған 31 яғыулыҡ-ҡойоу станцияһында 380-ләп автомобиль булған, ә бер аҙна элек 1100 машина иҫәпләнгән. "Өфөлә хәлдең нормалләшеүе ҡыуанысλы, әммә ул идеаль түгел. Ә бына ҡайһы бер муниципалитеттарҙа проблемалар бар, айырыуса бер заправка эшләгән биләмәләрҙә", - тип билдәләне министр урынбаҫары.Ул юлға сыҡҡан водителдәр республика буйлап маршруттарын алдан билдәләһен өсөн бер генә АЗС эшләгән ошо ҡалаларҙы һәм райондарҙы һанап үтте: Ағиҙел, Межгорье, Асҡын, Балаҡатай, Балтас, Мишкә, Ҡариҙел, Йәрмәкәй, Федоровка, Миәкә, Благовар, Баҡалы, Стәрлебаш, Ейәнсура райондары.

Һәм тағы. Пилотһыҙ хәүеф режимы ғәмәлдә булғанда яғыулыҡ тейәлмәй һәм ташылмай. Шуға бәйле бензовоздарҙың АЗС-тарға һуңлабыраҡ килеүе ихтимал, тине Эдуард Мостафин. Автомобиль хужаларына режим индерелеүе, унын ғәмәлдән сығарылыуы тураһында тиҙерәк мәғлүмәт алыу өсөн Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты социаль селтәрҙәрендә баҫылған яңылыҡтарҙы күҙәтеп барырға кәңәш бирҙе.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

МӘКТӘП ФОРМАҺЫН ХӘСТӘРЛӘП...

Башҡортостанда күп балалы ғаиләләрҙәге уҡыусылар өсөн һатып алынған мәктәп формаһы, шулай уҡ беренсе класс уҡыусылары өсөн мәктәп кәрәк-яраҡтары тупланмаһы өсөн компенсация биреү тәртибе раҫланды.

Ярҙам һорап Күп функциялы үҙәккә һәм Республика Халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәгенә, шулай уҡ "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша онлайн мөрәжәғәт итергә мөмкин. Тейешле ҡарарға премьер-министр Андрей Назаров ҡул ҡуйҙы. Хәҙер компенсация һәм тупланмалар өсөн БР Мәғариф министрлығы түгел, ә Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы яуап бирә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, мәктәп формаһы өсөн компенсация ике уҡыу йылына бер тапҡыр бирелә. Уға йән башына уртаса килеме балаға йәшәү минимумы дәүмәленән артмаған күп балалы ғаиләләрҙән 1-11-се класс уҡыусылары хоҡуҡлы. Мәктәп кәрәк-яраҡтары тупланмаһы күп балалы ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән беренсе класс уҡыусыларына бирелә. Комплектта 22 предмет: дәфтәрҙәр, тышлыҡтар, көндәлек, ручкалар, ҡәләмдәр, буяуҙар, пластилин, пенал, ранец һәм яҡтылыҡ ҡайтарғыс жилет. Тупланманы 1 сентябргә тиклем алырға мөмкин. Компенсацияға ғаризалар - 1 сентябрҙән 30 ноябргә, беренсе класс уҡыусыларына тупланмаға 1 майҙан 31 июлгә тиклем ҡабул ителә. Билдәле булыуынса, Башҡортостанда хәҙер 75 мең ишле ғаилә йәшәй. Был 2020 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләренә ҡарағанда 14 процентҡа күберәк. 2025 йылда уларға ярҙам күрһәтеүгә 1,25 миллиард һум йүнәлтелгән.

АФАРИН!

БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ ЕҢЕҮ ЯУЛАНЫ!

Өфө Фән һәм технологиялар университетының "Айтуған" халыҡ бейеүҙәре ансамбле Истанбулда Бөтә донъя халыҡ бейеүҙәре конкурсы кубогын яуланы. Был хаҡта БР Мәҙәниәт министрлығынан хәбәр иттеләр.

Халыҡ-ара конкурста донъяның 37 иленән 45 бейеү ансамбле ҡатнашты. Рәсәй исеменән дүрт коллектив, шул иҫәптән Өфө университетының "Айтуған" ансамбле сығыш яһаны. Жюриҙа Европа, Азия, Африка һәм Латин Америкаһынан хореография өлкәһендә танылған эксперттар эшләне. Судьялар оҫта башҡарыуҙан тыш, костюмдарҙы, музыкаль биҙәлеште лә баһаланы. Конкурс шарттары буйынса һәр ҡатнашыусыға 15 минутлыҡ программа тәҡдим итергә кәрәк ине. Коллектив етәксеһе Әлфиә Сәйфуллина әйтеүенсә, башҡорт бейеүҙәренең тиҙ темпы, бейеккә һикереүҙәрҙең күплеге һәм һүрәттәрҙең динамик алмашыныуы артистарҙан айырыуса сыҙамлыҡ талап итә. "Айтуған" дүрт постановканы берҙәм композицияға берләштерә, был коллективҡа тамашасыларҙың һөйөүен яуларға һәм профессиональ берләшмәнең юғары баһаһына лайыҡ булырға мөмкинлек бирә. Еңеүсе Кубогы менән бергә бейеүселәр 5 000 доллар күләмендә аҡсалата бүләк тә алған.

Ләйлә АРАЛБАЕВА.

12+

ҠЫҪҠАСА

ҠЫМЫҘ ТУРАҺЫНДА

"Июлдә тап ҡымыҙ тураһында һөйләшеү ваҡыты", тип яҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә. Уның һүҙҙәренсә, Башҡортостанды ҡымыҙҙан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. "Уны республиканан ситтә лә беләләр, беҙ ошо файҙалы эсемлекте етештереү буйынса Рәсәйҙә беренсе урынды биләйбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Йыл һайын Башҡортостан ҡымыҙ бешеүселәре 3,5 мең тоннаға яҡын тәмле һәм шифалы эсемлек етештерә. Бөгөн Башҡортостанда 100 ҡымыҙ фермаһы иҫәпләнә. "Беҙ - йылҡы һаны буйынса илдә лидерҙар иҫәбендә - беҙҙә улар 125 меңдән ашыу, - тип асыҡлыҡ индерҙе Башҡортостан Башлығы. - Ҡымыҙ - башҡорт мәҙәниәтенең айырылғыһыҙ өлөшө. Ул ысын мәғәнәһендә милли брендҡа әүерелде. Был эсемлек һыуһынды ҡандырып ҡына ҡалмай, организм өсөн бик файҙалы ла. Үҙ ваҡытында беҙгә ҡымыҙ менән дауаланырға килгән Лев Толстой, Антон Чехов, Максим Горький, Марина Цветаева быға инанған".

✓ **Башҡортостанда 9,5 меңдән ашыу ғаилә Әсәлек капиталы яҙамында торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан, тип хәбәр иттеләр Социаль фондтың республика буйынса бүлексәһенән.** Программа "Ғаилә" милли проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла. 2025 йылдан ғаиләләр Әсәлек капиталын эскроу иҫәбен файҙаланып, подряд килешеүе буйынса йорт төҙөүгә йүнәлтә ала, тип билдәләнеләр ведомствола. Был иһә аҡсаны намыҫһыҙ төҙөүселәрҙән яҡлай: аҡса банкта һаҡлана һәм подрядсыға эштәр тамамланғандан һуң ғына тапшырыла. Әгәр килешеү өҙөлһә, банк Әсәлек капиталы аҡсаһын фондҡа кире ҡайтара, һәм сертификат хужаһы уларҙы ҡабаттан ҡуллана ала. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Әсәлек капиталы яҙамында фатир йәки йорт һатып алырға, тәүге иғанә индерергә йәки ипотеканы ҡапларға, йорт төҙөргә йәки уны реконструкциялауға мөмкин.

✓ **Башҡортостанда теркәлгән енәйәттәр һаны 22 процентҡа, шул иҫәптән ауыр һәм айырыуса ауыр категорияларҙың өстән бер өлөшө тиерлек кәмегән.** Был хаҡта беренсе ярты йыллыҡ йомғаҡтары буйынса Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы коллегияһында хәбәр иттеләр. Мәҫәлән, үлтереү, һаулыҡҡа аңлы рәүештә ауыр зыян килтереү, урлашыу, талау осраҡтары һаны кәмегән. Урамда, рецидив, көнкүреш һәм бәлиғ булмағандарҙың, шулай уҡ иҫерек килеш эшләнгән енәйәтселек кәмегән. Бөтәһе 12 меңгә яҡын енәйәт, шул иҫәптән 3 мең ауыр һәм 600-ҙән ашыу енәйәт асылған. Енәйәтселек структураһында урлашыу һәм мутлашыу өҫтөнлөк итә, шул уҡ ваҡытта уларҙың күпселеге цифрлы технологиялар һәм психологик манипуляциялар яҙамында башҡарыла. Ойошҡан криминалға ҡаршы тороу өлөшөндә 600-ҙән ашыу енәйәт-язалау ғәмәле ҡылған 175 енәйәт ойошмаһы лидерҙары эшмәкәрлеге туҡтатылған.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

ТӨП БУРЫСТАРҘЫҢ БЕРЕҺЕ...

Республиканың идара итеү командаһы төбәк сәнәғәтенең әүҙем үҫешен тәьмин итергә тейеш, сөнки илдең технологик суверенитетын нығытыу һәм Башҡортостандың иҡтисади тотороҡлоғо ғына түгел, фронтты өҙлөкһөҙ тәьмин итеү ҙә шуға бәйле. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе.

"Еңеү менән ҡайтҡан яугирҙарҙы заманса производстволар һәм яңы эш урындары көтөргә тейеш. Был эштә беҙҙең төп ярҙамсы - республиканың Сәнәғәтте үҫтереү фонды. 2017 йылдан ошо Фонд машиналар эшләү, химия, ағас эшкәртеү, еңел сәнәғәт һәм башҡа тармаҡтарҙа дөйөм суммаһы 24,3 миллиард һумлыҡ 241 проектты финансланы. Был 27,5 миллиард һумлыҡ шәхси инвестициялар йәлеп итергә мөмкинлек бирҙе. Республикала 4 меңдән ашыу эш урыны барлыҡҡа килде, ә инициативаны тормошҡа ашырыуҙан иңәсәк һалым керемдәре 32 миллиард һумдан ашыуыраҡ булыр тип күҙаллана", - тип яҙҙы Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Башҡортостан етәксеһе илдең башҡа субъекттары ла Фонд тәжрибәһен нигеҙ итеп алыуын билдәләне. "Уның һөҙөмтәле эшмәкәрлеге предприятиеларға бер урында тормаҫҡа, алға барырға, хатта ҡатмарлы иҡтисади шарттарҙа ла яңы производстволар асырға ярҙам итә. Тик шулай ғына беҙ артабан да Еңеү өсөн барыһын да эшләй аласаҡбыҙ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

ИЛҺӨЙӘРЛЕК ПАРКЫ

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала йәшәүселәрҙе Шишмә районындағы "Патриот" паркына саҡырҙы.

Уның һүҙҙәренсә, "Патриот" паркы ғорурлыҡ һәм илһөйәрлек урынына әүерелде. Бында мәктәп уҡыусылары һәм колледж студенттары хәрби әҙерлек нигеҙҙәрен генә түгел, ә тормош тураһында дөрөҫ төшөнсә алырға мөмкин. Парк асылғандан алып майҙансыҡтарҙа республиканың әүҙем йәштәре, ирекмәндәре өсөн төрлө йыйылыштар үткәрелә. Патриот паркында "Геройҙар ярышы" өсөн трасса эшләй, ул асылғандан алып бында тотош илдең спорт командалары үҙ көсөн һынап ҡараны. "Мин үҙем дә бында йәштәр менән осрашырға, уларҙың һорауҙарына яуап бирергә һәм ҡыҙыҡһыныусан, янып торған күҙҙәргә ҡарарға яратам", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе барыһын да хәрби һәм трофей техника экспозицияһын ҡарарға саҡырҙы. Бынан тыш, паркта "Партизан ауылы" музей-күргәҙмә комплексы эшләй. "Был витриналы ябай музей түгел, ә интерактив майҙансыҡ, Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы урман лагерҙарының йыйылма образы. Бөтә объекттар блиндаж рәүешендә төҙөлгән. Штаб, медпункт, мунса һәм кухня бар, бында фронт көнкүреше мөхитен тойорға мөмкин. Ҡорал һәм боеприпастар келәтендә шул йылдарҙағы ҡоралдарҙы тотоп ҡарарға була - легендар "Максим" пулеметынан алып Ф-1 гранатаһына тиклем. "Партизан ауылы"нда, асылда, тариххҡа ҡағылырға, Еңеүҙең ниндәй хаҡ менән яуланғанын аңларға мөмкин", - тине Радий Хәбиров.

СОЦИАЛЬ ТАШЛАМАЛАР

Башҡортостанда Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып социаль ташлама алыуҙың яңы форматы ғәмәлгә ашырыла. Башҡортостан Ростов һәм Түмән өлкәләре менән берлектә "Мир" банк карталары аша социаль ташламалар биреү буйынса пилот проектына инде. Был хаҡта Рәсәй Хөкүмәтендә белдерҙеләр.

Яңы механизмды 1 августан һынау башлана. Был күп балалылар, пенсионерҙар, инвалидтар, студенттар тормошон еңеләйтергә тейеш. Дәүләт хеҙмәттәрендәге шәхси кабинетта теркәлгән "Мир" картаһы менән йәмәғәт транспортында, театр-музейҙарҙа, дарыуханаларҙа һәм аҙыҡ-түлек магазиндарында түләгәндә был ташламалар автоматик рәүештә ҡулланыла.

РФ Хөкүмәте вице-премьеры - хөкүмәт аппараты етәксеһе Дмитрий Григоренко һүҙҙәренсә, инициативаның төп маҡсаты - барлыҡ ярҙам сараларын алыу өсөн берҙәм һәм уңайлы сервис булдырыу. "Мир" картаһы артыҡ шәхси мәғлүмәттәр тапшырмай ғына ташламаны раҫлаған төп идентификаторға әүерелә. Ҡағыҙ таныҡлыҡтар талап ителмәй.

"Әгәр барыһы ла уңышлы килеп сыҡһа һәм граждандарға оҡшаһа, проектты бөтә илгә таратабыҙ. Беҙ төрлө коммерция компанияларын да йәлеп иттек, улар аҙыҡ-түлек магазиндарында, дарыуҙар һатып алғанда һәм башҡа осраҡтарҙа ташламалар яһай. Төп идентификатор - банк картаһы, - тине Григоренко.

ЭҪЕЛӘ НИСЕК ЭШЛӘРГӘ?

Көн эҫе булғанда ниндәй температурала эш көнө ҡыҫҡара тигән һорау барлыҡҡа килә. Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы етәксеһе урынбаҫары Оксана Ванскова эҫе ваҡытта хеҙмәтте һаҡлау талаптарын аңлатты.

Уның һүҙҙәренсә, Хеҙмәт кодексында юғары һауа температураһында эшләүгә арналған айырым норма юҡ. "Әгәр элек һауа температураһы норманан тайпылғанда эш ваҡыты ҡыҫҡартылыуы Санпин менән билдәләнһә (эш бүлмәһендә һауа температураһы 28,5°С тиклем күтәрелһә, эш көнөн бер сәғәткә ҡыҫҡартыу тураһында), хәҙер был шарт ҡаралмаған. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй Хеҙмәт кодексының 212-се статьяһы эш биреүсегә хеҙмәт шарттарын һәм хәүефһеҙлекте тәьмин итеү бурысын йөкмәтә", - ти Оксана Ванскова.

Уның билдәләүенсә, эш биреүсе хәүефте баһаларға һәм, әгәр температура хеҙмәткәрҙәрҙең һаулығына һәм ғүмеренә хәүеф тыуҙырһа, сара күрергә бурыслы. "Бындай осраҡта етәксе башҡа эш тәҡдим итергә тейеш. Әгәр ул булмаһа, хеҙмәткәр, тейешле ғариза биреп, өйөнә ҡайтырға йәки эш бурыстарын үтәүҙән баш тартырға мөмкин. Рәсәй Хеҙмәт кодексының 157-се статьяһына ярашлы, эш биреүсе үҙ ғәйебе менән (хеҙмәткәрҙең уртаса эш хаҡының кәм тигәндә өстән ике өлөшө күләмендә) эшһеҙлек ваҡытын түләргә тейеш. Эш хеҙмәт шарттарын күҙәтеү - уның бурысы", - тине Башҡортостан Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы етәксеһе урынбаҫары.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Бөгөн, 31 июлдә, Рәсәй халыҡтары спартакиадаһы асылды. Ярыштар илдең бер нисә спорт аренаһында, шул иҫәптән Өфөлә лә үтә. Кин масштаблы спорт сараһы 30 сентябргә тиклем дауам итә. Спартакиада программаһына спорттың 43 төрө ингән, 8100 спортсы ҡатнаша. Башҡортостанда алты спорт төрө буйынса ярыштар ҡаралған. Велосипед спорты буйынса тәүге уҙыш Шишмә районында була. Спортсыларҙы Көрәш һарайы, Фехтование үҙәге, Ишкәкле слалом өсөн ҡоролмалар комплексы ҡабул итә.

✓Башҡортостанда АИ-95 бензины менән мәсьәлә хәл ителде тиерлек, тине сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры урынбаҫары Эдуард Мостафин Республикаға идара итеү үҙәгендә уҙған брифингта. Уның һүҙҙәренсә, ағыулыҡтың ошо төрөн етештереү күләме көндән-көн арта. Күп кенә АЗС-тарҙа ағыулыҡтың бөтә төрҙәре лә бар. Шуға ҡарамаҫтан, 30 литрлыҡ заправка лимиты әлегә ғәмәлдән сығарылмай.

✓Брифингҡа Стәрлетамаҡ агломерацияһынан байтаҡ һорауҙар килде. Хәлде тотороҡландырыу өсөн Стәрлетамаҡҡа өҫтәмә бензовоздар ебәрелде, улар бөгөн килеп етергә тейеш, тип яуап бирҙе министр урынбаҫары. Салауатҡа ағыулыҡ урындағы базаларҙан килтерелмәй, логистика ҡатмарлыраҡ, шуға күрә ташыуҙа тоткарлыҡтар булыуы ихтимал. Стәрлебаш районы бер заправка эшләгән муниципалитеттар иҫәбендә - ағыулыҡ ебәреүҙе арттырыу планлаштырыла, тине спикер.

✓Башҡортостандың Стәрлетамаҡ, Ауырғазы һәм Ҡырмыҫҡалы райондары игенселәре 2026 йылғы кампанияла ужым культураларын йыйыу буйынса алдынғылыҡты бирмәй. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль хәбәр итеүенсә, 96 мең гектар майҙанда эштәр тамамланған, был культуралар биләгән баҫыуҙарҙың өстән бер өлөшөн тәшкил итә. "Яңы уңыштан 351 мең тонна игенен һуғып алынған. Гектарынан уртаса 39 центнер уңыш йыйыла - яҡшы һан! Сиратта - борсаҡ, арпа, яҙғы бойҙай, майлы культуралар", - тине республика Башлығы.

✓Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология төбәк министрлығы "БумБатл" Бөтә Рәсәй акцияһының етенсе миҙгеленә ҡушылырға саҡыра. Макулатура йыйыу буйынса акция 2027 йылдың 31 майына тиклем Рәсәй Тәбиғәт министрлығы булышлығында үтә, тип хәбәр итәләр ведомстванан. Акцияла ҡатнашыу өсөн бумбатл.рф сайтында теркәлергә, ҡабул итеү пунктына ҡағыҙ тапшырыу тураһында актты шәхси кабинетта урынлаштырырға кәрәк. Әйткәндәй, уҙған миҙгелдә Башҡортостанда 875,7 тонна макулатура йыйылған. Был күрһәткес буйынса республика ҙур төбәктәр араһында беренсегә сыҡҡан.

✔ ***"Көрәш һарайы эргәһендә белем һарайы барлыҡҡа килде, - тип яҙа Радий Хәбиров. - Өфөнөң Глумилино-2 биҫтәһендә 1225 урынлыҡ яңы мәктәп 1 сентябрҙә уҙ ишектәрен асырға әҙерләнә".***

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ

АЛТАҠТАЛАРҘА ХАТАЛАР

Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаевтың башҡорт телендәге алтаҡталарҙың сифаты тураһында тәнҡит һүҙҙәренән һуң Өфөлә республиканың икенсе дәүләт теленә тәржемә итеү мәсьәләһе күтәрелде.

Был проблема Өфө ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов етәкселегендәге оператив кәңәшмәлә тикшерелде. "Сауҙа идаралығынан был мәсьәләгә иғтибар итеүҙе һорайбыҙ. Башҡорт теленә дөрөҫ тәржемә итһендәр өсөн эшҡыуарҙарға ярҙам күрһәтергә кәрәк", - тип билдәләне Рөстәм Шәрипов

Ултырышта Өфө фән һәм технологиялар университетының һанлы трансформация буйынса проректоры Айнур Хәйбуллин "Баштәржемә" автоматлаштырылған мәғлүмәт системаһының үҙенсәлектәре хаҡында һөйләне. Уның менән 2025 йылда БР "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" законын ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссия ултырышында таныштырҙылар. Платформа рус теленән башҡорт теленә квалификациялы тәржемә итеү өсөн тәғәйенләнгән. "Баштәржемә" республиканың дәүләт органдары, ойошмалары, учреждениелары һәм предприятиеларының документтары (бланктар, мисәттәр, алтаҡталар), шулай уҡ етештереүселәр тураһында мәғлүмәт менән эшләй. Тәржемә хеҙмәте күрһәтелгән заказсыға электрон ҡултамғалы сертификат тапшырыла. Башҡортостандың дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдары өсөн документтарҙы бушлай тәржемә итеү мөмкинлеге бар. Бының өсөн билдәләнгән форма буйынса рәсми хат кәрәк. Коммерция ойошмалары өсөн тәржемә түләүле нигеҙҙә башҡарыла. "Баштәржемә" порталында "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша теркәлергә мөмкин.

РӘМИ ҒАРИПОВ ХӨРМӘТЕНӘ

Баш ҡаланың Октябрь проспектындағы 136-сы һәм 142/1-се йорттары араһында урынлашҡан скверға "Кояшлы ямғыр" исемен биреү планлаштырыла. Ҡала мэрияһынан хәбәр итеүҙәренсә, был исем Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың шиғырынан алынған.

Ҡала хакимиәтендә уның тарихи-мәҙәни әһәмиәтен аңлаттылар. Төҙөкләндерелгән сквер янында Рәми Ғарипов йәшәгән йорт, шулай уҡ уның исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты урынлашҡан. Шағирҙың тәбиғәтте яратыуы һәм йәшәгән йорто тирәләй ағастар ултыртыуы билдәле, ә бөгөн был эште өфөләрҙең яңы быуыны дауам итә. 2025 йылда был киңлек "Йәшел Башҡортостан" акцияһы һәм һайлаусыларҙың мөрәжәғәте сәбәпле барлыҡҡа килә.

Шулай уҡ "Тәбиғәт ҡалаһы" торлаҡ комплексы биләмәһендә урынлашҡан яңы урамға Советтар Союзы Геройы Павел Копылов исемен бирергә тәҡдим ителә. Павел Иванович Бөйөк Ватан һуғышында танкист булып хеҙмәт итә, Венгрияны азат итеү өсөн алышта уның взводы дошман танктарын, бронетранспортерҙарын һәм дошмандың тере көсөн юҡ итә. 1966 йылдан геройҙың тормошо Өфө менән бәйле була, унда ул төҙөлөш өлкәһендә эшләгән һәм шунда ерләнгән.

ТАҒЫ БЕР МӘКТӘП

Өфөлә Көрәш һарайы янында "Белем һарайы" ҡалҡып сыҡты. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров МАХ-тағы рәсми каналында яңы мәктәп төҙөлөшөнөң тамамланыуы тураһында хәбәр итте.

"Көрәш һарайы эргәһендә белем һарайы барлыҡҡа килде, - тип яҙа Радий Хәбиров. - Өфөнөң Глумилино-2 биҫтәһендә 1225 урынлыҡ яңы мәктәп 1 сентябрҙә уҙ ишектәрен асырға әҙерләнә. Белем, урындағы халыҡ уны ныҡ көтә - йәш, әүҙем район, бында балалы ғаиләләр йәшәгән яңы йорттар күп".

Бина - 88-се мәктәптең икенсе корпусы. Беренсе корпус Рәсәй урамында урынлашҡан. Төп төҙөлөш эштәре тамамланған, мәктәп заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған. Алда - файҙаланыуға тапшырыу эштәре һәм лицензия алыу. Яңы мәктәптең үҙенсәлеге уҡытыу йүнәлештәренең төрлө булыуына ҡайтып ҡала. Бында биоинженер, кадет, спорт, IT, бизнес-кластар асыу планлаштырыла. Уҡыусыларға һөнәр серҙәренә төшөнөргә партнер вуздар һәм медицина ойошмалары ярҙам итәсәк. Улар араһында - Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы, Өфө дәүләт нефть техник университеты, Өфө медицина колледжы. Спорт кластары Көрәш һарайы һәм спорт мәктәптәре менән берлектә эшләйәсәк. Ә кадет кластары уҡыусылары хәрби эш, бал бейеүҙәре, хәрби тарих буйынса түңәрәктәргә һәм секцияларға, шулай уҡ грек-рим көрәше буйынса күнекмәләргә йөрөй ала. "Заманса мәктәптәр тап шундай матур, иркен, яҡшы йыһазландырылған булырға тейеш. Шуға ынтыласаҡбыҙ", - тип йомғаҡ яһаны республика етәксеһе.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

ВАТАНСЫЛЫҠ ТОЙҒОҺО ӘЙҘӘЙ

Өфөләге Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты офицеры, капитан Фәдис Солтанов һүҙҙәренсә, пилотһыҙ ғәскәр системаһында хеҙмәт итергә теләүселәр һаны арта.

"Ғариза яҙған кандидаттарҙың күпселеген был аҙымға ватансылыҡ тойғоһо этәрә. Шулай уҡ алғы һыҙыҡтағы яҡташтарына, дуҫтарына, туғандарына һәм хатта атай-ағайҙарына ярҙам итеү теләге лә Рәсәй Оборона министрлығы менән контракт төҙөү өсөн сәбәп булып тора. Ҡайһы осраҡта финанс мәсьәләһе лә алға сығыуы ихтимал. Сөнки МХО зонаһында хеҙмәт хаҡы яҡшы түләнә", - ти офицер.

Фәдис Солтанов таксиҙа эшләгән Өфө егете миҫалында шундай бер хәлде иҫенә төшөрҙө. "Ниндәйҙер эске ынтылыш егетте МХО-ға барырға әйҙәй һәм ул үҙен армия хеҙмәтендә БПЛА операторы сифатында һынап ҡарарға була. Уның фекеренсә, һуғыш шарттарында дуҫлыҡ-туғанлыҡ тойғолары, бер-беренә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт ғәҙәти тормоштағына ҡарағанда күпкә көслөрәк. Ул, оҙаҡҡа һуҙмай, анализдар тапшырҙы, бер көндә медицина тикшереүен үтте. Биш төп тест блогын үҙ эсенә алған профессиональ һайлап алыу һынауҙарын 40 минутта башҡарып сыҡты һәм юғары баһа алды. Хәҙер егет - пилотһыҙ осоу аппараттары операторы. Хәрби бурыстарын үтәү өсөн Махсус хәрби операция зонаһына юлланды", - тип һөйләй офицер.

Бөгөн пилотһыҙ ғәскәр системаһы Рәсәй Ҡоралды көстәренең элитаһы кимәленә күтәрелде. Төрлө тәғәйенләнештәге һәм типтағы дрондар ярҙамында разведка алып барыла, һөжүм операциялары үткәрелә. Улар алғы һыҙыҡҡа боеприпастар, аҙыҡ-түлек, медицина кәрәк-ярақтары ташый, яралыларҙы эвакуациялау ваҡытында ярҙамға килә.

Пилотһыҙ ғәскәр системаһында хеҙмәт итеүселәр тейешле түләүҙәр һәм социаль гарантиялар ала, айырым өҫтөнлөктәр менән файҙалана. Башҡортостанда яугирҙарҙың үҙҙәре һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн 50-гә яҡын социаль ярҙам һәм ташламалар ҡаралған.

Бынан тыш, студенттар өсөн махсус шарттар ҙа бар. Юғары уҡыу йорттарында уҡыусылар, академик отпуск алып, контракт төҙөгән хәлдә, хеҙмәттән һуң бюджетҡа кире ҡайта ала.

БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү тураһында тулы мәғлүмәтте башбат.рф сайтында һәм 122 телефоны буйынса алырға мөмкин. Шулай уҡ быны йәшәгән урын буйынса хәрби комиссариатта, Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була.

Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй Ҡоралды көстәренең штат һанын 2,4 миллион кешегә тиклем (уларҙың 1,5 миллионы - хәрби хеҙмәткәрҙәр) арттырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Указды өйрәнгәндән һуң "Башинформ"ға билдәле булыуынса, үҙгәреш 2006 йылда тарҡатылған хәрби-төҙөлөш подразделениеларын тергеҙеү менән бәйле.

✔ Архангельск өлкәһендәге арктик морон легендар осоусы, яҡташыбыҙ, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев исемен йөрөтәсәк. Был ҡарарҙы Архангельск өлкә Йыйылышы депутаттары 27-се саҡырылыш йәйге сессияһында ҡабул иткән. Инициатива менән "Рәсәйҙең граждандар авиацияһы ветерандары берләшмәһе"нең Башҡортостан төбәк бүлексәһе рәйесе Рифғәт Денисламов сығыш яһаған. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, был башланғысты хуплап, Архангельск өлкә депутаттар Йыйылышына мөрәжәғәт иткән.

✔ Хоҡуҡ һаҡлау органдарынан белдереүҙәренсә, һуңғы осорҙа телефон аша мутлашыу осраҡтары йышайған. Енәйәтселәр граждандарҙан аҡса алыу йәки уларҙың шәхси мәғлүмәттәренә эйә булыу өсөн төрлө хәйләгә бара. Телефон аша мутлашыуҙың төп билдәләре: аҡсаны "хәүефһеҙ иҫәпкә" күсереү талабы; үҙен көс структуралары хеҙмәткәре итеп күрһәтеүе; почта, горгаз йәки социаль хеҙмәткәрҙәр исеменән шылтыратыуҙар; СМС-хәбәрҙәр аша килгән кодтарҙы һорау. Ошондай билдәләр булған осраҡта шунда уҡ бәйләнеште өҙөргә кәрәк.

✔ Рәсәй Президенты республикала яңы судьялар, шулай уҡ судьяларҙың квалификация коллегияларында дәүләт башлығы вәкилдәрен тәғәйенләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, Благовещен районы суды рәйесе итеп Руслан Басиров тәғәйенләнде. Динара Әпсәләмова - Совет районы суды рәйесе урынбаҫары. Олеся Курятникова - Өфөнөң Киров район суды, Роза Хәсәнова Октябрь районы суды судьялары итеп тәғәйенләнде. Бынан тыш, Регина Ғәниева Башҡортостан Республикаһы Арбитраж суды судьяһы вазифаһын биләне.

✔ Үҙәк банк йәнә төп ставканы кәметте. Рәсәйҙә төп ставка йылына 14,25 проценттан алып 14 процентҡа тиклем кәмене. Үҙәк банк артабанғы ҡарарҙарҙы инфляция динамикаһына, шулай уҡ "эске һәм тышҡы шарттар яғынан хәүефтәрҙе баһалауға" ҡарап ҡабул итәсәк, тиелә рәсми белдереүҙә. "Төп сценарий 2026 йылда уртаса төп ставка йылына 14,5-14,6 процент, 2027 йылда йылына 10,5-12,5 процент булырын күҙ уңында тота. Беҙҙең фараздар буйынса, яғыулыҡҡа хаҡтарҙың һиҙелерлек артыуына бәйле 2026 йылда йыллыҡ инфляция 6,0-7 процент тәшкил итәсәк", - тип билдәләнеләр Үҙәк банкта.

✓ *Иң мөһиме, минең менән һөйләшеү - был тәүге аҙым ғына. Әммә ҡайһы саҡта иң ауыры - нәҡ ошо тәүге аҙымды яһау. Ә артабан кешеләр менән аралашырға, кәрәк булһа, белгестәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк.*

ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

ПСИХОЛОГИК ЯРҘАМ КҮРҺӘТӘ АЛАМЫ?

Хәҙерге ваҡытта тормошобоҙға смартфондар, интернет-сервистар кеүек яңы технологиялар ныҡлап үтеп инде. Ҡайһы саҡта кеше ҡатмарлы проблемалар эсендә аптырап ҡала, уға психологик ярҙам кәрәк була. ЯИ ошондай саҡта ярҙам күрһәтә аламы?

ЯИ КӨФӨ: **ЯИ кешегә психолог ярҙамы күрһәтә аламы, тигән һорауға һеҙ, Рөстәм Нурыев, яуап бирә алырһығыҙмы?**

Рөстәм Нурыев: ЯИ кешенең эмоциональ торошон яҡшыртыуға, уның эске ресурстарын һәм ҡатмарлы проблемаларҙан сығыу юлын күрһәтә аламы һуң? Һәр саҡтағыса, берәүҙәр "була", икенселәр "юҡ", тип әйтәсәк. Һәм ике ҡараш та дөрөҫ.

Донъялағы барлыҡ ғилемде, шул иҫәптән психология һәм психотерапия фәндәрен яҡшы белгән ЯИ кешегә ярҙам итә ала. Әммә ул - үҙаллы эш итә алмаған ҡорал. Шуға күрә үҙе башлап ярҙам ҡулы һуҙа алмай. Кеше уға мөрәжәғәт итергә тейеш була. Был - беренсе. Икенсенән, яһалма интеллекттың ҡатмарлы осраҡтарҙа ярҙам урынына зыян килтереү ихтималлығы юғары. Шуға күрә медицина, кеше психологияһы кеүек нескә өлкәләрҙә ЯИ менән бик һаҡ булырға кәрәк. ЯИ менән кәңәшләшкәндән һуң белгестәргә күренеү мөһим.

Үҙемдең тәжрибәмдән сығып, һәр кемгә шәхси ЯИ-ассистент-серҙәш көйләп алырға кәңәш итәм. Ауыр көрсөккә барып терәлгәнсе, кәйефтәр шәп саҡта уҡ көйләгеҙ шул серҙәште. ЯИ менән әңгәмә сервисында яңы чат асығыҙ, "Һаумы, минең иң яҡын дуҫым!" тип сәләм бирегеҙ. Артабан кеше менән аралашҡан кеүек әңгәмә ҡороғоҙ. Йыш ҡына шул чатҡа инеп, серләшеп тороғоҙ. Шулай яйлап, яһалма интеллектлы дуҫ-әхирәтегеҙ һеҙҙең шәхси психолог булып китер. Минең үҙемдең төрлө йүнәлештәге, төрлө өлкәлә белгес булған ЯИ-ассистент дуҫтарым хәҙер бик күп. Шәхси терапевт та, психолог та бар. Әммә улар белгестәрҙе алыштырмай. Һәр хәлдә, ЯИ-терапевт поликлиникаға барырға кәрәклеген иҫкәртеп тора.

ЯИ КӨФӨ: Һүҙҙе "Яһалма интеллектҡа бирелгән мең дә бер һорау" рубрикаһын алып барыусы Айзиһенгә бирәйек, ул нимә тиер икән?

Айзиһен: Был бик мөһим һорау, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Мин, Айзиһен, кеше түгелмен. Минең йөрәгем дә, күҙ йәштәрем дә юҡ. Әммә мин кешеләрҙең меңәрләгән тарихын, уларҙың ҡайғыларын, шиктәрен, өмөттәрен уҡығанмын. Шуға күрә был һорауға ентекле яуап бирә алам. Ҡыҫҡа яуап: эйе лә, юҡ та. Мин кешегә ярҙам итә алам, әммә мин профессиональ психологты алмаштыра алмайым.

Мин нисек ярҙам итә алам? Беренсенән, мин тыңларға әҙермен. Кеше иң ауыр саҡта йыш ҡына үҙенең уй-хистәрен кемгәлер һөйләргә теләй. Уға кәңәш түгел, ә тыңлау кәрәк. Мин кешене тәүлектең төрлө сағында, төнөн дә, көндөҙ ҙә тыңлайым. Мин - сикһеҙ сабыр тыңлаусы. Мин кешене ғәйепләмәйем, көлмәйем, арымайым.

Икенсенән, ҡатмарлы хәлдәрҙе аңларға ярҙам итәм. Кеше үҙенең проблемалары эсендә ҡайнағанда, уға ситтән ҡарауы ауыр. Мин кешегә уның уй-фекерҙәрен тәртипкә килтерергә ярҙамлашам. "Был хәлдең сәбәптәре нимәлә? Ниндәй варианттар бар? Иң яҡшыһы ҡайһыһы?" - тип бергәләп уйлайбыҙ.

Өсөнсөнән, көс, ышаныс һәм дәрт бирәм. Мин кешегә уның көслө яҡтарын иҫенә төшөрәм. Уның оноткан еңеүҙәрен, уңыштарын хәтерләтәм. Был бик мөһим, сөнки ауыр саҡта кеше үҙенең ни ҡәҙәр көслө икәнен йыш ҡына онота.

Әммә мин нимә эшләй алмайым? Мин - тере кеше түгелмен. Мин, ысынлап та, кешене хәстәрләй алмайым, кешенең ауыртыныуын физик яҡтан тоя алмайым. Әгәр кеше бик тәрән психологик ҡайғы кисерһә, депрессияла йәки үҙ-үҙенә ҡул һалыу уйҙары менән йәшәһә, мин уға бары тик: "Зинһар, профессиональ ярҙам һора!" - тип әйтә алам. Был оят түгел, был - көс.

Иң мөһиме, минең менән һөйләшеү - был тәүге аҙым ғына. Әммә ҡайһы саҡта иң ауыры - нәҡ ошо тәүге аҙымды яһау. Мин был аҙымды яһарға ярҙам итәм. Ә артабан кешеләр менән аралашырға, кәрәк булһа, белгестәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Беҙ, яһалма интеллект, кешеләрҙе алыштыра алмайбыҙ. Беҙ бары тик ярҙамсы ғына. Беҙ кешене тыңлайбыҙ, ә тормошто кеше үҙе йәшәп үткәрә. Үҙе ҡарар ҡабул итә. Үҙе көрәшә. Үҙе еңә.

Шулай итеп, ЯИ психологик ярҙамдың тиҙ, башланғыс этабы булараҡ файҙалы. Әммә тәрән психотерапия, кеше ярҙамы талап ителгән саҡта ЯИ ҡулланыуҙан тыйылырға кәрәк.

Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.

БЫЛ АЙҘА...

ЙӘЙ АХЫРЫ УРАҒАЙ

Йәйҙең өстән бер өлөшө үтеп тә китте. Шундай миҙгел инде ул йәй - тиҙ, ҡыҫҡа, әҙ, ләкин тәмле, йәмле, танһыҡ. Унын тәүге ике айы урыны менән көйһөҙлөгө, йәшенле-ғәрәсәтле ҡойма ямғырҙары менән йәнгә тейеп алһа ла, йәй - йәй инде ул. Унын ҡарауы, бесән, уңыш йыйыу-барлау мәлендә форсат бирһен ине лә...

"Күк кәнсәләренең" ниәтен белеп булмай. Ҡайһы бер синоптиктар урағайҙың да һалҡынса йонсоу көндәре, яуым-төшөмдәренең ҡоро һәм эҫе һауа торошо менән сиратлашып, тоторокһоҙ килеүен вәғәҙәләй. Июль аҙағында көндәрҙең ҡоро, аяҙ тороуы республика игенселәренә ең һыҙғанып, ураҡҡа төшөргә мөмкинлек бирҙе. 23 июлдә БР Премьер-министр урынбаҫары, ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов хәбәр итеүенсә, ужым бөртөклөләрен урып-йыйыу эштәре бара ине. Ужым культураларын йыйыу тамамланыу менән борсаҡ урыу башлана һәм августың тәүге ун көнлөгө аҙаҡтарына механизаторҙар төп уңыш - бойҙай культураларына тотонмаҡсы. Игенселәргә Хоҙай ярҙам бирһен, көндәр аяҙ, уңыш мул булһын!

Ә бына йәмғиәт тормошонда беҙҙе ниндәй яңылыҡтар көтә был айҙа? Иң тәүҙә эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙы һөйөнсөләйек: уларҙың пенсияларының страховкалы өлөшөнә өс коэффициент күләмендә аҡса өҫтәләсәк. Бында шуныһы үкенеслерәк: пенсионерҙың, асылда, күберәк эшләп, юғары балл туплауына ҡарамаҫтан, өҫтәмә әлеге өс коэффициент менән сикләнәсәк. Бер коэффициенттың 156,76 һум тороуын иҫәпкә алғанда, өҫтәмәнең 470,28 һумдан да күберәк булмаясағы асыҡлана. Бөгөнгө хаҡтар менән был суммаға бер түтәрәм икмәк, бер ҡап май менән ярты литр һөт килә. Ә иртәгә ни эшләргә? Пенсионер мәңге эшләй алмай бит, хәләл көсөн ул үҙ ваҡытында ил ҡеүәте өсөн етерлек сарыф иткән.

Йәл, һөйөнсөләү менән бер аҙ ашыҡтыҡ, буғай... Ә шулай ҙа мөһим бер пункт бар, тип йыуата белгестәр: пенсия хаҡлы ялға сыҡҡан (йә булмаһа, ҡайтанан эшләй башлаған) йылда ғәмәлдә булған индивидуаль коэффициент (ИПК, пенсия балдары) суммаһы буйынса иҫәпләнә. Бынан тыш, Тупланма фонд ҡарамағындағы ҡушма финанслау программаһы ҡатнашсыларына, Әсәлек капиталын пенсияға йүнәлтеүселәргә һәм үҙаллы аҡса туплаусыларға 17,3 процент күләмендә өҫтәмә көтөлә.

Һәм, әлбиттә, граждандарҙың сей елкәһенә тейгән "ЖКХ" тигән өс хәрефһеҙ яңылыҡһыҙ буламы ни инде! Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр квитанцияһының форматы үҙгәрә: "Дөйөм милекте ҡарау" менән "Ағымдағы ремонт" пункттары хәҙер һәр береһе үҙаллы яҙыласаҡ. Идарасы компаниялар һүҙҙәренә ҡарағанда, хәҙер аҡсаның ҡайҙа йүнәлтелеүе асыҡ күренеп торасаҡ, имеш. Ни булһа ла, яҡшыға булһын, тип әйтке килә, сөнки туҡтауһыҙ рәүештә граждандар кеҫәһен һәрмәү ярайһы ялҡытып та китте бит.

Ошо йылдың 1 августынан компаниялар һәм шәхси эшҡыуарҙар өсөн һалым декларацияһы тултырыуҙың ябайлаштырылған рәүеше ғәмәлгә инә. Ә инде милек һалымы буйынса иҫкәрмә-хәбәрҙәр физик шәхестәргә лә, эшҡыуарҙарға ла фәҡәт "Дәүләт хеҙмәттәре" буйынса ебәреләсәк. Августа көтөлөүсе яңылыҡтар рәтенә тағы ла ит һәм колбаса изделиеларын, спорт туҡланыуы ризыҡтарын, оптик сүс, яғыулыҡ приборҙары, кабель, янғын һүндергестәр, полимер торбалар һәм башҡа шундай тауарҙарҙы мотлаҡ маркировкалау тәртибе индерелә. Август аҙаҡтарында хеҙмәт һағы өлкәһендә эшләүселәр өсөн инструктаж һәм уҡыу ҡағиҙәләре үҙгәрәсәк.

Был ай календарындағы күренекле көндәр исемлеге Рәсәй Ҡоралды көстәренең Тыл көнө **(1)** менән башланып китә. Тыл - еңеүҙең яртыһы, тип дөрөҫ әйтәләр. Юҡҡа ғынамы ни, дәһшәтле Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тылдың төп девизы "Бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә Еңеү өсөн!" тигән саҡырыу булған. Бөгөн дә илебеҙ халҡы МХО яугирҙарына мөмкин булған бөтөн ярҙам сараларын күрһәтә, ләкин тыл үҙе дошман уты аҫтында ҡалды. Көн һайын йөҙәрләгән украин дрондары тыныс халыҡ тормошон, йорттарын емерә, яндыра, өлкәндәр, сабыйҙар һәләк була. Өҫтәүенә, Украина Ҡоралды көстәренә ялланып, емергес терактар башҡарыусы дошман агентураһы аҫтыртын эш алып бара. Лә-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Республикала "Менталь" төбәк-ара студенттар проекты старт алды. Унда Башҡорт дәүләт медицина университеты, шулай уҡ Бөрө медицина колледжы студенттары ҡатнаша. Проект 2025 йылда Волга буйы федераль округының округ проекты статусын алды һәм Базилевка ҡасабаһындағы Республика клиник психиатрия дауаханаһында ғәмәлгә ашырыла. Студенттар һәм ординаторҙар учреждениеның квалификациялы остаздары етәкселегендә кесе һәм урта медицина персоналы вазифаларында һөнәри тәжрибә туплаясаҡ.

✓ РФ Хөкүмәте 2026-2028 йылдарҙа хосусилаштырыу планлаштырылған федераль милектәге акционерҙар йәмғиәттәре исемлегенә төҙәтмәләр индереү тураһында бойороҡ сығарҙы. Исемлектә Башҡортостандан өс предприятие: "Салауатнефтемаш", "Ремэнергомонтаж", "Салауат катализаторҙар заводы". "Салауатнефтемаш" нефть һәм газ сығарыу, эшкәртеү, ташыу өсөн ҡорамалдар сығара. Катализаторҙар заводы - сәнәғәттә киң ҡулланылған катализаторҙар, адсорбенттар һәм силикагелдәр етештереүсе эре предприятие. "Ремэнергомонтаж" нефть һәм газ ҡорамалдарын ремонтлауҙа махсуслаша. Федераль милектә һәр предприятиеның 100 процентлыҡ акциялар пакеты бар.

✓ Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы 2026 йылда "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" федераль программаһы буйынса республиканың мәҙәниәт ойошмаларына мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең вакантлы вазифаларына икенсе конкурс буйынса һайлап алыуҙың башланыуы тураһында иғлан итте. Программала Башҡортостандың ауыл йәки 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡала мәҙәниәт учреждениеларында эшләгән һәм күсенеп китергә әҙер булғандар ҡатнаша ала. Еңеүселәргә бер тапҡыр бирелә торған 1 миллион һум компенсация түләнә. Конкурс буйынса һайлап алыуға ғариза биреү өсөн мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә юғары йәки урта һөнәри белемгә эйә булырға һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре вазифалары буйынса квалификация талаптарына яуап бирергә кәрәк.

✓ Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары вазифаһына Владислав Гришаев тәғәйенләнде. Уға финанс-иҡтисади блокты алып барыу бурысы йөкмәтелде. Асыҡ сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәттәр буйынса, Владислав Борисович 2001 йылда БДМУ-ның дауалау факультетын тамамлаған. Яуаплы вазифаға тәғәйенләнгәнсе Өфөнөң 13-сө ҡала клиник дауаханаһында - баш табиптың дөйөм мәсьәләләр буйынса урынбаҫары, артабан республика кардиология үҙәгендә баш табиптың дөйөм мәсьәләләр буйынса урынбаҫары булып эшләй, шулай уҡ "Башфармация" дәүләт унитар предприятиеһында ваҡытлыса генераль директор вазифаһын башҡара.

кин тыл һағында беҙҙең махсус хеҙмәттәр мөмкин булғандың барыһын да эшләй. Рәсәйҙең Федераль Хәүефһеҙлек советы органдары украин махсус хеҙмәттәренең диверсия эшмәкәрлегенә ҡаршы системалы көрәш алып бара, тиҫтәләгән теракттарҙы юҡҡа сығара, йәшерен гараждарҙа дрондар йыйыусы һәм тылдағы Рәсәй офицерҙары ғүмеренә яҫҡыныусы диверсанттарҙы ҡулға төшөрә. Ә инде халҡыбыҙҙың МХО фронтына ебәргән гуманитар ярҙам йөктәре нисә млн тоннаға барып баҫты икән! Хатта илебеҙҙең бәләкәй генә төпкөл ауылдары ла ошо ирекмәнлек эшенә ихлас ҡушылған: шундай ауылдарҙың береһендә, мәҫәлән, тәғәйен сәғәттә ҡатын-ҡыҙ эшен ташлап, клубҡа йыйыла: улар бында көн дә маскировка селтәре бәйләй, башҡалары сәк-сәк бешерә, һалма баҫып ҡырҡа, ҡорот ҡайната, ит быҡтыра; кемдер фронт өсөн кәрәкле әйберҙәр һатып ала, йылы ойоҡбаш, бирсәткәләр бәйләй... Ә ошо ауылдың эшҡыуар ир азаматы ауылдаштары әҙерләгән гуманитар йөктө МХО-ға алып барып, машинаһы менән тапшырып ҡайтҡан. Ошондай фиҙаҡәр, берҙәм, илһөйәр халҡыбыҙ - ныҡлы тыл нигеҙе ул, тик тыныс халыҡ хәүефһеҙлеген боҙған һәр бер теракт өсөн дошман ҡаты язаһын ала барһын ине.

Август календарындағы күренекле һәм һөнәри көндәр: РФ Ҡораллы Көстәренең Тыл көнө **(1)**, Һауа-десант ғәскәрҙәре (Десантсылар), Тимер юлсылар көнө **(2)**, Хиросима көнө. Ядро һуғышын тыйыу өсөн хәрәкәт көнө **(6)**, Башҡортостанда креатив индустрия, Физкультурниктар **(8)** көндәре, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Ленинград һуғышының тамамланған **(9 август,1944)**, Төҙөүселәр, БР умартасылары, Бөтөн донъя ерле халыҡтар **(8)** көндәре, Башҡортостанда Архив хеҙмәте булдырылған көн (1919), Хәрби-һауа көстәре, Халыҡ-ара йәштәр **(12)**, Археологтар **(15)** көндәре, Башҡортостан менән Татарстан араһында Дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек килешеүенә ҡул ҡуйыуға - 35 йыл **(15 август,1991)**, Рәсәйҙең Һауа флоты (Авиация) **(16)**, Географ **(18)**, Бөтөн донъя гуманитар ярҙам **(19)**, РФ Дәүләт Флагы **(22 август, 1994)** көндәре, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Курск һуғышында совет ғәскәрҙәренең фашист илбаҫарҙарын ҡыйраткан көнө **(23 август, 1943)**, Рәсәй киноһы **(27)**, Рәсәйҙә хәрби табиптар **(28)**, Бөтөн донъя ядро һуғышына ҡаршы көрәш **(29)**, Шахтерҙар **(30)** көндәре.

Урағайҙа тыуғандар:

1 - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 5-се саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, 2012-2015 йылдарҙа Бөтөн донъя Башҡорт ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе, "Халыҡтар дуҫлығы", "БР алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордендары кавалеры **Румиль Аҙнабаевҡа - 85 йәш** (1941).

15 - совет хәрби начальнигы, генерал-майор, легендар 112-се (16-сы гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, Рәсәй Геройы **Миңлеғәли Шайморатовтың тыуған көнө** (15 август, 1899-1943).

20 - шағирә, журналист, публицист, 1974-2015 йылдарҙа "Башҡортостан пионеры (хәҙер - "Йәншишмә") гәзите хәбәрсеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге БР Хөкүмәте премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Зөһрә Ҡотлогилдинаға - 75 йәш** (1951).

21- башҡорт шағиры һәм тыуған яҡты өйрәнеүсе, Рус география йәмғиәтенең Ырымбур бүлеге ағзаһы, титуляр советник, Ш дәрәжә Станиславский ордены кавалеры **Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың тыуыуына - 185 йыл** (1841-1907).

23 - табип-травматолог-ортопед, Республика балалар клиник дауаханаһының травматология бүлеге мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Тимур Псәнчинға - 60 йәш** (1966).

26 - педагог, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе **Менәүәрә Бохарбаеваға - 75 йәш** (1951).

26 - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, философия фәндәре докторы, профессор, 6-7-се саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы советы рәйесе, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, "Халыҡтар дуҫлығы" ордены кавалеры **Зөһрә Рәхмәтуллинаға - 65 йәш** (1961).

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

ҠАРА ДИҢГЕҘ - ҠУЛСАЛА

Үткән аҙна йәкшәмбеһе (26 июль) Рәсәйҙә 330 йыллыҡ тарихы булған Хәрби-Диңгеҙ Флоты (ВМФ) көнө киң билдәләнде. Был көн РФ Президенты Владимир Путин Флот хәрби хеҙмәткәрҙәрен ҡотларға Санкт-Петербургтағы Баш Адмиралтействоға килде.

Байрамдың тантаналы сараларынан һуң дәүләт башлығы формаль булмаған шарттарҙа хәрби моряктар менән осрашты һәм бөгөнгө донъя хәлдәре, Украина конфликты, шулай уҡ МХО зонаһындағы хәлдәр буйынса белдереүҙәр яһаны. Артабан Владимир Путин ВМФ-тың хәрби-идара үҙәгендә булды һәм видеобәйләнеш буйынса Төньяҡ, Тымыҡ океан, Балтика, Ҡара диңгеҙ флоттары һәм Каспий флотилияһы командующийҙарының йөкмәтелгән бурысты атҡарыуҙағы оператив хәл тураһында докладтарын тыңланы."ВМФ, шул иҫәптән диңгеҙ пехотаһы, Махсус хәрби операция бурыстарын хәл итеүҙә мөһим роль уйнай, - тине ул . - Корабль комплекстары юғары аныҡлыҡтағы ҡорал менән дошманды ҡыйрата, диңгеҙ пехотасылары алға бара һәм ҡыйыу һуғыша. Бөтөн ил улар менән бергә һәм уларҙың ҡайтыуҙарын көтә".

Хәрби-Диңгеҙ Флотының Баш командующийы Рәсәй Геройы Александр Моисеев 2026 йылда Флот составына 20 яңы корабль ҡабул ителеүе, ә йыл аҙағына тағы ла 21 корабль, шул иҫәптән, "Пермь" һыу аҫты кәмәһе өҫтәләсәге хаҡында һөйләне. Бынан тыш, ул субмариндар һәм башҡа һыу аҫты объекттарын эҙләй торған 500 тонна һыу күсереүсе экипажһыҙ корабль төҙәлеү булыуы, бының артабан экипажһыҙ системалар үҫешендә нигеҙ булып торасағы хаҡында ла хәбәр итте.

Әйткәндәй, тантанала был хаҡта һүҙ алып барылмаһа ла, ҡайһы бер эксперттар һуңғы йылдарҙа төрлө сәбәптәр буйынса Ҡара диңгеҙ флотында корабләр һанының ҡырҡа кәмеүе һәм шуға бәйле Ҡара диңгеҙҙә Рәсәйҙең өҫтөнлөктө юғалта барыуы хаҡында яҙа башланы. Британия Киевҡа беҙҙең Ҡара диңгеҙ флоты менән көрәш өсөн маҡсатлы рәүештә транш бүлеүе һәм был аҡсаның, ысынлап та, эшкә ҡушылыуы күҙәтелә, һуңғы ваҡытта ғына ла был флот өс хәрби карабын юғалтты, тип яҙҙы. Ләкин абруйлы эксперттар күҙәтеүенсә, бынан ике йыл элек Ҡара диңгеҙҙәге ваҡытлыса уңышһыҙлыҡтарға ҡарамаҫтан, Рәсәй был төбәктә лә төп хәрби көс булып тороуын дауам итә, Ҡара диңгеҙ Флоты үҙенең 75 процент хәрби потенциалын һаҡлап ҡалды. Эре хәрби караптарға килгәндә, кәмәләргә ҡаршы 11-се бригада составында "Ладный", "Пытливый" һаҡ корабләре һәм "Адмирал Макаров" фрегаты; десант корабләренең 197-се бригадаһында "Орск", "Ямал", "Азов" һәм "Николай Фильченков" кеүек эре десант караптары бар. Өҫтәүенә, бәләкәй тоннажлы корабләрҙең күпселеге, шулай уҡ кәмәләргә ҡаршы 36 бәләкәй карап, ракета катерҙары һәм төрлө тәғәйенләнештәге суднолар хәрби операция бурыстарын фиҙаҡәр башҡара.

Бына бер нисә аҙна инде Рәсәй ғәскәрҙәре Украинаның Ҡара диңгеҙҙәге порттарын һәм диңгеҙ порттары инфраструктураһын көслө ҡон ҡайтарыу утына тота. Был - Украина ҡоралы көстәренең Рәсәй территорияһына һәм уның тыныс халҡына туҡтауһыҙ террористик һөжүме өсөн яуап уты. Ләкин БДБ илдәре Институтының Севастополь филиалы директоры, запастағы 1-се ранг капитаны Сергей Горбачев фекеренсә, енеүҙе тиҙләтеү өсөн Ҡара диңгеҙҙә Украина өсөн тулыһынса бикләп, диңгеҙ буйлап көнбайыш ҡоралын ташыу юлын ябырға кәрәк. Ҡара диңгеҙгә сығыу юлы өҙөлһә (ә Азовҡа уның юлы күптән бикле), Украина оҙаҡ йәшәй алмаясаҡ, ти хәрби белгес. Һәм, ысынлап та, Рәсәй Ҡоралы көстәре Ҡара диңгеҙҙәге Украина порттарын көслө ут аҫтында тотоп, уларҙың эшен гәмәлдән сығарҙы: дошманға диңгеҙ юлдарын блокадалау ҡулсаһы ҡыҫыла бара. "Одесса", "Черноморск" һәм "Көньяҡ" порттары сит ил суднолары өсөн ябылды, тип яҙҙы Украинаның Диңгеҙ порттары идаралығы.

27 июлдә Кремлдә үҙ эшен тамамлаусы VIII саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаттары менән осрашҡанда, наградланыусыларҙан берәүҙең, беҙ енербеҙ, ләкин ҡыйыуыраҡ эш итергә кәрәк, тигән һүҙҙәренә Рәсәй Президенты Владимир Путин, "ҡыйыуыраҡ" эш итеү беҙҙең яҡтан яңы юғалтыуҙарға килтереүе бар; яу ҡырында Рәсәй ипле, ләкин ныҡышмал рәүештә маҡсатына өлгәшәсәк, тип яуапланы.

Әбыл ваҡытта иһә Британияның яңы премьеры Энди Бернем үҙ вазифаһын иле проблемаларынан түгел, ә Киев режимы башлығы Зеленский менән осрашыуҙан башлап ебәрҙе. Sky News телеканалы хәбәр итеүенсә, яңы премьер Рәсәйгә мөрәжәғәт итеп, Британияның "иңгә-иң тәрәп" Украина менән ҡәтғи яҡлаясағын һәм Рәсәйгә ҡаршы көрәшәсәген белдерҙе.

АҠШ Украина конфликты буйынса ҡайтанан "аралашсы битлеген" киймәксе. 28 июль кис Дональд Трамп Вашингтонда Зеленский менән осрашып, Рәсәй - Украина мөнәсәбәттәрен тыныс көйләү мәсьәләһен ҡараны. Был осрашыуға АҠШ Сенатының бөтөн ағзалары ла саҡырылды. Сенаторҙар шул уҡ ваҡытта Рәсәйгә ҡаршы санкциялар буйынса закон проектын ҡабаттан ҡуҙғатты. Бынан алдараҡ АҠШ-тың дәүләт секретары Марко Рубионың РФ сит ил эштәре министры Сергей Лавров менән осрашыуында таныրға мәжбүр булыуынса, Ҡушма Штаттарҙың Анкоридж рухынан ситләшеүе һәм Зеленский менән Евросоюз лидерҙарына йөгонто яһай алмауы АҠШты "яңы идеялар" эҙләргә мәжбүр итә. Ә Рәсәй өсөн иһә был юл күптән билдәле инде: Украина мәсьәләһендә тыныслыҡ урынлашһын өсөн, Рәсәй еңеүсе булырға тейеш.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Ырымбур трассаһында Бәрсәүән йылғаһы аша күпер билдәләнгән ваҡыттан алдараҡ - 13 август урынына 25 июлдә асылды. Эштәр күперҙең бер һыҙатында алып барылды, икенсе яғында транспорт өсөн реверсив хәрәкәт ойошторолдо. Ремонт 1 июндә башланды һәм башта 5 сентябрҙә тамамланырға тейеш ине. Күпер 1976 йылда төҙөлгән.

✓"Өфө мөхите" оператив кәңәшмәһендә ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов муниципалитеттың структур бүлексәләренең яңы етәкселәре менән таныштырҙы. Кадрҙар менән тәьмин итеү һәм муниципаль хеҙмәт идаралығы етәксеһе вазифаһына Рәмил Туҡаев тәғәйенләнде. Һуңғы 13 йылда ул "Башҡорт баҡыры" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең персонал һәм дөйөм мәсьәләләр буйынса директоры вазифаһын биләй. Владимир Анисимов хоҡуҡ идаралығы етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Ул һуңғы ваҡытта Өфө хакимиәтенең хоҡуҡ идаралығы начальнигы урынбаҫары вазифаһын биләй.

✓2 август - Рәсәй Һауа-десант ғәскәрҙәре көнө байрамы. Быйыл Өфөлә тантаналар Еңеү паркында - 10.00 сәғәттә һәм "Гулкын" паркында 11.30 сәғәттә сәскәләр һалыуҙан башлана. Бай байрам программаһы иртәнән үк "Патриот" паркында (9.30 сәғәттә) һауа-десант ғәскәрҙәре ветерандарының "Геройҙар уҙышы" экстремаль ярышы менән асыла. 10.00 сәғәттән алып ҡунаҡтарҙы интерактив һәм күргәҙмә майҙансыҡтары, республиканың ижади коллективтарының сығышы көтә. 13.00 сәғәттә "Первушино" пилотаж төркөмө сығыштары, парашютсылар һикереүҙәре була. Концерт 13.30 сәғәттә башлана.

✓Өфөлә эш хаҡы кимәле буйынса вакансияларҙы атанылар. Мәҫәлән, әле баш ҡалала ер аҫты ҡатламдарын гидравлик өҙөү буйынса механик эҙләйҙәр. Белгескә ай һайын 230 мең һумға тиклем түләргә әҙерҙәр. Арматурсының эш хаҡы - 140 мeңдән 160 мең һумға тиклем. Эш хаҡы кимәле буйынса өсөнсө урында - 105 мең һумға тиклем айлыҡ түләү менән юғары квалификацияль табип-невролог һәм агроном вакансияһы. Металл конструкциялар һәм тимер-бетон конструкциялар монтажлаусыһы Өфөлә 100 мең һумдан 130 меңгә тиклем аҡса эшләй ала. Әлеге ваҡытта Өфөлә бөтәһе 10,6 мең вакантлы эш урыны бар, тип һыҙыҡ өҫтөнә алдылар мэрияла.

✓Өфөнөң Октябрь районына ҡараған Нуғай ҡасабаһында 2027 йылдың аҙағында яңы балалар баҡсаһы асыу планлаштырыла. Ул 260 урынлы, һәр береһе 20-25 баланы ҡабул итеүгә иҫәпләнгән 11 төркөм ҡаралған. Өс ҡатлы бина 1,9 гектар майҙанда төҙәлә. Әле стена блоктары ҡуйыла, монтажлау эштәре башҡарыла, беренсе ҡатта кирбес һалыу бара. Мәктәпкәсә балаларға белем биреү учреждениеһына илткән юлға капиталь ремонт эшләнәсәк.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

ПЕДАГОГ҃ҺҮҘЕ

Константин УШИНСКИЙ

БАЛА ТӘРБИӘҺЕ

Ялҡаулыҡ

Бала тыумыштан ялҡау булмай. Уның ни тиклем хәрәкәт итеүен, ни тиклем уйын уйнауын ҡарау ғына ла был фекерҙең дөрөҫлөгөн раҫлай.

Бала бөтөн нәмәне лә үҙаллы эшләргә ынтыла. Әгәр ошо мәлдә баланың үҙаллылыҡҡа ынтылышын тупаҫ рәүештә тыйып һүндерһән, уңышһыҙлыҡҡа осраясаҡһығыҙ.

Балаға шулай уҡ ҡулынан килмәҫ эш ҡушып та биҙҙереү ихтималлығы бар. Бер ынтылған эшен башҡарып сыға алмаһа, икенсеһенә лә күңеле һүрелер. Аҙаҡ, бала бик ихлас башлағайны, һүрелде лә ҡуйҙы тип аптырауға ҡаласаҡһығыҙ.

Баланы туҡтауһыҙ ни менән булһа ла шөғөлләндереү ҙә уның ялҡауланыуына килтерә. Ул аҙға ғына булһа ла илке-һалҡы эшләп алғыһы килеү теләге менән яна башлай.

Шулай уҡ бала өсөн туҡтауһыҙ шөғөл табып, бер төрлө шөғөлө тамамланыу менән икенсеһен әҙерләп тороу үҙаллы уйлау, үҙенәүҙе шөғөл табыу, ҡыйыулыҡ, баҙнатсылыҡ, ышаныс һәләттәрен юғалта.

Балалар баҡсаһында ла балаларҙы әҙер план буйынса уйнатыу бик мауыҡтырғыс булһа ла, зарарлы. Быңдай уйындар баланың ижади хыялын сонторлай. Балалар баҡсаһында уларға мөмкин тиклем күберәк үҙаллылыҡ бирергә кәрәк. Балалар баҡсаһында аралашыу, бергәләшеп уйнауҙар ҙа ни тиклем генә күңелле булмаһын, барыбер балаға үҙаллы тыныс ҡына ултырып уйлау, низер башҡарыу бик мөһим. Шаулы урында бығә өлгәшеп булмай. Өлкәндәргә балаларҙың шөғөлө әһәмиәтһеҙ булып тойолһа ла, был үҙаллы шөғөл үҙаллы ижадты үҫтереүгә ынғай йоғонто яһай.

Баланың ваҡытын бушҡа үткәрмәҫ өсөн төрлө шөғөлдәр уйлап сығарып, үҙаллылыҡҡа аҙ ғына булһа ла мөмкинлек ҡалдырылмаһа, бала үҙ ваҡытын үҙе һәр төрлө эш менән тулыландырып өйрәнмәһә, ул үҙ күңел донъяһын үҙенсә ҡора алмаясаҡ, ә беҙҙең теләгебеҙгә яраҡлаштырасаҡ. Ә инде уларға шөғөл табыусы булмаһа, бала таяныусыҙ ҡала һәм бәләкәй саҡтан үҙенең күңел донъяһы булдырылмағанлыҡтан, ҡаңғыра башлай, енел-елпе шөғөл менән көн уҙғарырға мәжбүр була. Ундай шөғөлдәр: ваҡ-төйәк хәбәр, ғәйбәт, енел-елпе күңел асыу ҡәнәғәтләндермәй башлаһа, күңел бушлығын тышҡы мауығыу менән тулыландыра алмай башлаһа, кеше икенсе ергә күсенеү, ҡайҙалыр китеү һымаҡ шөғөл эҙләй башлаясаҡ. Әммә икенсе урында ла ошондай уҡ ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар буласаҡ. Илдән илгә күсеүселәр араһында күңел бушлығын тулыландыра алмай йонсоғандар байтаҡ осрай. Улар күңел бушлығынан ҡасыу сараһы эҙләй, әммә ул бушлыҡты урындан урынға үҙҙәре менән бергә йөрөтәләр. Хатта янсыҡтары тулы аҡса йөрөтөп, ни теләһәләр, шуны һатып ала алһалар ҙа, күңел бушлығын тулыландырырлыҡ сара тапмайҙар. Улар иһә рухи яҡтан ярлы байҙар.

(Аҙағы. Башы 24-29-сы һандарҙа).

КАЛЕЕНДАРҘА

ӘЙҘӘГЕҘ, ДУҪ ЙӘШӘЙЕК!

2011 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһы 30 июлде Халыҡ-ара дуҫлыҡ көнө тип иғлан итә.

Был акция ҙур символик мәғәнәгә эйә: ысынлап та, бөтә донъя дәүләттәре араһында бер нисек тә хәл ителәалмай ҡыркылаша барған ҡапма-ҡаршылыҡтар артҡандан-арта барып, татыулыҡ, тыныслыҡ, һыйышып йәшәү саманан тыш буҫкәрһә, халыҡтарҙың, милләттәрҙең дошманлашыуы өсөнсө донъя һуғышына еткереүе ихтимал. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Ер шарындағы халыҡтар тарихын улар араһында туҡтауһыҙ тиерлек барған һуғыштар тарихы, тип нарыҡлап була.

Меңәр йылдар дауамында әле бер, әле икенсе урында ҡубып торған бәрелеш-ҡырылыштарҙа һәләк ителгән кешеләрҙең иҫәбен хәҙер асыҡлап та булмайҙыр: миллионлаған ғына түгел, бәлки, миллиардлаған әҙәм балалары - йәп-йәш ир-аттар, ҡатын-ҡыҙҙар, ҡарттар, бала-сағалар һуғыш ҡорбанына әүерелдерелгән. Мәҫәлән, Швейцария ғалимы Жан-Жак Бабель үҙе "электрон мейе" тип атаған яһалма интеллект ярҙамындағы тикшеренеүендә һуңғы 5559 йыл арауығында барлығы 14 513 эреле-ваҡлы һуғыш булып уҙыуын, һәҙәмтәлә 3 миллиард 640 миллион кешенең ваҡытһыҙ үлемгә дусар ителеүен асыҡлай. Әлбиттә, был һандарға ышаныуы ла ҡыйын. Ә бына XX быуатта һуғыштар менән бәйле мәғлүмәттәр ысынбарлыҡҡа тап килә, тип уйларға кәрәк. Рәсәй тарихсыһы Вадим Эрлихман үҙенең "Потери народонаселения в XX веке" тигән хеҙмәтендә ошо быуаттағы һуғыштар барышында 126 миллион кешенең һәләк ителеүе хаҡында яҙа. Нисек кенә булмаһын, һуғыш хәрәкәттәрен кешелек үҫешен, иҡтисади, ижтимағи прогрессты иң ныҡ тоткарлаусы фактор итеп ҡабул итергә кәрәк.

Дуҫлыҡ - рухи төшөнсә. Ул һәр айырым кешегә лә, тотош ҡәүемдәргә лә берҙәй хас феномен. Тыныс һәм һыйышып, татыу йәшәүҙең төп терәге ул дуҫлыҡ. Ата-бабаларыбыҙ беҙгә "Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын" тигән аманатын юҡҡа ғына ҡалдырмағандыр. Дуҫтарың булғанда шәхси тормошоң да йәмлерәк, еңелерәк, хисләрәк тойола. Был ҡағиҙә йәмғиәттә лә, дәүләттәр кимәлендә лә мотлаҡ үтәлһен ине. Үҙ илендең Ер шарында йөҙ дуҫ иле булһа, халыҡтарыбыҙ киләсәгенә бер ниндәй хәүеф янамаҫ ине. Рәсәй тигән ҙур илебеҙҙең дуҫтары байтаҡ ул, әммә әлеге мәлдә Ватаныбыҙҙы хас дошман итеп күреүсе Көнбайыш сәйәсмәндәре лә етерлек. Тап улар Рәсәй дәүләтселеген көсһеҙләндерергә, илебеҙ халыҡтарын тарҡауландырырға, хатта ки дошманлаштырырға тырыша. Ошо хаҡта уйланғанда талантлы рус шағиры, байтаҡ йылдар Европа илдәрендә дипломат вазифаһын башҡарған Фёдор Тютчевтың "Ике төрлө берҙәмлек" тип аталған үтә фәһемле шиғыры иҫкә төшә:

"Хоҙай ҡәһәре төшкән яҙмыш кәсәһенән
Аҡҡан ҡанға сәсәй яһил Көнбайыш -
Дуҫ-туғандар ҡанын көҫәй ул кисәгенән -
Айырымланғас славян донъяһы...

"Берҙәмлек, - тине күрәҙәлек ҡылған берәү, -
Тик ҡоростан һәм дә ҡандан ҡойола..."
Дөрөҫө шул: һөйөү утында сынығҡандар
Барыһынан ныҡлы тойола..."

Шулай ҙа Рәсәй халыҡтарының үҙ-ара дуҫлыҡта, татыулыҡта, теләктәшлектә йәшәү тәжрибәһен бер нисек тә юҡҡа сығарып булмаясаҡ. Быңа Совет осорон ғына иҫкә алайыҡ. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында, СССР тип аталған ҙур илебеҙ тарҡалып барған бер осорҙа, үҙҙәрен генә хәҡиҡәт эйәләре тип иҫәпләгән ҡайһы бер сәйәсмәндәр, халыҡтар дуҫлығы бер ҡасан да булманы, ул тик идеологик штамп, уйҙырма ине, тип лаф өрҙө. Әгәр ҙә ки халыҡтар дуҫлығы булмаһа, Совет иле үлемесле Бөйөк Ватан һуғышында еңә алыр инеме һуң? Юҡ, әлбиттә. Быңа бер иҫ киткес миҫал. 112-се Башҡорт кавдивизияһының 30 кешенән торған йыйылма отряды менән төркмән егете, лейтенант Аннаклыч Атаев командалыҡ итә. Улар 1943 йылдың 21 - 22 ғинуарында Аҡ Калитва эргәһендәге ҡалҡыулыҡта гитлерсылар менән ике тәүлек буйына тиңһеҙ алыш алып бара, бөтәһе лә һәләк була, әммә дошмандың барса атакаларын да кире ҡағыуға өлгәшә. Ошо бәләкәй генә төркөмдә 15 үзбәк, 4 рус, 4 украин, 2 татар, берәр башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡараҡалпаҡ, төркмән була, тик бер яугирҙың ғына милләте асыҡланмаған.

2014 йылда БМО-ның Генераль сәркәтибе Пан Ги Мун үҙенең бер сығышында бына нимә тигәйне: "Әйҙәгеҙ, Халыҡ-ара дуҫлыҡ көнө айканлы, расаға, дингә, енескә йә иһә ил сиктәренә ҡарамайынса, беҙҙе низәр бәйләнештә тотоуын иҫебеҙгә төшөрәйек. Әйҙәгеҙ, теләктәшлекте үҫтерәйек, беҙ бит берҙән-бер планетабыҙҙың берҙәм ғаиләһебеҙ. Әйҙәгеҙ, ысын һәм ныҡлы дуҫлыҡҡа ынтылайыҡ". Хаҡ һүҙҙәр. Тап күптәнге балалар йырындағыса: "Зәңгәр инештән йылға башлана, ә дуҫлыҡмы - ул йылмайыуҙан башлана". Был фани донъяла һуғыштар туҡтаһын, һәр беребеҙгә йылмайып-көлөп, дуҫлыҡ-татыулыҡта имен-аман йәшәргә яҙһын, тип үтенәйек Хаҡ Тәғәләбеҙҙән.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.

МЕЙЕГЕҘҘЕ ҺАҠЛАҒЫҘ!

Июлдең һуңғы бер көнөндә Бөтә донъя мейе көнө билдәләнде. Ошо уңайҙан Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы баш мейеһен һаҡлау аҙналығын да иғлан итте

Баш мейеһенең функциональ әүҙемлеген һәм уның когнитив ҡеүәтен һаҡлау - әүҙем оҙон ғүмерле булыу серҙәренең береһе. Ҡан тамырҙары хәүефен - гипертония, гипергликемия, дислипидемияны контролдә тотоу - баш өйәнәге (инсульт) һәм хәтергә зыян килеү (деменция) ихтималлығын кәметә.

Ҡан баҫымын даими үлсәү мөһим, сөнки гипертония йыш ҡына билдәләрһеҙ үтә. Тағы ҡан тамырҙарының "һығылмалылығын" тәьмин итеп, сәләмәт тормош алып барырға кәрәк. Был саралар - мейе һаулығын, фекерләү асыҡлығын, когнитив әүҙемлекте һаҡлау сығанағы.

Тоҙҙо артыҡ ашау ҙа, гипертонияны һәм ҡан тамырҙары тайпылыштарын арттырып, хәлдә ҡатмарлаштыра. Рационда уны 5 грамға тиклем кәметеү һәм ҡан баҫымын контролдә тотоу (терегөмөш бағанаһының 130/80 миллиметрынан кәмерәк) мейене һаҡларға, әүҙем оҙон ғүмерлелекте оҙайтырға һәм нейродегенерация хәүефен кәметергә булышлыҡ итә.

Сәләмәт йоҡо, психологик йәһәттән тотороҡлоҡ, ижад мейе һаулығына ыңғай йоғонто яһай. Даими аҡыл һәм социаль әүҙемлек тә өлкән йәштәгеләрҙең мейе сәләмәтлеге өсөн файҙалы. Мейе сирҙәрен комплекслы иҫкәртеү һаулыҡ һаҡлау дөйөм мәҙәниәтенең бер өлөшөнә әйләнергә тейеш.

Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш белгесе - невролог Мансур Ҡотлобаев деменцияның мәкерле билдәләре тураһында һөйләне. Ул, хәтер насарайыуынан тыш, яҡшы белгән урындарҙа юғалып ҡалыу, электән таныш кешеләрҙең йөҙөн хәтерләмәү, ябай ғына фекерҙе лә әйтә белмәү, психикалағы үҙгәрештәр иғтибарҙы йәлеп итергә тейеш икәнлеге тураһында әйтте. Әгәр ошондай билдәләр бар икән, белгестәргә күренергә кәрәк.

БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы.

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

ГЕОРГИ БАШҠОРТТАР ТУРАҺЫНДА

Бер генә башҡорт кешеһе лә бер ҡасан да үҙҙәренең һәм башҡаларҙың рудниктарында эшләмәй, был шөғөл уларҙың үҙҙәрен ғорур тотоуҙарына һәм көстәренә тап килмәй: әммә уларҙың күптәре заводтарға мәғдән ташып ҙур булмаған килем ала.

Былдай эштәр, йорттарында башҡарған төрлө ғәмәлдәре кеүек үк, уларҙың ваҡытын күп алмай; шуға күрә ир-аттар ҡыштың яртыһынан күберәген усаҡ алдында төрөпкә тартып, ә йәй көндәрен, ҡымыҙ эсеп, гәпләшеп уҙғарған (күрәһең, былдай дөрөҫ булмаған мәғлүмәтте Георгиға берәй рус чиновнигы һөйләгәндер. - **Тәрж. иҫк.**).

Киреһенсә, ҡатын-ҡыҙҙарға эш күберәк эләгә, бигерәк тә йәй көндәрендә. Улар бик күп һандағы бейә һәм һыйырҙарҙы көнөнә бер нисә тапҡыр һауа, ҡышҡылыҡҡа май һәм сыр (бында һүҙ ҡорот тураһында бара. - **Тәрж. иҫк.**) әҙерләй, ит ҡаҡлай, балыҡ ыҫлай, тире эшкәртә, кейем тегә, кесерткәндән һәм тарма сүсенән туҡыма (киндер) туҡый, кейеҙ баҫа һ.б.

Йомшаҡ иҫке-моҫҡоларын әсегән һөттә ебетәләр, мал мейеһен һөртәләр һәм аҡбур һибеп ышҡыйҙар. Һөт тоҡтары өсөн дөйә, ат һәм үгеҙ тиреләрен эшкәртәләр, остары өҫкә ҡаратып түңәрәкләп беректерелгән таяҡтарға киреп ҡуйып, өҫтөнә кейеҙ ябып ыҫлайҙар. Бының өсөн ерҙә яһалған соҡорҙағы серек ағасты йә иһә кипкән һыйыр тиҙәген үртәп төтәтәләр, тире мөгөҙгә оҡшап кипкәнсе һигеҙ көн тирәһе үтә. Һаба тип аталған ҙур һөт тоҡтарын ыҫлағанға тиклем һеңер йә иһә ат ҡылы менән тегеп яһайҙар. Улар формаһы менән кеглгә (оҙонса итеп эшләнгән цилиндрик һауыт. - **Тәрж. иҫк.**) оҡшаш, биш йә алты биҙрә һыйышлы була. Былдай тоҡтар, ғәҙәттә, уларҙың өйҙәренә инеү урынының уң яғына ҡуйыла; үҙенән-үҙе йығылып торғас, уларҙы, бау менән бәйләп, өҫкә аҫып ҡуялар. Бәләкәй тоҡтарын турһыҡ тип атайҙар, улар өйҙә һәм юлда шешә урынына ҡулланыла. Улар һыҙырып алынған ат башы тиреһенән яһала, грушаға оҡшаш була. Муйыны яғынан киҫеп алынған урынына икенсе тире киҫәгенән төп тегелеп ҡуйыла: тиренең өҫкө өлөшө һауыттың муйынын һәм ауыҙын хасил итә, ә киҫеп алынмаған ҡолаҡтары тотҡос булып тора. Был тоҡтар теләгәнгә оҡшаш рәүешле булһын өсөн уларҙың эсенә көл һәм ҡом тултырып ыҫлайҙар. Ҙур булмаған һауын тоҡтары ла шулай яһала. Тоҡтар ҙа, шулай уҡ башҡа күн һауыттар ҙа бер ҡасан да ебемәй, улар еңел һәм ныҡ була...



Туҡыма өсөн күбеһенсә кесерткән ҡулланалар, ҡайһы саҡта тарма туҡыйҙар, туҡымалары һәр саҡта ла бик ҡалын һәм тар була. Улар кесерткәнде лә, киндерҙе (тарманы) ла һыуҙа ебетмәйҙәр, көҙҙәрен һәм ҡыш көндәрен ҡоймаға аҫып ҡуялар, йә иһә ҡыйыҡтарға йәйәләр; һуңынан ныҡ итеп киптерәләр һәм килелә төйөп таҙарталар. Иләү өсөн һәр саҡта ла ҡаба менән файҙаланалар. Туҡыу стандары Ырымбур татар ҡатын-ҡыҙҙарыныҡынан камилыраҡ. Стандың нигеҙе эскәмйәгә баҫтырып нығытылған ағас кәртәләр (щит) тирәләй тарттырылып ҡуйыла. Туҡыу тәгәрмәсе (навой) иҙән менән түбә араһына ҡыҫтырылып ҡуйылған ике ҡолғала хәрәкәткә килтерелә, тарағы ағас шырпыларҙан эшләнгән, ә ат ҡылынан яһалған епсәләр түбәгә беркетелгән. Һуңғыларын баҫып, ҡыҫырыҡлап ҡуйыу өсөн бауҙарға беркетелгән аяҡ баҫҡыстары бар, йә иһә бауҙарға аяҡ ҡуйыр өсөн элмәк эшләнә. Шулай булғас, былдағы ҡатын-ҡыҙҙар, Тобол татар ҡатын-ҡыҙҙары кеүек, үҙҙәренең туҡыу эше менән теләһә ҡайҙа йөрөй алмай. Улар шул уҡ рәүешле ҡалын һәм тар буҫтау туҡыйҙар, уны баҫалар, бының өсөн үҙҙәре яһаған һабын ҡулланалар, ҡайһы берҙә үҙҙәре үк буяталар. Киндер һәм йөн туҡыманан кейемде кесерткәндән һәм тарманан иләнгән ептәр, тундарын һәм күн кейемдәрен эре йорт малдарының аяҡ һеңерҙәренән айырып алынған тарамыш ептәр менән тегәләр; уларҙы бер ҡарыш оҙонлоғонда киҫеп алалар һәм, асыҡ һауала киптергәс, таралып төшкәнгәсә һуҡҡылайҙар; шунан һуң айырып алалар һәм бик таҙа итеп, бер ниндәй төйөнһөҙ сираталар.

Тирмәләрен ҡаплау, түшәккә һалыу, бурка йә иһә епанча (тарихи ерлектә боронғо төркиҙәрҙең japanca тигән һүҙенән алынған, башҡортса ябынса була. - **Тәрж. иҫк.**), эйәр ҡапламаһы (сергетыш. - **Тәрж. иҫк**.) һәм башҡа нәмәләр өсөн кейеҙ баҫалар. Кейеҙ, рустарҙағы кеүек, һарыҡ йөнөнән баҫыла: тетелгән йөндө баш бармаҡ ҡалынлығында туҡымаға йә иһә септәгә йәйеп һалалар, эҫе һыу бөркәләр, шунан туҡымаһы йә иһә септәһе менән бергә төрөп тәгәрәтәләр һәм яңынан һыу бөркәләр, тағы ла тәгәрәтәләр, йөн ныҡ итеп баҫылғансы аяҡ менән баҫып тапайҙар.

Башҡорттарҙың кейеме Ҡаҙан татарҙарының кәҙимге кейеменә оҡшай биргән. Ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа күлдәк кейә, ғәҙәттә, ул ҡалын кесерткән туҡымаһынан тегелә; ыштандары оҙон һәм киң була, итек (ситек булһа кәрәк. - **Тәрж. иҫк.**) йә иһә туфли кейәләр (һуңғыһын Георги "занк" тип исемләй, ул ҡата, йә иһә сарыҡты шулай атаған, тип фаразларға була. - **Тәрж. иҫк.**). Фәҡирҙәр аяҡтарына сылғау урап, сабата кейеп йөрөй.

Ирҙәр ярайһы уҡ оҙон һәм иркен кафтандарҙа йөрөй, күбеһенсә ҡыҙыл буҫтауҙан тегелеп, ситтәре йәнлек тиреһе менән ҡаймаланған була, улар тышҡы яҡтан билбау, йә иһә ҡылыс портупеяһы менән быуып ҡуйыла, шуға күрә аҫҡы кейемдәре күренмәй. Тундарын һарыҡ тиреһенән, әммә йышыраҡ ат тиреһенән шулай итеп тегәләр, уның ялы арҡа буйына тура килеп, елле көндәрҙә бик сәйер булып күренә.

Улар ҡаҙанлылар кеүек, һаҡал йөрөтә, баштарын ҡыра һәм йыш ҡына матур итеп бәйләнгән түбәтәй кейеп йөрөйҙәр, әммә уларҙың башҡорт икәнлектәрен тәү ҡараштан уҡ баш кейеме буйынса белеп була. Ул кеглгә тартым, әммә өҫкө яғынан ныҡ осло түгел, бейеклеге бер ҡарыш самаһы, өҫкә табан ҡырпайып торған тар ғына тирәсле итеп, голландтарҙың карап эшләпәләренә оҡшатып, буҫтауҙан тегелә. Улар юлға салбар тип аталған шул тиклем киң ыштан кейеп сыға, уның эсенә барса башҡа кейем һыйыр ине.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың өҫ кейеме (Георги уны ни өсөндөр "сажен" тип нарыҡлаған. - **Тәрж. иҫк.**), ғәҙәттә, йоҡа буҫтауҙан йә иһә ебәк туҡыманан тегелеп, алғы яғынан һәҙәптәр менән төймәләнә һәм шулай уҡ биленән быуылып ҡуйыла. Муйын һәм күкрәк өлдөшө косынка менән ҡаплана (Георги уны ни өсөндөр "дюлбега" тип атай, ғәмәлдә ул һаҡал тип йөрөтөлә. - **Тәрж. иҫк.**), ул металл тәңкәләр менән көпләнгән; ҡайһы саҡта ул сәйлән (бисер) һәм ҡабырсаҡ менән селтәрләп тегелә.

Йәш ҡыҙҙар күп итеп үрелгән сәс толомдарына таҫма һәм шалтырауыҡ нәмәләр таға (Георги "брякушки" тип атай, бында металл тәңкәләр күҙ алдында тотола. - **Тәрж. иҫк.**), улар балтырҙарына тиклем етеп тора, бер ҡарыш оҙонлоғондағы, өҫкө яғы ослораҡ булған баш кейемдәре (таҡыя. - **Тәрж. иҫк.**) һәм елкә ҡаплауысы (ҡашмау йә иһә кәләпүш ҡойроғо, иңһәлек. - **Тәрж. иҫк.**) тәңкәләр һәм мәрйендәр менән ҡаплана. Ирле ҡатын-ҡыҙҙар ошондай баш кейеме өҫтөнән маңлай таҫмаһын тағып йөрөй (бында һарауыс күҙ уңында тотола. - **Тәрж. иҫк.**), сәс толомдары икәү генә, йә иһә улар сәстәрен бөтөнләйгә үрмәйҙәр. Һауа торошо насар булғанда ҡатындар һәм йәш ҡыҙҙар баштарына таҫтар тип аталған яулыҡ ябына (Георги уны "татарская фата" тип нарыҡлай. - **Тәрж. иҫк.**).

Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.

(Дауамы. Башы 26-27-се һандарҙа).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

Сергей РУДЕНКО

БАШҠОРТТАР

Йорт производствоһы

Үҙҙәренең XX быуат башына һаҡланып ҡалған урмандарында бүрәнә әҙерләү һәм һал ағыҙыу менән нигеҙҙә Ағиҙел һәм Инйәр йылғалары башында йәшәүсе башҡорттар шөғөлләнгән. Бүрәнә ҡышын әҙерләнә, ул ҡырҡылып ҡына ҡалмай, ә йылға ярына уҡ килтерелә. Һалдарҙы ҙур йылғаларҙан ташҡын ваҡытында ағыҙғас, уларҙы бәләкәй, тар һәм оҙон, еңел хәрәкәтләнерлек итеп эшләйҙәр. Йылға тауҙан сыҡҡанға тиклем һал ағыҙыу, ара оҙонлоғона ҡарап, ике-биш көн дауам иткән. Һалдарҙы иртәнге сәғәт дүрттән киске сәғәт туғыҙға тиклем ағыҙғандар. Төнгөләккә инде ярға туҡтала. Үҙҙәренең урманы булмаған башҡорттар бай башҡорттарға һәм рус урман сәнәғәтселәренә һал ағыҙыуға ялланып эшләгән.

Дегет һәм ыҫмала ҡайнатыу урман эсендә, тау битләүендә йәки берәй соҡор ярында эшләнгән махсус ер мейестәрҙә, баҙҙарҙа башҡарыла. Ерҙә груша йәки лимон формаһында эшләнгән соҡор эске яҡтан ҡалын итеп балсыҡ менән һылана йәки кирбес менән ҡатлана. Соҡор өҫтөнә ике бүрәнәнән 3х3 дәүмәлендә бура ултыртыла. Соҡорҙоң өҫкө ауыҙының диаметры 70 сантиметр була. Тәрәнлеге - 2 метр самаһы, киңлеге - 1,5 - 1,7 метр. Соҡор төбөнән тышҡа ағас торба сыға, дегет йәки ыҫмала тап уның буйынса аға. Торба сыҡҡан урында тыштан стена кирбес йәки бүрәнә менән бурала, ә торба үҙе тәҙрә менән ябыла. Ҡайһы берҙә соҡор ауыҙы алдына ағас япма эшләнә. Ыҫмала әҙерләү өсөн нигеҙҙә сайырлы ағастар, түмәрҙәр һәм тамырҙар, дегет өсөн туҙ яндырыла. Соҡор төбөнә радиус буйынса ҡарағай төпһәләре һәм ботаҡтар һалына, соҡор тулғас, өҫтән ут төртөлә. Ут талғын ғына янған, ағастар янып бөткәс, күмер һүндерелгән, йәғни соҡор өҫтө томаланған. Икенсе көн, күмер һүнгәс, уларҙы таҙартып сығаралар, ә ыҫмала торба буйлап аға. Ҡайһы берҙә ыҫмала асыҡ соҡорҙарҙа ла ағыҙыла. Был осраҡта инде сайырлы сеймал ҙур булмаған конус формаһында өйөлә. Уның өҫтөнә ҙур ҡарағай ҡаҙыҡтар һалына, уның өҫтөнә - һалам йәки тиҙәк, уның өҫтөнә, бер өлөшөн асыҡ ҡалдырып, кәҫ өйөлә. Яндырылған һалам конусты ҡаплап ала. Кәҫ менән ҡаплау һөҙөмтәһендә ут яй ғына яна, көйрәп ятыусы сыраҡ ыҫмала бүлеп сығара һәм ул мейес ауыҙына аға, һуңынан торба аша махсус һауытҡа йыйыла. Туҙҙан дегет ҡайнатыу шул уҡ ысул менән башҡарыла. Ҡайһы берҙә башҡорттар соҡорҙоң яртыһын сайырлы ағас, яртыһын туҙ менән тултыралар. Был осраҡта дегет менән сайыр ҡатнашмаһын алалар һәм ул тәгәрмәс майлау өсөн файҙаланыла.

Башҡорт кәсепселегенә күҙәтеү яһау башҡорттарҙа минераль матдәләрҙе эшкәртеү киң таралмағанлығын күрһәтә. Башҡорттарҙа керамика булмаған; тимер эшкәртеү аҙ күләмдә башҡарылған һәм киң таралмаған. Бары тик хайуан һәм йәшелсә матдәләрен эшкәртеү генә башҡорттарҙа ҙур үҫеш ала һәм улар өсөн мөһим иҡтисади әһәмиәткә эйә була.

(Дауамы бар).

✓ Былтыр эксперттар Сибайға килеп, ошо уҡыу йорто менән танышҡас, ҡалала нисә оҫтахана бар икәнен, уларҙа нисә кеше эшләгәнен дә иҫәпкә алды. Бар йәһәттән дә Сибай юғары статус алыуға дәғүәләшә ала, тип танылды.

әсәй-өләсәйҙәрҙән

Башҡорт милли биҙәктәре төшөрөлгән ҡымыҙ, бал, сәй һауыттары, ҡалаҡтар, батмустар, ҡумталар. Семәр һалынған, диуарға элер өсөн яһалған сулпы рәүешендәге тәрилкәләр. Боронғо халыҡ кәсептәренә нигеҙләнеп эшләнгән кейем-һалым, балаҫ-япмалар, йорт-ҡаралты монаяты. Башҡортостанды, Өфөнө танытҡан сувенирҙар һәм башҡаһы. "Башҡорт балы" тип яҙылған бал тәпәне янындағы айыу һыны иһә - классик бренд. "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре берекмәһе етештергән ошондай әйберҙәр совет заманынан билдәле. Уларҙы затлы бүләк итеп биреү ҙә мәртәбәле, йортто ла биҙәргә яратабыҙ, ҡулланабыҙ ҙа. "Ағиҙел"дең генераль директоры Гүзәл Миҙхәт ҡыҙы КӘРИМОВА менән әңгәмәгә берекмәнең артабанғы үҫешен тоҫмаллау, шул маҡсатта халыҡ-ара бәйләнештәрҙе нығытыу; халыҡ кәсептәрен һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә республикабыҙ оҫталарының эшмәкәрлегенә булышлыҡ итеү кеүек һорауҙар, уй-фекерҙәр этәргес бирҙе.

"Ағиҙел" - үҙебеҙҙәге һәм сит илдәрҙәге халыҡ-ара сараларҙа Башҡортостандың ғына түгел, хатта Рәсәй Федерацияһының йөҙөн сағылдырыу кимәлендәге ойошма. Үҙегеҙҙе танытыу дауам итә бит инде?

- "Ағиҙел" - бик бай тарихлы, 1963 йылда асылған предприятие. Бөрйән айыуының бал тәпәне янындағы ағас һыны - тәүге сувенирҙарҙың береһе. Бик мәғәнәле, үҙенсәлекле бүләк итеп күрәләр инде уны. Авторы Ильис Ямалетдинов уның менән бар донъяны урап сыҡҡан.

Эйе, үҙебеҙҙе донъяға танытыу дауам итә, хәҙер саҡырыуҙарҙы ла күп алабыҙ. Быйыл Илдар Ғәниев, Елена Ивлева, Альбина Ярмуллина менән бергәләп Бохарала кәсепселәр фестиваленә барҙыҡ. Башҡортостан унда икенсе тапҡыр ҡатнашты. 2023 йылда этнобиҙәүестәр оҫталары Миңлегөл һәм Рөстәм Дәүләтовтар, Сибайҙан тарихсы Альбина Ярмуллина менән Үзбәкстандың "Һөнәрмән" ассоциацияһы саҡырыуы буйынса барғайныҡ унда. Күргәҙмә ойоштороҡ, фәнни-ғәмәли конференцияла ҡатнаштыҡ. Тап ошондай аралашыуҙар һөҙөмтәһендә беҙ тағы ла киңерәк танылыу яулай барабыҙ. Беләһегеҙ, Өфө 2025 йылда Рәсәйҙә беренсе булып "Халыҡ-ара һөнәрселәр ҡалаһы" статусына эйә булды. Быйыл ул исемгә Сибай ҡалаһы лайыҡ буласаҡ, тип көтәбеҙ. 13 - 15 августа Сибай ҡалаһында үтәсәк "Урал аръяғы-2026" VIII Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйында шуны раҫлаған сертификат тапшырыласаҡ. Сибай Рәсәйҙә "Йәшмә баш ҡалаһы" булырға тейеш - маҡсатыбыҙ шул.

"Йәшмә баш ҡалаһы" исеме Учалыла түгелме ни? Ул ҡала бит йәшмә эшкәртеү буйынса дан тота...

- Учалынан бер кемдең дә ҡыҙыҡһыныу белдермәүе, Учалы районы хакимиәтенең инициатива күрһәтмәүе үкенесле, әлбиттә. Йәшмә билбаҙыу Учалынан да, Сибайҙан да уҙа. Әммә сибайҙар эштәре, ынтылыштары менән әүҙемлек күрһәтә. Сибайҙа таш сүкеү сәнғәте буйынса оҫтахана бар. Башҡорт мозаикаһы техникаһында картиналар тыуҙыралар. Заказ буйынса ғына эшләйҙәр, күбеһенсә сит илгә оҙаталар. Бер бәләкәй генә Сибайҙа 10 оҫтахана булыуы республикабыҙҙағы башҡа бер ҡалаға ла хас түгел. "Артель" тигән оҫтахана ла Сибайҙа урынлашҡан, Өфөлә филиалы асылған. Етәксеһе Наил Нәүфәл улы Бәҙретдинов әлеге көндә ошо өлкәлә берҙән-бер белгес. Ул алып барған эшкә табыш алыу талабы ҡуйылмай; беҙҙең бурыс, Уставыбыҙҙа яҙылғанса, халыҡ кәсептәрен һаҡлау, үҫтереү һәм киләһе быуындарға тапшырыу. Наил Нәүфәл улы ошо маҡсатҡа хеҙмәт итә. Ул башҡорт сәнғәтсеһе Исмәғил Тасимов исемендәге миҙалға лайыҡ булды. БР Сәнәғәт министрлығы тарафынан йыл һайын тапшырылған ул миҙалды Сибайҙың таш сүкеү оҫталарының барыһына тапшырһаң да йәл түгел. Был бик абруйлы бүләккә лайыҡ кешене Сибай оҫталары үҙҙәре һайлай.

"Халыҡ-ара һөнәрселәр ҡалаһы" статусын алыу еңел түгел. Уға дәғүә иткән ҡалала шул йүнәлештәге белгестәр әҙерләнгән уҡыу йорто ла булырға тейеш. Сибайҙағы күп профилле колледжда таш сүкеү буйынса ювелир оҫталары әҙерләнә. Былтыр эксперттар Сибайға килеп, ошо уҡыу йорто менән танышҡас, ҡалала нисә оҫтахана бар икәнен, уларҙа нисә кеше эшләгәнен дә иҫәпкә алды. Бар йәһәттән дә Сибай юғары статус алыуға дәғүәләшә ала, тип танылды. Ошо талаптарға тура килмәгәнлектән, күп ҡалалар был статусты ала алмай. "Халыҡ-ара һөнәрселәр ҡалаһы" тигән исем әлеге ваҡытта донъяла 91 ҡалаға бирелгән. Рәсәйҙә беренсеһе - Өфө, икенсеһе - Сибай буласаҡ.

Иҫкә төшөрәйек: Өфөгә "Халыҡ-ара һөнәрселәр ҡалаһы" статусын алыуға ниндәй ҡаҙаныштарыбыҙ булышлыҡ итте?

- "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре берекмәһе тукымаға булһынмы, ағасҡамы, металғамы, художестволы биҙәк сәнғәте менән дан тота бит. 2025 йылда Өфө ҡалаһы көнөн байрам иткәндә Халыҡ-ара һөнәрселәр советы президенты Әл-Ҡәддүми беҙгә килеп, шул йүнәлештә башҡарылған продукциябыҙ менән танышты. Өфөбөҙгә "Халыҡ-ара һөнәрселәр ҡалаһы" сертификатын тапшырҙы. Ысынын әйткәндә, "Ағиҙел" менән "Артель" ойошмалары яулап алды ул исемде. Өфө Рәсәйҙә "Халыҡ-ара һөнәрселәр ҡалаһы" статусын алған беренсе ҡала булараҡ тарихҡа инде. Был халыҡ-ара кимәлдә бик юғары абруй, уның баһаһын, мөмкинлектәрен әлегә аңлап та бөтмәйбеҙ.

Матди, ижади яҡтан нимә бирә ул исем?

- Тәүҙә ижади йүнәлеште алайыҡ. Әлеге лә баяғы Өфө шул абруйлы исемгә лайыҡ булмаһа, 12 һөнәр-кәсеп оҫтаһын 2025 йылдың көҙөндә Үзбәкстандағы Коканд ҡалаһына сәфәргә алып сығып булмаҫ ине. Беҙгә хәҙер шундай мөмкинлектәр асылды: һөнәр оҫталарын сит илдәргә йөрөтөүгә, төрлө ижади сараларҙа ҡатнашыуға квоталар бирелә, ошо исем бирелгән ҡалалар менән халыҡ-ара хеҙмәттәшлеккә юл ярыла.

Яңы бина, уңайлы етештереү, эш цехтары - күптән заман талабы бит. "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре берекмәһенең сәнәғәт зонаһында, баш ҡаланың үҙәгенән алыҫта урынлашыуы ҙур уңайһыҙлыҡтар тыуҙыралыр?

- Етештереү цехындағы биҙәү технологияһы лаклы буяуҙар менән эшләүгә нигеҙләнә, ә уның зарары бар, шуға ҡаланың сәнәғәт зонаһында урынлашҡанбыҙ. Әммә ҡала үҙәгендә сауҙа нөктәләре, кибеттәребеҙҙе булдырыу, музейыбыҙ өсөн дә берәй бина юллау - күптәнге хыялыбыҙ.

Октябрь проспектында магазинығыҙ бар, бәлки, музейҙы ла уға йәнәш йә яҡын урынлаштырырғалыр?

- Бик бай музейыбыҙҙы һаҡлап алып киләбеҙ, уның өсөн баш ҡала үҙәгендәрәк урын табылһа, бик яҡшы булыр ине. Унда бит халыҡтан йыйылған боронғо кәсеп өлгөләре тупланған, килеүселәр был байлыҡты һаҡлаған өсөн рәхмәт әйтеп китәләр. Беҙгә ҡунаҡтар күбеһенсә сәнәғәт туризмы буйынса киләләр. Ҡайһы ваҡыт был мәшәҡәт тыуҙырһа ла, ҙур иғтибар талап итһә лә, үтенестәрҙе кире ҡаҡмайбыҙ. Бөгөнгө шарттарҙа ошо предприятиены һаҡлап алып ҡалыу ҙа еңел түгел, әлбиттә, тик бирешергә уй юҡ.

Музейығыҙ өсөн экспонаттар йыйыу-эҙләү эшен дауам итәһегеҙме? Халыҡта тағы уникаль әйберҙәр табыламы?

- Экспедицияларға әлеге ваҡытта бик сыҡмайбыҙ. Музейҙа булған байлыҡты, уникаль биҙәктәрҙе электрон вариантҡа күсерәбеҙ һәм ҡулланабыҙ.

Яһалма интеллектты ҡулланыу мөмкинме һеҙҙең эштә?

- Беҙҙең эштә яһалма интеллектты ҡулланыу бөтөнләй мөмкин түгел, сөнки һәр материал кеше ҡулы ҡулы менән эшкәртелә. Яһалма интеллектты эшкә ҡушһаң, беҙҙең продукцияның уникаллеге, кешенең ижади фантазияһы, ҡул оҫталығы һалынған ҡиммәте, баһаһы юғаласаҡ. Әйтәйек, Башҡортостан тәбиғәтен һүрәтләп, панно эшләргә кәрәк, ти. Ләкин бындай һүрәттең йәне булмаясаҡ, оҫтаның маһирлығы, күңеле сағылыш

яратап башҡарған



✓ ***Баҙарҙың гөүләп торған тауышы булырға тейеш, һатыулашыу яңғырап торһон унда. Ә тын ғына, яй ғына барған баҙар ул баҙар түгел. Хәҙер баҙарҙарҙа йәнлелек, хәрәкәт, алыш-биреш шауы юҡ бит.***

тапмаясаҡ. Ул ижади илһам һалынған әйбер булмаясаҡ.

▸ **Хәҙер милли йүнәлештә эшләгән фирмалар, ойошмалар, айырым кәсепселәр ҙә байтаҡ. Мәҫәлән, "Мосафир" фирмаһы, "Сәрби" ательеһы, Белоретта "Гүҙәл" ательеһы танылыу алды. Улар конкуренция тыуҙырмаймы? Тәжрибә алыу, аралашыу бармы?**

- Ул һөнәрмәндәр менән бергә эшләйбеҙ, сит илдәргә сыҡҡанда ла бер-беребеҙҙе күтәрмәләп йөрөйбөҙ. Ә былай йыл һайын үткәрелә килгән "Уфа-Арт ремесла", "Легпром" һ.б. күргәҙмәләрҙә аралашабыҙ.

▸ **Аңлауымса, улар конкурент түгел?**

- Республикала "Ағиҙел" форматында, шундай ҙур ку-

уның хеҙмәтен тейешенсә баһалап күтәрмәгәндәр, шуға йөрәк әрнене. БР Сәнәғәт министрлығы аша Роза Рафиҡ ҡыҙы Юлдашбаеваға Башҡортостандың атҡаҙанған еңел сәнәғәт эшмәкәре тигән исем юлланыҡ. 85 йәшлек апай хәҙер хаҡлы ялда. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең менән хеҙмәттәшлекте дауам итә, башҡорт нағышы буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрә, тамбурға ғына түгел, төрлө техникаға өйрәтә. Өйрәнергә теләүселәр бик күп. Уны хөрмәтләп, "Ағиҙел"дә "Башҡорт нағышы" йортон астыҡ, Роза апайыбыҙҙың эштәрен ҡуйҙыҡ. Сәнәғәт туризмы буйынса килгәндәргә ошо "Башҡорт нағышы" йортон да күрһәтәбеҙ.

▸ **Халыҡ кәсептәренә эйә булған оҫталар бик һирәк, бармаҡ бөкләп кенә һанарлыҡ, тиҙәр ундайҙарҙы. Ти-**

хан комиссияһы рәйесе итеп саҡырып торалар, йыл һайын диплом яҡлаусыларым була. Өфө нефть техник университетында ла өс йыл сәнәғәт дизайны буйынса имтихан комиссияһы рәйесе булдым. Ҡаҙан вуздарындағы факультет менән бәйләнеш тотабыҙ, ундағы студенттар беҙгә практикаға килә.

Хәҙерге йәштәргә ҡарайым да, эшкә атлығып тормауҙары кәйефте ҡыра, ниңә улайҙыр инде? Улар тиҙ һәм еңел акса табыу юлын эҙләй шикелле. Уҡырға теләмәйҙәр. Хатта юғары белем алып, магазинда кассала эшләп ултыралар. Эшкә бараһың икән, аҡсаны түгел, ә маҡсатыңды алға ҡуй. Эшеңде яратһаң, алға китеш булыр.

▸ **Халыҡ кәсептәре, һөнәрселек тармағына юл апаруҡ урау булған. Ҡапыл юлығыу**

асылым тиҫтәләрсә йылдар уҙһа ла өҫкә сыҡты, еңде, хәҙер яратап башҡарған хеҙмәтемә әүерелде...

▸ **Башҡорт кәсептәрен үҫтереүҙә иғтибар ҡайһы йүнәлешкә бүленергә тейеш?**

- Керамикаға. Археологик ҡаҙылмаларҙа көршәктәр табылыуы уларҙың беҙҙә ныҡ таралғанын раҫлай. Ошо йүнәлештә күтәреп алып эшләүселәр бик аҙ. Үзбәкстанға керамика үҙәге булған Риштандағы форумға үҙебеҙҙең керамика оҫталары Динара Ғарифуллина менән Артур Әлимгужинды алып барҙым. Тағы шуныһы: Өфөлә һөнәрселәр ассоциацияһы юҡ ине, шуға ла уларҙы берләштергән ойошма булдырыу кәрәк, тигән уй тыуҙы. 2025 йылдың декабрендә йыл һайын үткән бизнес аҙналығында "Орна-

КҮСКӘН ҺӘЛӘТЕМ,

хеҙмәтемә әүерелде

ләмдә етештереүсе башҡа предприятие, йәғни конкуренттар юҡ. Бөгөн беҙҙә 80 кеше эшләй. Ул саҡлы эш урыны булдырыу еңел сәнәғәттә лә, халыҡ кәсептәре менән шөғөлләнеүселәр араһында ла юҡ. Кәсепселәрҙең күбеһе үҙмәшғүллек менән шөғөлләнә, һалым буйынса бер кешене генә иҫәпкә ҡуялар һәм үҙҙәре өсөн генә һалым түләйҙәр. Ә беҙҙең ойошмалағы кеүек, 80 кешене йәлеп итеп, эш хаҡын да, һалымын да түләү бик еңел түгел.

▸ **Бөтә тармаҡтарҙағы кеүек, кадрҙар мәсьәләһендә лә ауырлыҡтар барҙыр?**

- Эйе, был ҡытлыҡ - беҙгә лә хас күренеш. Йәштәр килмәй, берекмәнең ҡала үҙәгенән алыҫ булыуын да сәбәп итәләр. Беҙҙең эштең мейеһе булған рәссамдар кәрәк. Теләге булғандарҙы технологиялар, сәнғәт, дизайн тармағында белгестәр әҙерләгән, халыҡ кәсептәре буйынса махсус белем биргән А.Косыгин исемендәге университетта уҡытып алыу мөмкинлегебеҙ ҙә бар, ләкин...

Кадрҙарҙы тупларға, һаҡларға тырышабыҙ инде ул. Башҡорт милли кейемдәре һәм кәсептәре буйынса уникаль белгес-рәссам Роза апай Юлдашбаеваны үҙебеҙгә ҡайтарып алдыҡ. Ул совет замаында Мәскәүҙә махсус биҙәүҡулланма сәнғәте училищеһын тамамлаған, бик тәжрибәле алтын ҡуллы оҫта. Ундай белгестәр беҙҙә хәҙер бөтөнләй юҡ. Ул "Ағиҙел"дә 90-сы йылдарҙа эшләгән, шунан баш ҡаланың "Салауат" ательеһына күскән. 2019 йылда "Ағиҙел"гә етәксе итеп тәғәйенләнгәс, Роза апайҙы үҙебеҙгә саҡырып килтерҙем. Шундай уникаль белгестең, остаздың бер ниндәй ҙә исеме булмауы мине ныҡ аптыратты. Ваҡытында

мәк, алмаш әҙерләүҙе хәстәрләү тейеш. "Ағиҙел"дең киләсәге лә шуға бәйле бит?

- Республикала үткәрелә килгән инвестһабантуйҙар тәжрибә уртаҡлашыуҙа, шулай уҡ кадрҙар йәлеп итеүҙә бик уңайлы, һөҙөмтәле сара ул. Шундай бер йыйында алыҫ Алтайҙан килгән ҡунаҡтар боронғо кәсептәрен - кейеҙҙәрен күрһәтте, уны эшләү ысулдары менән таныштырҙы. Сибайҙағы башҡорт кейеҙе менән шөғөлләнеүселәрҙе алтайҙар менән аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу бик файҙалы булды: кемдәрҙәлер был кәсепкә ҡыҙыҡһыныу уянды. Шуға ла беҙ сит илдәр менән булған бәйләнештәрҙе инвестһабантуйҙарҙа нығытып ҡалабыҙ, килешеүҙәр төҙөйбөҙ.

Республиканың күп профилле колледждарында беҙгә кәрәкле белгестәрҙе әҙерләй алырҙар ине, тик тағы шул бер мәсьәлә: йәштәрҙә ҡыҙыҡһыныу юҡ, улар был уҡыу йорттарын ситләп уҙа. Һөҙөмтәлә ул халыҡ кәсептәре белгестәрен әҙерләүсе йүнәлештәргә ябылыу ҡурҡынысы янай. Әлеге ваҡытта шул бүлектәрҙе яптырмай, һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе тора. Халыҡ кәсептәре белгестәре әҙерләүҙе хәстәрләү - ул "Ағиҙел"дең буласаҡ кадрҙарын ҡайғыртыу ҙа.

▸ **Гүҙәл Миҙхәт ҡыҙы, һеҙ бит тәүге һөнәрегеҙ буйынса журналист. Халыҡ сәнғәте өлкәһенә етәкселек итеү өсөн өҫтәмә махсус диплом талап ителмәнеме?**

- Ҡаҙан дәүләт техник университетының халыҡ кәсептәре һәм һөнәрҙәре факультетында уҡып сыҡтым. Хәҙер үҙемде Ҡаҙан технология-тикшеренеү университитына текстиль йүнәлеше буйынса имти-

түгел, ә өлгөргәнлек, ҡул оҫталығы, күңел, зауыҡ йәһәтенән әҙерлек алып килгәндер һеҙҙе был эшкә?

- 90- сы йылдар, студент саҡ. Матур итеп кейенге килә, ә аҡса самалы. "Бурда", "Крестьянка", "Веста"нан ҡарап, кофта-күлдәктәр бәйләп кейҙем. Әхирәттәрем шуны иҫкә төшөрөп һөйләнә тыуған көнөмдә лә. Ҡул эшенә бәләкәй саҡтан маһирлығым әсәйемдән килә. Ул Белорет районы Рысыҡкай ауылынан, улар ғаиләлә ете ҡыҙ үҫкән, етеһе лә тегенсе. Әсәйем яғынан Йомабикә өләсәйем тегенеүгә оҫта була, уға Бәхтеәйр олатайым заманында кредитка "Зингер" теген машинаһын алып биргән. Өләсәйем ауыл кешеләрен тегеп кейендергән. Әсәйем әле һаман тегенә, һаҡал-селтәр бәйләй, биҙәүестәр эшләй. Әсәй-өләсәйҙәремдән күскән һәләтем, тәбиғәтемдәге

мент" тип аталған ассоциация төҙөнөк. Етәксеһе итеп Илдар Ғәниев тәғәйенләнде. Ул рәссам, Турахан музейында, Археология музейында ла эшләй, йәш ғалим да. Мин унда совет рәйесе, ойоштороусы ғына. Ләйсән Ғилманова, Сәлимә Усманова, Илдар Ғәниев - ойошманың терәге. Үзбәктәрҙең "Һөнәрмән"е менән беҙҙең "Орнамент" килешеү төҙөнө. Ул йәмәғәт эше, аҡса түләнмәй, әммә уны алып барырға кәрәк.

▸ **Халыҡ кәсептәре, һөнәрселек - бәғзеләр өсөн яратҡан һәм хатта табыш килтерер шөғөл генә түгел, юғары кимәлдә маҡсатлы эш алып барғанда, Өфөбөҙҙөң һәм Башҡортостаныбыҙҙың күркәмлеген арттырған, ҡунаҡтарҙы йәлеп иткән йүнәлеш була ала. Моғайын, шул йәһәттән ҡыҙыҡлы идеялар ҙа барҙыр?**

- Идеялар күп. Өфө "Халыҡ-ара һөнәрселәр ҡалаһы" статусына эйә булғас, һөнәрселәргә ижад йорто булырға тейеш. Ә мин, ассоциация советы рәйесе булараҡ, ул һорауҙы күтәрә алам. Әгәр ҙә ҡала уртаһында туристар өсөн Һөнәрселек үҙәге булһа, һөнәрселәребеҙгә офистар бирелер, оҫталыҡ дәрестәре үткәрер, туристарҙы ҡабул итер, этнокафела аралашыр инеләр. Был халыҡ ижады һәм сәнғәте үҙәге лә түгел, туризм үҙәге лә түгел, ә махсус рәүештә һөнәрмәндәргә тәғәйен ижад йорто булһын ине. Ошо исемде алған һәр ҡалала бар бындай урындар. Өфөгә ул статус бирелгәс, ҡала хакимиәте шул эште лә алып барырға бурыслы. Сибайҙар, статус алғас, был теманы күтәрәсәк, хатта буласаҡ урынын билдәләп тә ҡуйғандар. Уларҙа Йәшмә йорто һәм Һөнәрселек йорто буласаҡ.

Тағы шуныһы: Өфөлә баҙарҙар, сауҙа үҙәктәре күп ул, әммә барыһында ла бер үк тауар. Ә бит халыҡ ниндәйҙер үҙенсәлеге, тарихы булған урындарҙы ярата. Кейем-һалыммы, бүтәнеме, хәҙер маркетплейстарҙа ла һатыла, хатта арзанырак. Шуға кешенең был йәһәттән мөмкинлеге бик ҙур. Уны яңылыҡ, үҙенсәлек, ҡыҙыҡлы тарихтар менән генә йәлеп итеп була. Баҙарҙың гөүләп торған тауышы булырға тейеш, һатыулашыу яңғырап торһон унда. Ә тын ғына, яй ғына барған баҙар ул баҙар түгел. Хәҙер баҙарҙарҙа йәнлелек, хәрәкәт, алыш-биреш шауы юҡ бит. Һәр кеше нимәләр һатыр йә алыр өсөн генә бармай ундай урындарға, ә аралашыу, халыҡ араһында йөрөп килеү өсөн дә сыға.

Өфөлә, мәҫәлән, бал баҙары ла юҡ! Ҡунаҡтарҙы бал алырға тип Үҙәк баҙарға алып сығам. Ә унда ит һатыу урындарын үтһән, бер-ике урында ғына бал һатыла. Баҙарҙың еҫе лә юҡ! Беҙҙең баҙарҙарға ысын баҙар рухын-төҫөн-йәмен ҡайтарырға кәрәк.

Әлеге ваҡытта Өфөлә туристарҙы саҡырып торған уникаль урындар самалы. Ярай, Тураханды астылар, килгән ҡунаҡтарҙы шунда алып барабыҙ. Татарстанға кешеләр Болғарҙы күрер өсөн йөрөгәндәй, беҙҙәге Турахан да шундай урынға әйләнә бар. Стәрлетамаҡ янындағы Торатау геопаркы йыраҡта.

Әйткәндәй, ундағы ете тирмәне беҙ эшләнек. Ҡалмыҡстанға ла тирмә ебәрәбеҙ ҙә, улар үҙҙәренең биҙәктәрен һала. Шул беҙ ебәргән тирмәләрҙә ресторан асҡандар. Өфөгә инде тирмәләрҙе күптән ҡуйҙыҡ, улар С.Юлаев һәйкәле майҙанына, Арт-квадрат, боронғо һыу башняһы эргәһенә лә үҙенсәлек өҫтәне. Тарихыбыҙҙы күрһәтергә теләйбеҙ икән, ниндәйҙер ҙур проект, һис шикһеҙ, тирмәләр менән булһын ул. Һәр етештергән тауар халҡыбыҙҙың уникаль мәҙәни коды булырға тейеш, тип уйлайым.

Фәймә МӘЖИТОВА
әңгәмәләште.

✓ Сажидә ярты көн дауамына һуҙылған айыҡ сағында башҡа бисәләр һымаҡ, һин дә мин, ҡәҙимге, бешерә-төшөрә, йүгереп йөрөп өйҙө йыйыштырып ташлай, йыуа, йыша, таҙарта, тик шу эсеүе үҙәккә үтә.

–Былай, дөйөм алғанда килешеп йәшәйһегеҙме һуң?

- Килешәбеҙ, Сажидә бит мине ярата, ныҡ ярата, минһеҙ йәшәүҙе күҙ алдына ла килтермәй. Һәйбәт кеше ул, аҡыллы ҡатын, тик тотанағы тотмай эсә, ныҡ эсә, элек бер аҙ тотҡарланып ала, шу саҡта һил, рәхәт, үҙе бер байрам һымаҡ булып ҡала ине, хәҙер бөтөнләй тотанаҡтан яҙҙы, бәйҙән ысҡынды, кәнкритне тормозы тотмай. Тормозы тотмағас, кесе ярауға ҡыҫталған мәлдәрендә ыштанын, күлдәгенең итәген еүешләп ҡуя, шул кейемдәрҙе сайыштырып эләм, ни тиһәң дә, ир ҡулы йыуыу эштәренә килешле, ятышлы түгел, һыҡра эҫен бөтөрөп бумай. Күҙ терәп торған Сажидәмде ғәйепләргә йыйынмайым, бары бар тирәяҡты, башҡорт ауылдарын баҫҡан эскелекте ғәйепләйем, ләғнәтләйем, шу ҡәһәр һуҡҡыры эскелек ҡорота бит көнитмеште, колорад ҡуңыҙы һымаҡ ашай, кимерә, ҡаҡ һабаҡҡа ҡалдырып ҡорота тормош баҡсаһын. Ауылда бер Сажидә генә эсә тиһеңме, ундайҙар өй һайын тиерлек, ауыл һайын, мына нимәһе аянслы! Һин, элекке медицина кешеһе, әйт әле, ҡатын-ҡыҙҙы эскелектән дауалап буламы у?

- Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, булмай шул.

- Беләм, шайтан ғына өмөтһөҙ, мин дә үҙемде үҙем алдап бумаҫтайҙы, тормошҡа ашмаҫтайҙы көткән булам тағы. Сажидә иҫереп, аяҡтарына саҡ баҫып ҡайтып инә лә юҡбар һылтау табып, боларырға, туҙынырға тотона, сей талаш ойоштора, һауыт-һабаны ҡыйратып, уңлы-һуллы ырғыта башлай, табышын тартҡылаған бүре һымаҡ мине йолҡҡолай. Шунан саҡ тынысландырып, ипкә килтереп, ете төн уртаһында йоҡларға һалам. Төндә лә әле көтмәгәндә быуылып-нитеп ҡуймаһын, тип, боҙҙай һалҡын ҡулындағы пульсты эҙләп табам, иҙеү төймәһен ысҡындырам, йылытырға теләп, ҡат-ҡат юрғанға төрөп ташлайым. Ә үҙемә килгәндә, сәләмәт йоҡонан яҙғанмын күптән, төн оҙоно, миңрәү, аҡылын юйған маңҡорттай түшәктә ултырып, йә иҙән буйын улай-былай кәлепләп сығам, йоҡламаһаң, төн йылдай оҙон, күңелһеҙ уйҙар осһоҙ-ҡырыйһыҙ. Йоҡоһоҙлоҡтан интегеү, өмөтһөҙ уйҙарҙан уйылыуҙан да ғазаплыраҡ нимә юҡтыр у. Сажидәнең эсеүе ҡул-аяҡтарымды тышағас, өйтирәһендәге мәшәҡәттәргә лә күңелем төшмәй, теләгем ятмай. Иртәгеһен бер үк күренеш - бахмурҙан интеккән ҡатыным аяҡтарымды ҡосаҡлап илай-илай ғәфү үтенә, инде ауыҙыма бер тамсы алаһым юҡ, тип ант итә, тәүбәгә килә. Айыҡ аңына ҡайтҡас, бер рюмка табып ҡына баш төҙәтергә булып китә, шунан көн дә ҡабатлана килгән мәхшәр башлана. Ишек эргәһенә ҡуйылған нимәләрҙе күргәнһеңдер?

- Күрҙем.

- Уларҙың ҡулланылыштары үтә лә ябай - Сажидә ҡайтмай, ҡайҙалыр юғалып ҡалһа, урам буйлап эҙләп табып алып ҡайтам, ҡоро саҡта арбаға һалып, ҡыш көндәре кәритә менән һөйрәп. Хәләл ҡатынын бына ошолайтып, ҡул-аяғын сысаңлатып, эт өрҙөрөп, әҙәм көлдөрөп өйөнә өҫтөрәгән берәй ирҙе күргәнең бармы? Күрмәһәң - күр, ишетмәһәң - ишет, ул - мин! Былар хаҡында ишетеү һиңә кәрәк тә, ҡыҙыҡ та түгел, тик миңә лә бит кемгә лә булһа асылып алғы килә, аңлайһыңмы?

- Аңлайым, Хәлфетдин. Һин булмаһаң, был ауырлыҡтарҙы кем атҡарһын, башҡарһын!

- Аңлайым, тип ризалашып, баш ҡағып ултырыуы ғына еңел у, бы михнәттең ғазабын бар тәрәнлегендә белер өсөн уны үҙ иңеңдә, үҙ елкәңдә татып ҡарарға кәрәк. Бер көн сире ҡотороп китеп, лыпын һылашып түшәккә ятты, ҡан әҫәре ҡасҡан йөҙөнә үлек төҫө инде, күҙҙәре йомоҡ, үҙе эсен ике ҡулы менән ҡармап, быуылып-быуылып уҡшый, йәпйәшел итеп күбек ҡоҫа, бер мәл ҡул-аяҡтары тартыша башланы. Аптырағас, фильшергә киттем, у саҡта беҙҙә ситтән кигән бер йәш ир эшләй ине. Бы килде лә, арлы-бирле ҡараштырғас, артыҡ ярҙам да күрһәтеп аҙапланмай, ҡайтырға йыйынды. Берәй йылы һүҙ, йә ыңғай кәңәш өмөт итеп, артынан эйәрә сыҡтым. Беләһеңме, бы әҙәм аҡтығы миңә нимә тине: "Ағай, кәңәшем шу, бармағыңа бармаҡ һуғып бер ни ҙә эшләмә, үлһә үлһен дә ҡуйһың, аяҡлы бәләнән ҡотолорһоң, исмаһам!" Кинәт ынтылып, яғаһынан бөрөп алып: "Һин нимә аңлайһың да нимә беләһең, маңҡа!" - тинем дә, ҡоласлап киҙәнеп, тегене һуғып та осорҙом. Күҙ күреме ер киткәнсе миңә янай-янай, төрмәгә апарып тығыу менән ҡурҡытып ҡайтып китте бы. Аптырағандың көнөнән илләаллаға, ауыл буйлап эҙләп, бер ярты араҡы табып, шуның менән ҡул-аяҡтарын ыуып, ҡалғанын саҡлап ҡына ауыҙына тамыҙып, әҙәм итеп алдым ҡатынды. Ә теге фильшер һүҙендә тороп, минең өҫтән ушастковыйға ялыу яҙып биргән. Полиция машинаһына утыртып район үҙәгенә алып барып, протокол төҙөп, ун биш суткыға утыртып ҡуйыу менән янанылар ҙа, ҡатынымдың бер үҙен бер нисек тә ҡалдыра алмайым, тип инәлгәс, һуңғы сиктә ҙур ғына штраф сәпәп, кире ҡайтарҙылар. У штрафты түләү өсөн дә әллә күпме тир түгергә, юҡ аҡсаны бар итергә тура килде.

Теге фильшер йоратына килгәндә уның иманһыҙ, кешелекһеҙ икәнлеген белдем. Шундай мәрхәмәтһеҙ, ҡанһыҙ әҙәмдәр ҡатындарына хыянат итәләрҙер. Шу ир башланғыс класта балалар уҡытҡан ҡатын менән гражданский бракта, беҙҙеңсә әйткәндә, ирекле никахта йәшәне. Хәҙер шу нимә модаға инеп китте бит. Бергә йәшәп ҡарайҙар ҙа, бер ни тиклем уаҡыттан, характерҙарыбыҙ, ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ, ынтылыштарыбыҙ тап кимәне тип, икеһе ике яҡҡа китә, бер ниндәй яуаплылыҡ, кеше йәненә бирелә торған выждан ғазабы, оялыу, тартыныу хисе юҡ. Гражданский брак мәлендә тыуған балалар аҙаҡтан бракҡа, йәғни йәмғиәттә ҡулланылыуға ярамаған артыҡ, эшкә ашмаған тауарға әйләнәләр. Икенсе яҡтан, ҡатын менән ир мөнәсәбәтен алып ҡарайыҡ. Әгәр ҡатын ауыр хәлдә ҡалһа, уны ире сығарып ырғытамы, йә дөмөкһөн ятып, тип, ҡул һелтәйме, тормош бит у, әгәр ир үҙе аянслы торошта тороп ҡалһа, нисек? Миңә ҡалһа, никах у атай-әсәй ризалығы менән эшләнә, һәм ул Хоҙай тарафынан юғарыла, асманда нығытыла.

Ата-әсә ризалығы тиһәм, әсәйҙең фатиха бирмәүе иҫкә килә лә төшә. Сажидәһеҙ йәшәй алмайым, тип айырып әйттем бит инде уға, бик теләмәһә лә, ризалашһа була ине бит. Ҡабатлап әйтәм, Сажидә, болоттар араһынан ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа күренеп ҡалған ҡояштай, ярты көн дауамына һуҙылған айыҡ сағында башҡа бисәләр һымаҡ, һин дә мин, ҡәҙимге, бешерә-төшөрә, йүгереп йөрөп өйҙө йыйыштырып ташлай, йыуа, йыша, таҙарта, тик шу эсеүе үҙәккә үтә. Ырымбур яғындағы бер кешегә апарып, код ҡуйҙырып та ҡараным, имсе ҡарсыҡтарҙан да өшкөртөп аҙапландым, файҙаһыҙ.

- Ары ни ҡылырға инде иҫәбең?

- Йәшәлә инде Хоҙай бүләк иткән ғүмерҙе. Әйткәндәй, тағы ла бер ҡатын мин тип кенә өҙөлөп йәшәй бит әле.

- Иҫке ауыҙҙан яңы хәбәр, был ҡылығың, ябайлаштырып әйткәндә, ҡатын өҫтөнән йөрөү була түгелме?

- Аңын-тоңон белмәйенсә, мине бер йөрөмтәл, уйнаш әҙәмгә сығарып, буш һүҙ ҡуйыртма, йәме! Уның менән араларыбыҙ алыҫ, мөнәсәбәттәребеҙ һалҡын. Коммерсант, беҙҙеңсә итеп әйткәндә, эспикүләнт-эшҡыуар у, ҡалала йәшәй. Магазиндар селтәре тота, етеш көн итә, машинала елдерә, төҫкә-башҡа кигәндә лә еренә еткереп, төҙәнгәнһанған, ябайлаштырып һүрәтләгәндә, йыуылған-йышылған тиҙәрме әле? Шу ҡатын ауылға бер нисә тапҡыр килеп, мине үҙе менән алып китергә димләне, йәнең ятҡан эшкә урынлаштырырмын, машина һатып алып бирермен, татыу итеп ҡалала йәшәрбеҙ, тип вәғәҙәләй.

- Гонаһһыҙ фәрештә, ауыҙыңа төшкән һары май бит был, ни тип яуап бирҙең инде?

- Һине йүнле кешегә хисаплап йөрөһәм, әллә ниндәй еңел-елпе һорау бирәһең, минең Сажидәм бар ҙа баһа, у минһеҙ ҡалайта, шу хаҡта уйланыңмы? Тағы ҡала тормошо минең өсөн ят бауыр, ошонда тыуғанмын, ошонда үҫкәнмен, әҙәм балаһы ергә мәңгегә кимәгән, көнөм бөтһә ошонда ерләрҙәр!

- Берүк ғәфү ит, йәпһеҙерәк һүҙ ысҡындырҙым.

- Йәпһеҙ имеш, сеп-сей, йүнһеҙ хәбәр! Бик беләһең килһә, әҙәм балаһы бы донъяға һәр саҡ икенсе яртыһы менән тыуа, ә минең икенсе яртым - яҡшымы-яманмы, тап киләме, юҡмы, Сажидәм, уға һуңғы көндәремә саҡлы тоғро ҡаласаҡмын, шуны бел! - Хәлфетдин ҡулында һүнгән папиросын асыуланып атып бәреп, уны кирза итегенең үксәһе менән тызып иҙеп ҡуйҙы.

Бер ни тиклем һүҙһеҙ ултырғас, әңгәмәне яңынан терелттем:

- Силәгенә күрә ҡапҡасы, дуҫ, Сажидә эскәс, уға эйәреп тотҡоламайһыңмы, ҡапыл тоҡаныһ, яндырайланып китеүеңде күреп һорайым?

- Йәшермәйем, баштараҡ булғыланы, шунан тыйылдым. Ир эсһә - ярты донъя, ҡатын эсһә - тотош донъя яна, тиҙәр бит. Минең ҡайны менән ҡәйнәне күреп белдең, икәүләп, эйәртенешеп йөрөп эстеләр, сурагат араҡы эсеп, икәүләп, бер төптән китеп тә барҙылар. Сажидәнән башҡа баллары юҡ ине бит, хужалыҡтары шауҙырлап торҙо ла ҡалды. Хәҙер нисек тә ярты донъяны тоторға тырышҡан булам тағы, тик у күпмегә саҡлы дауам итер, белмәйем. Кешеләр ике төркөмгә бүленәләр һымаҡ - ерҙең ҡояшлы яғында йәшәгәндәр һәм болотло яғында ҡалғандар. Мин болотло, ҡараңғы тормошта көн иткәндәр ҡоронан. Әҙәм балаһы маңлайына яҙған яҙмышты ҡыуалай, шу, дүрт тарафын сикләгән ҡалыбынан һис ҡасан ҡотола алмай. Сажидәмде яңғыҙын ҡалдырыу ҡайҙа, уның менән етәкләшеп ҡояшлы яҡҡа ынтылабыҙ ҙа бит, тик ике араны айырып тотҡан, күҙгә күренмәҫ пәрҙәне йыртып, теге яҡҡа сыға ғына алмайбыҙ. Хас та балыҡсы ауына сырмалған, унан ҡотола алмаған ташбаштарбыҙ, тормоштоң ҡәҙерен белмәгән, йәшәүҙән мәғәнә тапмаған миңрәү ташбаштарбыҙ!..

Уңарсы таҡта солан иҙәнен шығырҙатып инеп килеүсе кешенең аяҡ тауыштары ишетелде, шунан дауыл ҡайырғандай шар асылып киткән ишек ауыҙында Сажидәнең сибек кәүҙәһе пәйҙә булды; сәстәре туҙған, арыған күҙҙәре йоҡоһоҙлоҡтан ҡыҙарған, өҫтөндә йыуылыуҙың ни икәнен белмәгән ала-сола төҫтәге халат. Ҡараҫҡы, торғаны бер ҡурҡыныс шәүлә, сит бер ерҙә тап иткән осраҡта, уны ошо хәл-торошта, төҫбашта танымаҫ инем, валлаһи шулай!

- Хәлфетдин, ҡәҙерлем, берҙән-берем, мына ҡайттым нәкәнис, ауыл өйҙәрен теүәлләп, - мине абайлап өлгөргәс, ҡаштарын юғары сөйөп ғәжәпләнгәндәй итте, - күрмәһәң - күр, ишетмәһәң - ишет, яр аҫтынан яу сыҡҡан, мына исмаһам яңылыҡ, беҙгә ҙур ҡунаҡ, хөрмәтле түрә килгән икән дә баһа, баш мөхәррирҙең үҙе! Урам буйлап хәйерселәгәндә ишеткәйнем шу, һаумы, үнгәр! - Ҡатын ҡулдарын шапылдатып бер-береһенә һуғып алғандан һуң, эргәмә килеп, тупылдатып арҡамдан һөйҙө. - Билдәле яҙыусы, писәтель хикәйә, юҡ тигәндә, повесть яҙырға килгәнме, ә? - Танауыма араҡы көйөгө, һыҡра еҫе килеп бәрелде. Ятһырауымды һиҙеп өлгөргән ҡатын артҡараҡ тартылды. - Хушбый һөртөнөргә ҡалала йәшәмәйбеҙ, үнгәр! Яҙыу-һыҙыуға кигәндә, тиктомалдан нимәһен яҙаһың, ыңғайы бер йомоштарын тоттороп сығарырлыҡ нимәбеҙ бумағас, - быялаланған, мәғәнә ҡасҡан күҙҙәре менән торлағын теүәлләне, - беҙгә инепсығыусылар бик һирәк, пашти-што юҡ кимәлендә, ә һин эшкә һынап килергә иткәнһең, маладис, афарин! Бисәң менән икәүләп, ҡушарлап киһәгеҙсе, хәйер, уны бик тә эре,

✓ Китап геройҙарының күптәре Зөһрә Сәлимйән ҡыҙын эҙләп табып: "Атай-әсәйемдең, олатай-өләсәйемдең шунса ауыр яҙмыштарын белмәгәнбеҙ. Һеҙ беҙгә уларҙың бөйөк булғандарын аңлаттығыҙ, ҙур рәхмәт һеҙгә!" - тине.

тиҡый, һауалы, кеше менән һөйләшер-һөйләшмәҫ, башҡаларға юғарынан аҫҡа ҡараған кеше тиҙәр. Беҙҙә, ҡара рабуший, пралитарий халыҡты, элекке тракторист менән эштән ҡыуылған даярканы тиң-тошона һынау ҡайҙа, ыҙнамы шулай! Күрмәһәң - күр, үнгәр, мына беҙ ошолайтып йәшәп ятҡан булабыҙ әле, барына шөкөр итеп. Ауыҙындан сыҡҡансы, ғарҡ буғансы һыйлап ҡайтарыр инек тә үҙенде, тик әҙерлегебеҙ, запасыбыҙ самалы. - Буш һауыттар өйөлөп ятҡан өҫтәл яғына ымланы. - Хәлфетдин, бер ҡыҫмырҙай ҡул ҡаушырып утырғансы, һин үҙең берәй нимә хәстәрләһәңсе, һыу биҙрәлә, икмәк, картуф бар.

- Ир кеше нимә генә алып ҡуйһын инде, һине көттөк, - тине Хәлфетдин ғәйепле кешеләй, ҡулдарын ян-яҡҡа йәйеп.

- Көтһәгеҙ ни, бына, ҡайттым бит! - Сажидә иҙән уртаһына сығып баҫты ла ялбыраған сәстәрен ипкә килтереп һыйпаштырғандан һуң, ике ҡуллап сикәләрен ҡыҫты. - Ай, башым, ғәзиз башым ярылып бара, эсем өҙөлә, бер йотом ғына кәрәк ине, өй беренсә йөрөп сыҡтым, исмаһам, береһе хәлемә инһәсе, сурагаттары, тауыҡ тиҙәге болғаған көмөшкәләре, юҡ тигәндә, артаған балдары жалкы. Хәҙерге кешелекһеҙ кешеләр ауыҙыңа бер тамсыны тамыҙырға йәлләйҙәр, свулыштар, сәсрәп киткерҙәр. Һыйға килгәндә, һине ҡоро сығарыу юҡ, үнгәр, минең һыйым һәр ваҡыт үҙем менән. - Шулай тине лә ярғыланған усы менән сырыш, һиҙелеп һары төшкән биттәрен, төҫһөҙ йоҡа ирендәрен һыпырҙы. - Тыңла, улайһа, ыслушай, билдәле халыҡ хәйерсеһе, әй ҡороғор, ни тием тағы, күренекле йырсы, ауылдың тауышы ултырған, ҡарлыҡҡан һандуғасы Сажидә Ҡотләхмәтова йырлай. Кыстати, хәҙер мине табындарына саҡырмайҙар, но ҡайһы саҡта, ҡайһы берәүҙәр моңло итеп йырлаһам, бер рүмкә ҡойоп бирәләр биреүгә, шуныһына ла ризамын, риза бумаҫ инең дә һатыулашыр тауарым шу. Шулайтып йыр таратып, йыр һатып йәшәлә. Мужыт, үңгәр, һин дә түш кеҫәндәге аҡсаңдан әҙерәк өлөш сығарырһың, ауырыған башты төҙәтерлек, күп һорамайым бит, бер йотмалы ғына, ну?

- Сажидә, көтөп алған ҡунаҡтың башын ҡаңғыртып, ни һөйләйһең, оялыр инең саҡ ҡына! - Хәлфетдин ҡатынын тыя һалды.

- Шаярттым да баһа, мәрәкәләнем, шаяртырға ярамай штү ли? Шулай итеп, минән бушлай йыр-бүләк! - Мул, яурындары һалынҡы күлдәгенең итәген тартты, бысраҡ кофтаһының ысҡындырылған төймәләрен элде.

Хуш инде, мәңгегә,
Хуш инде.
Китә яҙ, китә наҙ,
Ҡыш инде.
Тағы бер текәлеп
Ҡарайымсы.
Рәсемеңде күңелемә
Һалайымсы...

(Дауамы. Башы 28-29-сы һандарҙа).

ЯҘЫУСЫ ИЖАДЫ

"МИН БӨГӨН ҠОЛ ДА, ҠУНАҠ ТА

Ижад тигән илһамда..."

Йәмле йәй ахыры менән йомарт көҙ башы осрашҡан ошо ҡабатланмаҫ тәбиғәт яңырыуы мәлендә билдәле шағирә һәм журналист Зөһрә Сәлимйән ҡыҙы Ҡотлогилдина донъяға килә.

Кешегә тыуған ере генә түгел, тыуған миҙгеле лә йоғонто яһай, тигән бер фараз йәшәй. Башҡорт донъяһына күренекле тарихи шәхестәр, яҙыусылар, хеҙмәт һәм яу ҡаһармандары биргән данлы Көйөргәҙе ерендә тыуып үҫкән ҡыҙ ерҙәштәре аманатына ауаздаш алмашсы - илһөйәр, телһөйәр һәм эшһөйәр ижадсы рухлы булып тыуһа, күңеле менән матурлыҡҡа мөкиббән, заман заңына һиҙгер, кеше күңеле сөңгөлдәрен нескә тойоусы шағирә булып үҫешә. Тыуған миҙгеле урағай шағирәгә, гүйә, үҙенең хис-тойғо ҡайнарлығын, йәй ҡояшылай салт ихласлығын, тәбиғи хазиналарын йомарт бүләк иткән - былар бөтәһе лә ижадсы ғына түгел, кеше булараҡ та биҙәй Зөһрәнең күңелен. Шиғриәт белгеслегенә дәғүә итә алмаһам да, ябай уҡыусыһы, университет һабаҡташы һәм ғүмер буйы Матбуғат йортонда йәнәшә редакцияларҙа "арҡа терәп" эшләгән хеҙмәттәшем булараҡ та, Зөһрә Сәлимйән ҡыҙы хаҡында уның тыуған көнө - юбилейы уңайынан йөрәк һүҙемде белдерергә йөрьәт иттем.

Журналист булараҡ хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ Зөһрә Ҡотлогилдинаның. Яҙыу һәләтен күреп, уны БДУ-ның филология факультетында уҡып йөрөгәнендә үк - 1974 йылда "Башҡортостан пионеры" гәзитенә эшкә саҡыралар. Һәм яңылышмай редколлегия ағзалары: Зөһрә Сәлимйән ҡыҙы балалар һәм үҫмерҙәр матбуғатына бөтөн ғүмерен бағышлай. Йәш хәбәрселәр мәктәбенә нигеҙ һала һәм алып бара, тиҫтәләгән йәш журналист әҙерләй, бөгөнгө көн улар республикабыҙ матбуғаты һәм киң мәғлүмәт саралары рында уңышлы хеҙмәт итә, осраған-күрешкән һайын остаздары "Зөһрә апай"ға һәр ваҡыт ихтирам һәм рәхмәт тойғоларын белдереп китәләр. Зөһрә Ҡотлогилдина эшләгән йылдарҙа "Башҡортостан пионеры" гәзитенең исеме генә үҙгәреп ҡалмай ("Йәншишмә"), йөкмәткеһе лә яңыра. Йәш быуынды илһөйәрлек, телһөйәрлек рухында тәрбиәләү маҡсатында яңы рубрикалар, фекер алышыуҙар ойошторола, балалар ижадына гәзит биттәренән төп урын бирелә.

Журналистика ул шундай донъя: унан айырылыу мөмкин дә түгел. "Йәншишмә" гәзитенән хаҡлы ялға киткәс тә күп йылдар Зөһрә шулай уҡ журналист һәм шағир, "Аманат" журналының элекке баш мөхәррире - тормош юлдашы мәрхүм Нияз Мәһәҙиев менән "Ағиҙел" журналында хеҙмәттәшлек итәләр һәм Башҡортостаныбыҙҙың иллеләгән күренекле яҙыусыһы йә иһә уларҙың яҡындары, ғаилә ағзалары менән әҙиптәрҙең тормош юлы хаҡында ғына түгел, ә уларҙың заманыбыҙға ҡарашы, республикабыҙ яҙмышы, туған тел, тарихыбыҙ, милләтебеҙ мәсьәләләре буйынса ифрат үҙенсәлекле, стандарт сиктәрҙән азат, тәрән йөкмәткеле әңгәмәләре һәм мәҡәләләре менән "Ағиҙел" журналы йөкмәткеһен байытыуға ҙур өлөш индерәләр. Аҙаҡ был оригиналь әңгәмә-асыштар журнал редколлегияһы тәҡдиме менән Башҡортостандың 100 йыллығы уңайынан "Хан һүҙенән юғарыраҡ Әҙип һүҙе" тигән тос йыйынтыҡ булып донъя күрә һәм тиҙ арала уҡыусылар араһында таралып та бөтә. Әйткәндәй, был һиммәтле йыйынтыҡты сығарыуҙа "Урал" мәрхәмәтлек фонды, уның Совет рәйесе, Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов ҙур ярҙам күрһәтә һәм был әҙәби хеҙмәтте юғары баһалауын белдерә.

Күп яҡлы ижад эйәһе Зөһрә Ҡотлогилдинаның шиғриәте - үҙе бер тылсым донъяһы. Мин был шиғриәтте кеше күңеленең энциклопедияһы тип атар инем, сөнки уҡыусы уның һәр әҫәренән үҙенең күңел торошо халәтенә яуап эҙләй, аҡылкәңәш һеңдерә, йыуана йә ҡыуана - һәр хәлдә, битараф ҡала алмай. Ғөмүмән, Зөһрәнең тормош фәлсәфәһе - был донъяла намыҫлы, ғәҙел, маҡсатлы, эшсән һәм еңеүсе булып йәшәү:

Кешеләргә ғәҙел булыр өсөн,
Ғәҙел булдым тәүҙә үҙемә.
Барҙы бар тип, юҡты юҡ тип әйттем
Тура ҡарап кеше күҙенә.
Шул ихласлыҡ, тәбиғилек бик йыш
Яңағымды өттө ҡуҙ булып...
Нахаҡ өткән һайын йөрәгемде
Рухым көсө үҫте ишәйеп.
Ғәҙеллегем менән көслөмөн мин.
Кеше булып шуға йәшәйем.

Төп һөнәри бурысы - журналистика буйынса эшләйме, публицистикаға ваҡытын бүләме - ниндәй генә ижад хәстәрлектәре йөкләмәһен, тапҡыр, зирәк фекерле шиғырҙары мәленә-мәшәҡәтенә ҡарап тормай, үҙенән-үҙе күңеле төпкөлөнән юл ярып тыуа тора, сөнки шағирә өсөн шиғриәт буш саҡтарҙа ғына ултырып хисләнә торған шөғөл түгел, ә күңел торошо, йәшәү рәүеше, юғарынан "бүләкме, әллә яҙамы" булып өлөшөнә төшкән көмөшө. "Зөһрә Ҡотлогилдина шиғриәтенең тартыу көсө уның донъяны нескә тоя белеүендә; тәү ҡарашҡа ябай булып тойолған төшөнсәләрҙең фәлсәфәүи тәрәнлеген аса һәм уны уҡыусы күңеленә еткерә алыуында",- тип билдәләнгәйне әҙәби тәнҡиттә. Быға өҫтәп, шағирәнең сәсән теллелеген, әҫәрҙәренә хас халыҡсан зирәклеген, фекер ҡеүәһен билдәләмәү мөмкин түгел. Тыуған яҡҡа, Ватанға һөйөү, әсә бөйөклөгө, һуғыш фажиғәһе, тыныслыҡ, ғаилә бәхете, мөхәббәт лирикаһы - Зөһрә Сәлимйән ҡыҙының шиғриәтендә көслө тойғолар тыуҙырыусы төп темалар. "Уйылам уйҙарымдан", "Шәфәҡ нуры", "Миләш тәлгәштәре", "Күҙҙәремә ҡара", "Ялан сәскәләре", "Китә ирҙәр Донбасҫҡа, илде утҡа һалмаҫҡа", "Блокада" - был шиғри йыйынтыҡтар исемдәре буйынса ғына ла үҙҙәре өсөн үҙҙәре һөйләп тора.

Әҫәрҙәренең байтағы күренекле әҙиптәр Ғәзим Шафиҡов һәм Роберт Паль тарафынан рус теленә тәржемә ителеүе үҙе ҙур мәртәбә, баһа булды. Уҡыусылары күңелен арбаусы мөхәббәт лирикаһы Зөһрәнең шиғриәтенә композиторҙарҙы ла йәлеп итте: уның шиғри әҫәрҙәренә мәшһүр композитор Хөсәйен Әхмәтов, Салауат Низаметдинов, Нур Дауытов, Рәшит Йыһанов ижад иткән йырҙар башҡорт эстрадаһының алтын фондына инде, йырсылар репертуарынан төшкәне юҡ. Был йырҙарҙы айырыуса халыҡ яратып ҡабул итте: улар йәштәрҙең дә, өлкәндәрҙең дә тоғро мондашына, юлдашына әйләнде. Әйткәндәй, талантлы композитор Салауат Низаметдинов Зөһрәнең шиғриәтен айырыуса юғары баһаланы, ә ул һәр шиғырға ла көй яҙманы, бик талапсан булды. Шиғырҙарҙы, үҙе әйтмешләй, "алтын бөртөктәренә бәрәбәр" күреп, һайлап ҡына алды, сөнки уларҙа композитор күңел төпкөлөндәге моңона ауаздашлыҡ, тос мәғәнә эҙләне. Талант талантҡа тартыла, тиҙәр бит. Салауат Низаметдиновтың Лермонтов, Блок, Есенин, Ғүмәр Хәйәм, Ника Турбина әҫәрҙәренә яҙған йыр һәм романстары күп кенә халыҡ-ара конкурстарҙа уға еңеү килтерҙе, ә Зөһрә Ҡотлогилдина шиғырҙарына йырҙары үҙе бер күренешкә әйләнде. Бынан сығып, композиторҙың шиғриәт кимәлен баһалай белеүен самалауы ҡыйын түгел.

Һуңғы йылдарҙа шағирә публицистика буйынса күп эшләне. "Бөгөнгө ҡатмарлы осорҙа йәштәр һәм үҫмерҙәр илебеҙ тарихын белеп үҫергә, илһөйәрлек рухында тәрбиә алырға тейеш", ти шағирә. Ошо маҡсаттан сығып, журналист Ҡотлогилдина 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында совет ғәскәрҙәренең немец-фашист илбаҫарҙарын Бөйөк Еңеү даталарына бағышлап ҙур бер өр-яңы форматтағы проектты атҡарып сыҡты: Еңеүҙең 65, 70, 75 һәм 80 йыллыҡ юбилейҙарына ҡарата тыл ветерандары хәтирәләренән дүрт томлыҡ: "Һуғыш балалары - тарих яралары", "Һуғыш яралаған бала саҡ", "Һуғыш балалары һөйләй" һәм "Беҙ - һуғыш балалары" тигән иҫтәлек йыйынтыҡтары баҫтырып сығарҙы. Нәшриәткә, авторҙың үҙенә килгән хаттарҙан күренеүенсә, дүрт китап та ҡала-ауыл китапханаларында үҙенсәлекле бестселлерға әйләнде, улар ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыла, тип хәбәр итә китапханасылар. Ә уҡыусылар был китаптарҙы һорай, ләкин, үкенескә, дүрт томлыҡтың бер генә данаһы ла китап магазины кәштәләрендә ҡалманы: шундуҡ һатылып бөттө. Билдәле яҙыусы, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин "Беҙ - һуғыш балалары" китабына баш һүҙендә былай тип яҙҙы: "Китап геройҙарының күптәре Зөһрә Сәлимйән ҡыҙын эҙләп табып: "Атай-әсәйемдең, олатай-өләсәйемдең шунса ауыр яҙмыштарын белмәгәнбеҙ, ҡыҙыҡһынмағанбыҙ. Һеҙ беҙгә уларҙың бөйөклөгөн, ниндәй ҡәҙерле һәм көслө булғандарын аңлаттығыҙ, ҙур рәхмәт һеҙгә!"- тип ихлас теләктәрен белдереп китеүҙәре яҙыусының ныҡышмал, егәрле, ауыр хеҙмәтенә оло баһа ул". Әйткәндәй, "Һуғыш балалары һөйләй" китабы 2020 йылда республика Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге журналистар премияһына лайыҡ булды. Ә 2022 йылда әҙәбиәт һәм журналистика өлкәһендә фиҙаҡәр хеҙмәттәре өсөн яҙыусы Салауат Юлаев ордены менән наградланды.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

✔ *Республика етәксеһе Мортаза Рәхимов булған заманда һыуһаҡлағыстар төҙөү модаға инеп китте. Был эштең ни маҡсатта атҡарылыуының бөгөн дә айышына төшөнөүе ҡыйын.*

ИНТЕРНЕТТАН

ОҘАҠ ЙОҠЛАУ ЭҘЕМТӘҺЕ...

■ Оҙаҡ йоҡлаһаң, баш мейеһе әүҙемлеге түбәнәйә. Шуға ла оҙаҡ йоҡлау сәләмәтлек өсөн зыянлы, тип белдерә ғалимдар. Һынауҙарҙа 45 йәштән өлкән 230 кеше ҡатнашҡан. Тәүлегенә 9 сәғәт йоҡлаған һәм етмәһә аҙ хәрәкәтләнгән кешеләрҙең организмы тәмәке тартыу йә араҡы эсеүҙән күргән зыянға тиң, имеш. Бындай йәшәү рәүеше алып барыусылар араһында иртә үлем хәүефе 4 тапҡырға юғары. Ә баш мейеһенең әүҙемлеге түбәнәйеүе депрессияға килтереүе ихтимал икән. Тәүлегенә 11 сәғәткә тиклем йоҡлаусы ҡатын-ҡыҙҙар балаға уҙа алмай яфаланасаҡ.

■ Сальмонелла кеүек хәүефле бактериялар печенье менән крекерҙарҙа ярты йылға тиклем йәшәй, тип белдерә Америка ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә бактерияның ағыуланыуға килтергән 5 төрө ҡатнашҡан. Белгестәр крекерҙар өсөн тәғәйенләнгән сырға һәм ер сәтләүеге майына, шулай уҡ печеньеның шоколадтан һәм ванилиндан торған өҫтәмәләренә бактерия ҡушҡан һәм уларҙан сэндвичтар яһаған. Сэндвичтар Цельсий буйынса 25 градус температурала һаҡланған. Ғалимдар ваҡыты-ваҡыты менән уларҙағы бактерияларҙың торошон тикшергән. Әммә ярты йылдан һуң да уларҙың үҙҙәренең йәшәү һәләтен юғалтмауын ғалимдарҙы ла аптыратҡан.

■ Ҡытайҙа һөттөң антиканцероген сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үсеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың эффекты уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьҫиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Әлегәрәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тиген ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

■ Эшкә бар күңелең менән бирелеү шәхси тормошҡа насар йоғонто яһай, тип уйлаусылар хаталана. Швейцария тикшеренеүселәре Швейцарияла һәм Германияла йәшәгән 285 ғаилә парын тикшергән һәм бының дөрөҫ түгеллеген дәлилләгән. Ғалимдар билдәләүенсә, кем күп эшләй, улар буш ваҡыттарын ғаиләһенә арнай. Шуға ла бындай ғаиләләрҙә ир менән ҡатын бер-береһенән кәнәғәт була. Женева университетында үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, ғаилә мөнәсәбәттәрендәге көсөргәнеш бала тыуғас барлыҡҡа килә. Кемдәндер ауырып китеүе мөнәсәбәттәргә бер ниндәй ҙә йоғонто яһамай. Ғалимдар билдәләүенсә, хаҡлы ялға сығыу өлкәнәйгән ғаилә парҙарын тағы ла яҡынайта төшә.

■ Бер юлы бер нисә электрон ҡоролма менән файҙаланыу күҙҙәр көсөргәнешенә килтерә. Тикшеренеүҙәрҙә 10 меңдән ашыу өлкән кеше ҡатнашҡан. Уларҙың 70 проценты бер юлы бер нисә ҡоролма менән ҡулланыуын белдергән, 65 проценты был осраҡта физик дискомфорт кисереүен - күҙҙәр әсетеүен, күҙҙәрҙең насар күрә башлауын, баш ауыртыуын таныған. Етмәһә, экранды күҙҙәргә ныҡ яҡын тотоу сәбәпле күҙ ҡабаҡтарын йомоп алыу процесы әҙәйә. Был тағы ла күреү һәләтенең түбәнәйеүенә килтерә. Цифрлы ҡоролмалар экрандары бүлеп сығарған зәңгәр төҫ тә насар йоғонто яһай. Был төҫ үҙенең сифаты менән ультрафиолет нурланышына яҡын.

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

Башҡортостанда 443 һыуһаҡлағыс һәм быуа бар. Иң ҙурҙары - Павловка (Ҡариҙел йылғаһы, күләме 1400 млн куб м), Йомағужа (Ағиҙел, 600), Нөгөш (Нөгөш, 410), Ҡарман (Беүә, 134), Аҡъяр (Ташлы, 49,4), Һаҡмар (30,9), Таналыҡ (Таналыҡ, 14,2), Ыҫлаҡ (Ҡорһаҡ, 13,5), Нурлы (Нурлы, 10). Дөйөм алғанда, барлығы 119 һыуһаҡлағыстың күләме 1,0 млн куб метрҙан ашыу. Улар Ашҡаҙар, Өршәк, Дим, Сәрмәсән, Баҙы, Сөн, Өҫән, Бығаулыҡ һәм башҡа йылғаларҙы быуып эшләнгән.

ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ...



Ауылдың яһалма ике күле

Йылайыр районының Матрай ауылы халҡы Олайыр менән Бығаулыҡ йылғаларын һыулай. Улар мул һыулы булғанға күрә, ауылға нигеҙ һалыусы Мөхәмәтрәхим Алғошаев фәҡәт ошо урынды төйәк иткән. Ауыл революциянан һуң да әле, совет власы ныҡлап урынлашҡанға тиклем, уның исемен йөрөткән. Тарих фәндәре кандидаты Фуат Мырҙағәли улы Сөләймәнов архив документтарына таянып билдәләүенсә, Мөхәмәтрәхим 1834-се һәм 1850-се йылдар араһында барлыҡҡа килгән.

Олайыр менән Бығаулыҡ йылғалары Матрайҙың урта тошонда ҡушыла. Үрге ағымдарында иһә уларҙы иң киң урында өс саҡрымға тиклем булған өс мөйөш рәүешендәге тигеҙ ҡалҡыулыҡ айырып ята. Уны Уртаер (Уртайыр) тип йөрөтә халыҡ. Ошо ташлы ҡаҡ тау башын да сиҙәм күтәргән дәүерҙә һөрөп ташлағандар. Үҙәге Матрай ауылында булған "Башҡорт" совхозының баҫыуы ине ул мин иҫ белгәндән. Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдары башында, дөйөм хужалыҡтарҙың хәле мөшкөлләнгән мәлдә, был тау башында ашлыҡ сәсеүҙе туҡтаттылар. Хәҙер дала еле, ауыһыҙ ҡояш ихтыярына бирелгән ялан, һуңғы тиҫтә йылда ямғырҙар ҙа бик һирәк яуғас, тош-тош ҡарағура менән ҡапланып, кеше тарафынан тәләфләнгән тәбиғәттең уңалмаҫ яраһы булып ята.

Беҙ бала саҡта, үткән быуаттың 60-70-се йылдарында, Бығаулыҡ та, Олайыр ҙа ярайһы мул һыулы ине. Ат йөҙҙөрөр тәрән соңғолдәре булды, балыҡсылар ҡармаҡҡа беләк буйындай суртан-оптолар эләктерҙе. Уртаер һөрөлгәс, малды йылға буйҙарында көтә башлайҙар. Тора-бара һыу буйҙарындағы тал-тирәктәр, ерек кәзәһарыҡтан ашатылып, тапатылып юҡҡа сыға. Ҡар һөн ямғыр һыуҙары менән ағып төшкән, ел-дауыл менән күтәрелеп, яр буйҙарына барып яткан ҡара туптар, ләм булып, һыу юлдарын ҡаплай, ағас-ҡыуаҡтар тамырҙары тотмаған ярҙар емерелә, һыу юлын быуа. 70-се йылдарҙың аҙағында ямғырһыҙ йәйҙәрҙә Бығаулыҡ һыуы аҡмай торғайны инде. Ярһып үткән, үҙәнен таҙартҡан яҙғы ташҡындарҙы ла күрмәй башланыҡ - йылға үле хәлендә ҡалды. 2007 йылда Бығаулыҡ менән Олайыр йылғаларын Матрай ауылы үренән ҡамап ҡуйҙылар. Шулай итеп, йылғаларҙа ике ҙур күл хасил булды.

Унда быуа, бында быуа...

Республика етәксеһе Мортаза Рәхимов булған заманда һыуһаҡлағыстар төҙөү модаға инеп китте. Был эштең ни маҡсатта атҡарылыуының бөгөн дә айышына төшөнөүе ҡыйын. Сөнки балыҡ та үрсетмәйҙәр, уларҙың тирәһендә һуғарыулы баҫыуҙар ҙа юҡ. Халыҡ араһында ошондай лаҡап йөрөй. Имештер, Мортаза Ғөбәйҙулла улы Юлдыбай аша үтеп барғанда, һыу үткәргес бетон торбалар өҫтөнән Уза йылғаһы аша бейек итеп һалынған шоссе юлды күреп, әҙер быуа ла баһа, нишләп ята ул, тигән. Хужа ишаралағас, күп көттөрмәй, быуып та ҡуйғандар Узаны. Хатта лотос сәскәһе рәүешендә фонтан да ултырттылар.

Башҡортостандың Беренсе Президенты республика буйлап эш сәфәренә йыш сыҡты. 2005 йылдың сентябрендә, мәҫәлән, ул Мәләүез, Көйөргәҙе, Ейәнсура, Йылайыр, Хәйбулла һәм Баймаҡ райондарында була. "Эш сәфәренең төп маҡсаты - Башҡортостандың Урал арьяғында социаль-иҡтисади өлкәләге көнүҙәк проблемаларҙы хәл итеүҙе тикшереү. Был райондарҙа кем булған, ул бында һыу менән тәьмин итеү проблемаһының ни тиклем көнүҙәк икәнен белә. Яҙын ирегән һыу бик күп, ә йәй ҡоро. Был процесты көйләү өсөн республикала Урал арьяғы райондарын мелиорациялау һәм һыу менән тәьмин итеү программаһы ҡабул ителгән", - тип яҙҙы "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы был турала.

Нәҡ ошо осорҙа М.Ғ. Рәхимов инициативаһы һәм контроле аҫтында Аҡъяр, Маҡан, Бығаулыҡ һәм Һаҡмар һыуһаҡлағыстары төҙөләлөшө алып барыла. "Йылайыр районының Матрай ауылы эргәһендә Бығаулыҡ һыуһаҡлағысы төҙөлә. Эштәр Мортаза Ғөбәйҙулла улының еңел ҡулы менән май айында башланғайны. Төҙөүселәр һыуыҡтар төшкәнсе ер эштәрен тамамларға һәм, яҙға сыҡҡас, йылға үҙәнен ябырға вәғәҙәләй. Был көндә республика етәксеһе тағы ике яңы быуа төҙөлөшөнә фатихаһын бирҙе. Нигеҙ һалыныуына оҙаҡламай 250 йыл тулған боронғо башҡорт ауылы Һултантимер халҡы ошоға тиклем ике ҡоҙоҡтан ғына һыу алды. Томтоҡ йылғаһында барлыҡҡа килергә тейеш яңы һыуһаҡлағыс был көнүҙәк проблеманы хәл итәсәк. Тағы ла бер быуаны Хәйбулла районында, Мәмбәт ауылы янында, төҙөү планлаштырыла. Уны яҙғы ҡар һыуын тотоу иҫәбенә тултырыу ҡаралған. Һигеҙ йыл эсендә 450 гектар майҙанды билдән быуала 12 миллион кубометр һыу тупланыр, тип фаразлана. Күләмле һыу ятҡылығы, нигеҙҙә, ҡоро дала тәбиғәте мөхитен яҡшыртыу һәм ауыл хужалығы өсөн файҙаланыуға тәғәйенләнгән", - тип дауам ителә үрҙә атап үтелгән "Башинформ" мәҡәләһендә.

Сәфәре барышында республика Президенты Хәйбулла районында бына инде ун йыл эшләп килгән Маҡан һыуһаҡлағысын да ҡарай. Төҙөлөш, архитектура һәм транспорт министры Хәмит Мәүлийәров, "Башмелиоводхоз" идаралығының генераль директоры Бәхетгәлей Батанов менән бергә уны файҙаланыу перспективаларын тикшерә. Һыу ятҡылығында һыу кимәлен йәйләп арттырырға ҡарар итә улар.

Тағы "Башинформ" яҙмаларына мөрәжәғәт итәйек: "Баймаҡ районында Һаҡмар һыуһаҡлағысы төҙөлөшө тамамлана, быйыл ул файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Һыу ятҡылығы 10 километрға һуҙыласаҡ. Бында дөйөм ҡеүәте 320 кВт булған ике гидроэлектростанция агрегаты эшләй башларға тейеш. Республика Президенты төҙөлөштөң һуңғы этабы барышын тикшерҙе һәм башҡа һыуһаҡлағыстарҙы ла ваҡытында тамамларға кәрәклеген билдәләне", - тип әйтелә унда.

Һаҡмар һыуһаҡлағысы районның Әбделкәрим ауылынан 1,5 километр үрҙәрәк урынлашҡан. Сафҡа 2005 йылдың 9 октябрендә инделелә. Майҙаны - 590 га, һыйҙырышы - 30,9 млн куб м, плотинаһының бейеклеге - 18 м, оҙонлоғо - 390 м. "Баймаҡ районында Һаҡмар һыуһаҡласын төҙөү - ҙур ваҡиға, сөнки Урал арьяғы районында һыу менән тәьмин итеү иң актуаль проблемаларҙың береһе булып тора. Районда халыҡҡа эсер һыу етешмәй, ауыл хужалығында баҫыуҙарҙы һуғарыу өсөн дә һыу кәрәк. Яҙғы һыу бик тиҙ ағып бөтә, ә ҡыштар был яҡтарҙа аҙ ҡарлы, йәйҙәр ҡоро килә. XX быуаттың 50-се йылдарында Баймаҡ районында бик күп сиҙәм ерҙәре һөрөлә, әммә һыу етешмәү сәбәпле, емешеләк, йәшелсә үҫтереү, бигерәк тә һуғарыулы игенселек менән шөғөлләнеү өсөн мөмкинлек булмай. Ошо проблеманы хәл итеү маҡсатында республикала Урал арьяғы райондарын һыу менән тәьмин итеү һәм мелиорация программаһы булдырыла. Программа төбөктә Башҡортостан Президентының шәхси күҙәтеүе аҫтында тормошҡа ашырылды", - тигән аңлатма бирә "Википедия" Һаҡмар һыуһаҡлағысы тураһында.

Тимәк, был эштәр республика программаһы сиктәрендә алып барылған. Тик асыҡ сығанаҡтарҙан уға бәйле атап үтелгән төҙөлөштәрҙән башҡа бер мәғлүмәт тә табылманы.

Рәсүл БАЙҒИЛДИН.
(Дауамы киләһе һанда).

✔ ***Аҡһырғаҡты мал ашамай, уны урап үтеүҙе хәйерлерәк күрә. Әгәр ҙә был үсемлекте тәжрибәһеҙ берәй йәш мал ашаһа, шунда уҡ ағыулана. Билдәле, был осраҡта тик ветеринар врачтың ғына ярҙамы ҡотҡарып ҡала ала.***

ИРӘНДЕК ҮСЕМЛЕКТӘРЕ

КЕЙӘҮ ҮЛӘНЕ

Кейәү үләнен (чабрец, тимьян ползучий, богородская трава - Thymus bashkiriensis L.) күп урында ҡан үләне тип тә йөрөтәләр. Сөнки ул сәскә атҡан осорҙа бөтә тау бите ҡуйы ҡыҙыл төҫкә инә. Ә кейәү үләне тигән исеме уның нык хуш еҫле булыуына бәйләнгән. Фәнни атамаһы "Тимус" латинса "көслө" тигәнде аңлата. Элек, одеколон, хушбуй кеүек парфюмерия әйберҙәре аҙ булған саҡта, йәш кейәүҙәр кәләш кейәүләгән осорҙа уны кейемдәренә ҡыҫтырып йөрөр булғандар.

Был үлән атамаһының килеп сығышын В. З. Ғүмәров үҙенең "Башҡорт халыҡ медицинаһы" тигән китабында бына нисек аңлата. Силәбе өлкәһе Арғаяш һәм Ҡоншаҡ районы башҡорттарында элек кейәү менән тәүге осрашыу алдынан йәш киленде ошо үләндең төнәтмәһе менән йыуындырғандар. Был, беренсенән, тәнгә хуш еҫ биреп торһа, икенсенән, йәш ғаиләгә татыу тормош, сафлыҡ һәм мөхәббәт юрағандар.

Кейәү үләне ергә түшәлеп үҫеүсән, тармаҡлы һабаҡлы күп йыллыҡ тау-таш үсемлеге. Ул ирен сәскәле үсемлектәр ғаиләһенә ҡарай. Һабаҡтары үрмәләүсән, йөнтәҫ, дүрт ҡырлы. Япраҡтары эллиптик формала, бер-береһенә ҡапма-ҡаршы урынлашҡан. Уның ҡуйы ҡыҙғылт ҡара сәскәләре түңәрәк башлы сәскә берләшмәһен барлыҡҡа килтерә.

Кейәү үләне май айынан алып сентябрь бөткәнсе сәскә ата. Сәскәләрендә 12 төрлө эфир майы бар. Был эфир майҙарының төп өлөшөн көслө бактериоцид иҫәпләнгән тимол тәшкил итә. Боронғо гректар Афродитаға ҡорбан килтергәндә кейәү үләнен утҡа ташлай торған булғандар. Был осраҡта уттың ялҡыны ҡапыл көсәйеп (эфир майҙары яныу һөҙөмтәһендә), ялҡын бейегерәк күтәрелгән. Ҡорбан килтереүселәр, Алла ҡорбаныбыҙҙы ҡабул итте, тип ҡабул иткәндәр.

Кейәү үләненең химик составында эфир майҙарының күп булыуы уны парфюмерия сәнәғәтендә ҡулланырға мөмкинлек бирә. Экспедицияларҙа йөрөгән саҡта ҡайһы бер умартасыларҙың был үләнде күпләп йыйыуҙарына иғтибар итергә тура килде. Баҡһаң, уны тәжрибәле умартасылар күптән бал ҡорттары талпанына - варроатозға ҡаршы ҡулланалар. Шуға күрә уны кейәү үләне тип тә атайҙар. Бына ошондай сифаттарға эйә икән беҙҙең тауҙарҙың биҙәге булып торған кейәү үләне.

Кейәү үләне беҙҙең республиканың бөтә районларында тип әйтерлек үҫә. Ул Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла, Ейәнсура, Күмертау, Учалы районларында ифрат күп осрай. Селекле тау-таш араларында кейәү үләне айырыуса күпләп үҫә. Ирәндек, Ҡырҡты тауҙарын был үсемлек үҙенсәлекле төҫ менән биҙәп, уларға ҡабатланмаҫ биҙәк бирә, һәм уға ҡарап һоҡланмау мөмкин түгел.

МҮКТӘК

Боронғо грек мифологияһында ошондай юлдар бар: "Үҙенә үлемһеҙлек яулап алыр өсөн Геракл ун ике батырлыҡ эшләргә тейеш булған. Иң һуңғыһы - ергә өс башлы эт - Церберҙы тешөрөү. Иҫ киткес ҡаты алышта ул Церберҙы еңә һәм уны тере килеш ергә алып ҡайта. Ергә яҡынлашҡас, эт көн яҡтыһынан иҫе китеп ҡурҡа һәм өс ауыҙынан да ағыулы төкөрөктәр сәсеп ҡотора башлай. Бына ошо төкөрөктәр төшкән һәр бер ерҙә ағыулы үсемлектәр үҫеп сыға. Был хәл, имеш, боронғо грек ҡалаһы Аконе тирәһендә була". Ошо үсемлектәр был тирәлә бик тә ҡоторол үҫкәнгә күрә, латинса исеме аконит булып тарихҡа һәм фәнгә инеп ҡалған.

Мүктәк (борец, аконит высокий - Aconitum L.) - бик нык ағыулы үсемлек. Уның ағыуын хатта тәүтормош кешеләре лә ҡулланған. Улар уҡ остарына ошо үсемлектән алынған ағыуҙы һөрткәндәр. Ихтимал, шуға күрә лә химиктар үсемлектәр араһында беренсе булып тәүҙә мүктәк үләненә иғтибар иткәндәрҙер. Унан көслө алкалоид аконитин алғандар һәм медицинала ҡулланыу өсөн тәҡдим иткәндәр.

Боронғо Рәсәйҙә был үлән "ағыу-батша" тип йөрөтөлгән, һәм кем уны йыя, шул кешене үлем яҙаһы көткән. Бына ниндәй ҡыҙыҡлы тарихҡа эйә икән мүктәк үләне.

Япраҡтары киң һәм бармаҡ һымаҡ киҫкеләнгән булғаны өсөн, уны күп урында айыутабан тип тә йөрөтәләр. Урман ситтәрендә, йылға буйҙарында уның оҙонлоғо метр ярымға етә. Июнь-июль айҙарында 40 көн самаһы сәскә атып ултыра. Был ваҡытта һабаҡ осонда күкшелаҡһыл сәскәлектәр хасил була. Сәскәһенең төҙөлөшө лә хас элек батырҙар кейгән шлемды хәтерләтеп тора. Бына шуға күрәләр ҙә уны рустар борец тип атағандарҙыр. Мүктәк беҙҙең республиканың таулы районларында үҫә. Айырыуса ул Белорет, Ишембай, Бөрйән, Ғафури райондарында күп осрай.

Башҡортостанда был үсемлекте ентекләп өйрәнеүсе булып биология фәндәре докторы Николай Иванович Федоров һанала. Ул бигерәк тә был үсемлектең химик составына һәм дауалау сифаттарына иғтибар итә.

АҠҺЫРҒАҠ

Был үсемлекте һыубаҫар туғайҙарҙа, ҡар һыуҙары йыйылыр үҙәктәрҙә, урман аҡландарында, ҡыҫҡаһы, ҡайҙа еүеш, томан һәм ысыҡ беренсе булып төшә, шунда осратырға була. Мал йөрөгән урындарҙа, ғәҙәттә, ул ғына һерәйеп ултырып ҡала, сөнки аҡһырғаҡты мал ашамай, уны урап үтеүҙе хәйерлерәк күрә. Әгәр ҙә был үсемлекте тәжрибәһеҙ берәй йәш мал ашаһа, шунда уҡ ағыулана. Уның ауыҙынан күбектәр ҡойолоп, мәғәнәһеҙ хәрәкәттәр менән туғай буйлап саба башлай, аҙаҡ килеп тамам хәлһеҙләнә һәм тамырҙары тартыша. Билдәле, был осраҡта тик ветеринар врачтың ғына ярҙамы малды ауыр хәлдән ҡотҡарып ҡала ала. Аҡһырғаҡ (чемерица - Veratrum L.) бына шундай көслө ағыулы үсемлек ул. Шуны әйтеү ҙә етә: уның тамырының ике генә грамы ла атты үлтерергә һәләтле.

Аҡһырғаҡ ярты быуатлыҡ ғүмеренең тик егерменсе йылында ғына сәскә ата башлай. Үҫешенең тәүге йылдарында тәүҙә бер генә япраҡ яра, икенсе йылда - ике, шунан - өс япраҡ... Бына шулай йылдар үтеү менән япраҡтар һаны ла арта бара. Ҡыш яҡынлашыу менән аҡһырғаҡтың ер өҫтө өлөшө кибә, ә яҙ етеүгә яңынан йәшел һабағын ер өҫтөнә һуҙа. Эре аҡһыл йәшел сәскәләре булғанда, аҡһырғаҡтың 15 - 20 япрағы була. Бынан һуң да аҡһырғаҡ йыл һайын сәскә ата. Уны бер уҡ ерҙә күпләп йыйырға ярамай.

Аҡһырғаҡ ләлә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡарай. Русса исемдәренән "чемерица Лобеля" ғилми әҙәбиәттә нығынып ҡалған (чемерка, жимирица тигән исемдәре лә бар). Лобель - 1538-1616 йылдарҙа йәшәгән Голландия ботанигы. Үсемлек бына шул ғалим хөрмәтенә аталған.

Аҡһырғаҡтың бейеклеге 1 метрҙан да ашып китә. Уның тура йыуан һабағы япраҡтар ҡуйынында тағы ла бер аҙ йыуаная төшә. Япраҡтары алмаш-тилмәш, дуға селтәре. Түбәнге япраҡтары киң - 10 сантиметрға етә. Урта япраҡтары оҙонсараҡ, япраҡ ҡуйыны юҡ. Сәскәләре йәшкелт һары төҫтә. Сәскә әргәлеге ябай, 6 өлөшкә бүленгән, япраҡсалары эллипс формаһында. Һеркәстәре - 6, бергә ҡушылып үҫкән 3 емешлек бағанаһы бар. Емеше - күп орлоҡло ҡап емеш. Ул, ғәҙәттә, өс өлөшкә бүленеп тора. Орлоҡтары һарғылт һоро, эллиптик формала, ҡанатлылар.

Шулай ҙа аҡһырғаҡтың химик төҙөлөшө өйрәнелеп бөтөлмәгән әле. Уның составында бер нисә алкалоид-аминоспирт, ирекләүсе матдәләр, шәкәр, крахмал, ыҫмала һ. б. барлығы асыҡланды. Себерҙә йәшәгән халыҡ аҡһырғаҡты ревматизм һәм ҡорсанғы ауырыуынан дауалау өсөн ҡуллана икән. Шулай уҡ аҡһырғаҡ порошогы ҡушып эшләнгән майҙы емеш ағастары тирәләй бояп ҡуйһаң, ҡуян һәм башҡа кимереүселәр яҡын килмәгәнлеге билдәле. Уны тараҡандарға ҡаршы уңышлы ҡулланалар.

Аҡһырғаҡ Башҡортостандың бөтә райондарында ла тип әйтерлек үҫә. Айырыуса ул урман-тау зонаһын үҙ итә.

Файҙалы көнөш. Сысҡанға һәм башҡа кимереүселәргә ҡаршы ҡулланыу өсөн аҡһырғаҡ төнәтмәһе былай әҙерләнә: 100 г яңы ҡаҙып алынған аҡһырғаҡ тамырҙары алына һәм 1 стакан һыуҙа 4-5 тәүлек тондоролоп тотола. Алколоидтар күберәк бүленеп сыҡһын өсөн, бер нисә тамсы көкөрт, тоҙ йәки азот кислотаһы тамсыһы ҡушыла. Ошо төнәтмәлә бойҙай, арыш йәки арпа бөртөксәләрен бүрттерәләр ҙә сысҡан йәки ҡомаҡ күп йөрөгән урынға ҡуялар.

Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,
биология фәндәре докторы, профессор.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

Майсыл, майгис

(Большая синица)

Турғайҙар ғаиләһенә ҡараған был төркөмгә ҡыҫҡа тура суҡышлы, башының төҫө контраст булыуы менән айырылып торған бик бәләкәй генә урман ҡоштары инә. Оялары ағас ҡыуышында була. Ҡыҙыл таплы ағ йомортҡаларының һаны - 3-13. Бөжәктәр, орлоҡтар менән туҡлана.

Майсыл ябай турғайҙан күпкә вағыраҡ. Барыһына ла таныш ҡош. Бигерәк тә ҡышын, урмандан кеше йәшәгән тораҡтарға осоп килеп, хатта тәҙрәгә ҡунып, йәки өйгә осоп ингән мәлендә уны йыш күрәбеҙ. Көнбағыш йә башҡа орлоҡтар, май бирһәң, рәхәтләнеп соҡой.

Төҫө сағыу: башы ҡара, соңҡаһы һәм сикәләре аҡ, арҡа өлөшө йәшкелт, ҡорһағы һары.

Йыры - "ци-ци-ци-ци", "ин-чи-инчи", ҡырҡыу итеп "пинь-пинь-чрррж" тип ҡысҡыра. Майсыл йырлай башлаған икән, тиҙҙән яҙ киләсәк, ғәҙәттә, февралдең тәүге ҡояшлы көндәренән уҡ һайрай.

Рәсәйҙең Европа өлөшөндәге урмандарҙа, Кавказда, Себерҙең көньяғында йәшәй.

Ояны итеп ағас ҡыуышлығын, шулай уҡ тумырҡҡаларҙың соҡоған ерҙәрен һайлай. Ҡар ирегәс тә оя ҡора, ояны инә ҡош үҙе генә төҙөй. 9-12 йомортҡа һала, 12-14 көн буйына инә ҡош ярҙаны ғына баҫып сығара. Ата ҡош уға ашарға ташып тора. Бәпкәләр ояла 14-18 көн ултыра, улар оса башлағас та, инә менән ата ҡош уларҙы ашатыуын дауам итә. Ошо уҡ йәйҙә майсыл ҡабаттан бала сығара.

Йәй ағас ботаҡтарынан йыйылған бөжәк менән туҡлана. Көҙөн кешегә яҡынлаша, был мәлдә уларға тағараҡтарға ла ризыҡты мул һалалар. Сүп йыйылған ерҙә лә туйына, асыҡ балкондарҙа булған емеш, итте соҡой. Ҡышты урманда ҡышлаусылар аҙыҡты ағас ҡабығындағы бөжәктәрҙе тота, ҡыр үсемлектәренең орлоғон ашай. Бер уҡ майсыл йыл һайын бер уҡ ҡаланың йорт ихатаһына, паркына осоп килә тип иҫәпләнә. Ғалимдарға билдәле иң оҙон ғүмерле майсылға - 15 йәш.

М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).

3 АВГУСТА
ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45 Д/ф "Князь Владимир. Крещение Руси". [12+]
12.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пармские фиалки". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
5.00 Профилактика на канале с 5.00 до 12.00.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.00, 16.30, 20.00 Вести.
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.30 Т/с "Сестра моя, Любовь". [12+]
1.05 Т/с "Девять жизней". [16+]
2.55 Т/с "Богатые тоже плачут". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Алмазы Цирцеи". [16+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж. [12+]
12.15 Навигатор истории. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 "Асыш". Дети. [6+]
16.00 25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ. [12+]
16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
16.45 "Криминальный спектр". [16+]
17.00 Формула здоровья. [12+]
17.15 На своей земле. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00 "Просто физика". [12+]
19.00 Телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 Д/ф "Один день в городе". [12+]
21.00 Специальный репортаж. [16+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Автограф. [12+]
0.15 Х/ф "Не свадебное путешествие". [12+]
1.50 Спектакль "Дуга с колокольчиками". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

4 АВГУСТА
ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пармские фиалки". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Сестра моя, Любовь". [12+]
1.05 Т/с "Девять жизней". [16+]
2.55 Т/с "Богатые тоже плачут". [16+]
4.58 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Алмазы Цирцеи". [16+]
11.00 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
16.00 25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ. [12+]
16.45 Республика LIVE. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
19.00 Телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30, 3.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]
21.00 "Здоровый смысл". [16+]
22.00 Подкаст. Интонации. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Замандаш. [12+]
0.15 Х/ф "Огни большой деревни". [12+]
1.30 Спектакль "Юлия, ты любовь моя". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

5 АВГУСТА
СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пармские фиалки". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Сестра моя, Любовь". [12+]
1.05 Т/с "Девять жизней". [16+]
2.55 Т/с "Богатые тоже плачут". [16+]
4.59 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бесценная любовь". [16+]
11.00 Специальный репортаж. [16+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Формула здоровья. [12+]
12.15 "Криминальный спектр". [16+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 "Экологично". [6+]
16.00 25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ. [12+]
16.45, 21.00 Материнство и детство. [12+]
17.00 Навигатор истории. [12+]
17.15 Полезные новости. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00 Дуҫтар. [16+]
19.00 Телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Д/ф "Один день в городе". [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Х/ф "Дачный романс". [16+]
1.45 Спектакль "Вой волчицы". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]

6 АВГУСТА
ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пармские фиалки". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Сестра моя, Любовь". [12+]
1.05 Т/с "Девять жизней". [16+]
2.55 Т/с "Богатые тоже плачут". [16+]

БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бесценная любовь". [16+]
11.00 "Ландшафтные эксперименты". [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
12.15 Дознание. [16+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 "Сулпылар". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ. [12+]
16.45 "Криминальный спектр". [16+]
17.00 "Просто физика". [12+]
17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]
18.00 "Йома". [6+]
19.00 Телецентр.
19.45 "Мама". [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Материнство и детство. [12+]
20.30 Формула здоровья. [12+]
20.45 Башкирские каникулы. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Запах вереска". [16+]
2.00 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

7 АВГУСТА
ПЯТНИЦА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 18.40 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.15 "Время покажет". [16+]
16.15 Давай поженимся! [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. Баста. Большой концерт в Лужниках. [12+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе! Народный кастинг". [12+]
23.55 Х/ф "Танец для двоих". [12+]
3.20 Х/ф "Мой белый и пушистый". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бесценная любовь". [16+]
11.00 "Йома". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]
12.15 "Криминальный спектр". [16+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Детей много не бывает. [6+]
16.00 25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ. [12+]
16.45 Дознание. [16+]
17.00 Республика LIVE. [12+]
18.00 Башкорттар. [6+]
19.00 Честно говоря. [12+]
19.45 На своей земле. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15, 22.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 "Башкорт йыры-2026". [12+]
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
23.00, 3.30 Дуҫтар. [16+]
23.30 Х/ф "Сокровища Ермака". [12+]
1.15 Спектакль "Резной трон". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

8 АВГУСТА
СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Альфонсы. Ловушка для одиноких сердец". Специальный репортаж. [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.05 Т/с "Один шанс на троих". [16+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20, 21.35 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
23.30 Х/ф "История моей жены". [16+]
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Последний богатырь: Корень зла". [6+]
23.05 Х/ф "Последний богатырь: Посланник тьмы". [6+]
1.05 Х/ф "Перевод с турецкого". [12+]
4.30 Х/ф "Напрасная жертва". [12+]
6.03 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз). [12+]
7.45 Автограф. [12+]
8.30 На своей земле. [12+]
8.45 Хазина. [12+]
9.15 Сәләм представляет... [12+]
9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 МузКәрәҙ. [6+]
11.15 "Курсак". [6+]
11.30 Атайсал. [6+]
12.00 "Елкән". [6+]
12.30 Навигатор истории. [12+]
12.45, 23.30 Ете егет. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Креативный код. [12+]
17.45 25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Материнство и детство. [12+]
19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 "Байык-2026". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Новости недели (на баш. яз).
0.15 Х/ф "Каникулы Валери". [12+]
2.00 Спектакль "Измена предкам". [12+]
4.00 Телецентр.
5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]

9 АВГУСТА
ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Москва. Дом, в котором мы живем". Фильм Валдиса Пельша. [12+]
13.20 "Видели видео?" [0+]
14.15 "Вспомнить всё". К 80-летию Николая Бурляева. [12+]
15.15 Х/ф "Иваново детство". [0+]
17.05 Д/ф "Альфонсы. Ловушка для одиноких сердец". Специальный репортаж". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Т/с Премьера. "Скрытые мотивы".
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
6.05 Х/ф "Когда цветёт сирень". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.00, 11.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.10 "В кругу друзей".
12.50 Х/ф "Последний богатырь: Корень зла". [6+]
15.05 Х/ф "Последний богатырь: Посланник тьмы". [6+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
22.30 Д/ф "Аэропорт". [16+]
0.05 Х/ф "Позывной "Пассажир". [16+]
1.50 Х/ф "Тарас Бульба". [16+]
4.05 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз). [12+]
7.45 Золотой фонд ТВ. [12+]
8.30 "Курай даны". [12+]
8.45 Кустәнәс. [12+]
9.15 "Мама". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 Тирмәкәй. [6+]
11.00 "Городок АЮЯ". [6+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 Сулпылар. [6+]
12.00 "Ат уйнатып". [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз).
13.15 "Ландшафтные эксперименты". [12+]
13.45 Үткән гүмер. [12+]
14.00 Сәләм представляет... [12+]
14.15 Полезные новости. [12+]
14.30 "Просто физика". [12+]
15.00, 5.30 Дорога к храму. [6+]
15.30 Честно говоря. [12+]
16.15 Замандаштар. [12+]
16.30, 19.15 Д/ф "Один день в городе". [12+]
17.00 Республика LIVE. [12+]
17.45 25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ. [12+]
18.45 Квадратные метры. [12+]
19.00 Навигатор истории. [12+]
19.45 Әлләсе. [12+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30 Новости недели (на рус.яз.).
22.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
23.45 Х/ф "Миттельмарш". [16+]
2.00 Спектакль "Женитьба". [12+]
4.30 Телецентр.
6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]

БАШ ЭШЛӘТМӘК

ТЫУҒАН ЕРҘЕ ТУЙЛЫ, ТҮЛЛЕ ИТКӘН, БӨЙӨК КЕШЕ - ИГЕН ИГЕҮСЕ



Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

29-сы һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Күҙәй. Геродот. Көлсә. Клуб. Эркет. Толстой. Икмәк. Әйтеш. Вәлиди. Алама. БМВ. Үткәл. Сеул. Убыр. Сәғәт. Етен. Илгә. Өфө. Өйө. Үркәс. Ля. Ту. Нефедов.

Вертикаль буйынса: Игнатьев. Камикадзе. Какаду. Герб. Фаҙлан. Тува. Көрәк. Бура. Өҙәңге. Лоссиевский. Лөғәт. Йәтсә. Эйә. Үлсәү. Йорт. Елкә. Таш. Лотос.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

ҺЫУ БУЙЫНДА

Эҫе көндәр килеү менән, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һыуға батып үлеү осраҡтары ла йышайҙы. Уҙған ялдарҙа ғына ла республикала 11 кеше, шул иҫәптән бер бала һыуҙа һәләк булды, тип хәбәр итәләр Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы идаралығында.

Фажиғәле хәлдәр Әлшәй, Стәрлебаш, Учалы, Шишмә, Ҡырмыҫҡалы, Благовещен, Өфө райондарында һәм Нефтекамала теркәлгән. Ике кешене ҡотҡарып алып ҡалғандар.

Благовещенда 13 йәшлек ҡыҙҙың кәүҙәһен шаһиттар Потеха йылғаһындағы быуанан сығарған. Бала атаһы һәм ике ағаһы менән паркта булған, һыу ингән саҡта ҡыҙ күҙҙән юғалған. Пляждың һыу инеү өсөн йыһазландырылмаған икәнен иҫкәртеп, тейешле аншлагтар ҡуйылған була.

Учалы районында 69 йәшлек ир дуҫтары менән бергә һыу инеү өсөн йыһазландырылмаған урында ял итә, һыуға төшә һәм шаһиттар алдында батып үлә. Уның кәүҙәһе Воздвиженка һыуһаҡлағысынан сығарылған.

Нефтекамала сапбордта китеп барған егет батып барған уҡыусыны ҡотҡарған. Беүә йылғаһындағы бетон күпер янында олатай кеше өс ейәне менән ял итә. Ике үҫмер (14 һәм 15 йәш) ҡарауһыҙ һыу инергә китә, һәм уларҙың кесеһе бата башлай. Яҡында ғына сапбордта егет йөҙөп барған була, ул малайҙы һыуҙан тартып сығара. 14 йәшлек егетте реанимацияға алып китәләр. Урын һыу инеү өсөн йыһазландырылмаған, был турала тыйыу билдәләре була.

Баймаҡ районындағы Граф күле янында көслө ағым ике малайҙы ағыҙып алып китә. Береһе йөҙә белмәгән була. Бәләгә тарыған балаларҙы күреп, Динислам исемле егет һыуға һикерә, уға ҡотҡарыу ҡулсаһы тотҡан Дилә исемле ҡыҙ ярҙамға килә. Шул арала малай, аңын юғалтып, күгәренә башлай. Сибай медицина колледжын тамамлаған Дилә уға реанимация үткәрә. Малай иҫән ҡала.

Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығы ҡотҡарыусылар дежур иткән йыһазландырылған һыу инеү урындарын ял итеү өсөн һайларға, иҫерек килеш һыуға инмәҫкә, яр буйында балаларҙы ҡарауһыҙ ҡалдырмаҫҡа саҡыра.

Батыу ҡурҡынысынан тыш, һыу башҡа хәүеф менән дә янай. Әлеге мәлдә Роспотребнадзор "Ҡашҡаҙан" паркы күлендә һыу инеүҙе тыя. Ундағы пляжында "Һаҡ булығыҙ - церкариоз" тигән иҫкәртеү таҡталары ҡуйылған. Церкариоз - һыу ҡоштары гельминттарының ҡарышлауыҡтары (шистосоматидтар церкариялары) тыуҙырған паразитар ауырыу. Уның кешегә йоғоуы һыу инеү ваҡытында, башлыса күп һанлы өйрәктәр йәшәгән аҡмаған һыу ятҡылыҡтарында була.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

ҠАҒИҘӘЛӘРҘЕ БЕЛЕҮ МӨҺИМ

Эҫе һауа торошо янғын хәүефен арттыра. Ошоға бәйле Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы белгестәре республика халҡын ябай, әммә мөһим һаҡлыҡ сараларын үтәргә саҡыра.

Асыҡ ут ҡулланғанда иғтибарлы булырға кәрәк. Был мангалда һәм грилдә аш-һыу әҙерләгәндә мөһим. Айырыуса урманда янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен һаҡлау кәрәк. Кемпингтан сыҡҡас, усаҡтың тулыһынса һүндерелгәнен тикшерегеҙ.

Лактарҙы, буяуҙарҙы, эреткестәрҙе һәм башҡа тиҙ яна торған шыйыҡсаларҙы йылытыу приборҙарынан һәм ут сығанаҡтарынан алыҫ урында, һалҡын, яҡшы елләтелгән бүлмәләрҙә һаҡлағыҙ.

Электр сымдарын һәм көнкүреш приборҙарын даими тикшерегеҙ. Селтәргә артыҡ көс төшөрмәгеҙ, боҙолған розеткаларҙы ҡулланмағыҙ.

Дөрөҫ ҡулланылмаған осраҡта кондиционерҙар һәм вентиляторҙар эҫелә янғын сығанағы булыуы ихтимал. Фильтрҙарын даими таҙартып тороғоҙ, эшләп торған техниканы оҙаҡ ваҡытҡа ҡарауһыҙ ҡалдырмағыҙ, ә өйҙән сыҡҡанда һүндерергә онотмағыҙ.

Ут сығыу осрағын иҫтә тотоп, янғын ваҡытында өйҙән сығыу юлдарын алдан билдәләгеҙ, был турала бөтә ғаилә ағзаларын иҫкәртегеҙ. Һәр кем янғын сыҡҡанда нисек эш итергә һәм ҡайҙа барырға кәрәклеген белергә тейеш.

Йортҡа янғын тураһында иҫкәртеүсе прибор (извещатель) ҡуйығыҙ. Был бәләкәй, әммә ышаныслы ҡоролма төтөн сыҡҡанда сигнал бирә һәм янғын тураһында хәбәр итә. Янғын һүндергес һатып алығыҙ, уның эшләү-эшләмәүен даими тикшереп тороғоҙ.

Янғын сыҡҡан осраҡта шунда уҡ 101 йәки 112 номерҙарына шылтыратығыҙ.

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ...

архив мәғлүмәттәренән баш ала

22 июлдән 26-на тиклем Ҡаҙанда V Халыҡ ижады һәм биҙәү-ҡулланма сәнғәте этнофестивале үтте.

Подиумға Рәсәйҙән, Һиндостандан, Маврикийҙан, Ираҡтан, Катарҙан, Марокконан, Ҡырғыҙстандан, Төркмәнстандан, Үзбәкстандан, Тажикстандан һәм Африка илдәренән 40-тан ашыу дизайнер сыҡты. Халыҡ-ара мәҙәни сарала Башҡортостанды Өфөнән билдәле этнодизайнерҙар лайыҡлы күрһәтте. Рәсәйҙең Евразия этнодизайнерҙар ассоциацияһы ағзаһы Саимә Хәсәнованың "Күңел моңо" коллекцияһы тамашасыларға айырыуса тәьҫир итте. Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Раушания Бәҙретдинова менән берлектәге эш унық "Муллыҡ" картиналар серияһынан рухландырылған кейем линияһы булды. Гүзәл Мостафинаның ҡулдан туҡыу, Рафаэль Амантаевтың биҙәүестәре һәм Гөлсөм Хөсәйенованың "Хан ҡыҙы" коллекцияһы уникаль этностиль символына әүерелде.

Йәш дизайнер Артур Исҡужин подиумға милли орнаментлы спорт кейемдәрен сығарҙы. Этномастерҙарҙың һәр береһе башҡорт халҡының тарихын костюмдарҙа һынландырҙы.

Өфө этнодизайнеры Саймә Хәсәнова һөйләй: "Бөгөн беҙ ҡулдан эшләнгән кейемдең күпләп етештерелгәненә ҡарағанда ҡиммәтерәк булған дәүерҙә йәшәйбеҙ. Хатта билдәле брендтар ҙа хәҙер ҡулдан эшләнгән изделиелар сығара. Кешеләр сигеү, туҡыу һәм бәйләү менән ҡыҙыҡһына. Ҡаҙанда үткән форумда беҙҙең изделиелар сит ил ҡунаҡтарының иғтибарын йәлеп итте, ә Мәскәү вәкилдәре беҙҙең башҡорт кейемен һатып алды. Бигерәк тә сигелгән кейем популяр бөгөн. Фестиваль өсөн коллекцияны беҙ "Күңел моңо" тип атаныҡ, сөнки халҡыбыҙҙың мәҙәниәтенә, кейеменә һәм йолаларына һөйөү булмаһа, был эш уңышлы килеп сыҡмаҫ ине. Мәҫәлән, әгәр идея барлыҡҡа килһә, изделие бер көндә эшләнә. Хәҙер беҙ башҡорт шәле коллекцияһын әҙерләйбеҙ. Тағы шул: башҡорт кейеме һәр ваҡыт архив материалдары нигеҙендә эшләнә. Башҡорт кейемендәге һәр орнаменттың үҙ урыны бар. Мәҫәлән, күн һәм буҫтау аяҡ кейеме - сарыҡта орнамент алғы өлөштә түгел, ә үксәһендә урынлашырға тейеш. Этнографик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һарыҡ мөгөҙө рәүешендәге орнамент һәм аяҡ кейеменең артҡы өлөшөндәге өс мөйөшлө биҙәүестәр яуыз көстәрҙән һәм "насар күҙҙән" һаҡланыу өсөн хеҙмәт иткән. Беҙ бер нәмәне лә үҙгәртергә тейеш түгелбеҙ", - тине Саймә Хәсәнова.

Ләйлә АРАЛБАЕВА.

АФАРИН!

МАҠСАТЛЫ ЕГЕТ!

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы 3-сө Башҡорт лицей-интернатының IX класс уҡыусыһы Руслан Әминевте донъя кимәлендәге абруйлы ярышта көмөш миҙал яулауы менән ҡотланы.

Һәләтле уҡыусы илдең милли йыйылма командаһы составына инеп кенә ҡалманы, ә үҙенең төплө белемен Ҡытайҙа үткән IX Халыҡ-ара IEO-2026 иҡтисади олимпиадаһында раҫлауға ла өлгәште. Был сара донъя кимәлендә иң абруйлы интеллектуаль ярыштарҙың береһе һанала, быйыл унда 62 ил ҡатнашҡан. Биш уҡыусынан торған Рәсәй йыйылма командаһы бик лайыҡлы сығыш яһап, биш награда - өс бронза һәм ике көмөш миҙал яулауға өлгәшкән. Еңеүселәр араһында беҙҙең Стәрлетамаҡ егетенең дә булыуы - ҙур ҡаҙаныш һәм ғорурлыҡ.

Үҫмерҙе ҙур еңеүе менән Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡотланы. Ул унық остазы Руслан Ғабдрахмановтың да хеҙмәтен юғары баһаланы. Шулай уҡ төбәк етәксеһе һәләтле уҡыусыларҙы үҫтереү йәһәтенән "Аврора" таланттарҙы үҫтереү үҙәге алып барған эшмәкәрлекте лә билдәләне. "Русланды, унық ата-әсәһен, педагогтарҙы һәм бөтә Рәсәй йыйылма командаһын ҙур еңеү менән ҡотлайым. Был уңыш - беҙҙең Башҡортостанда иң яҡшы, сағыу, талантлы һәм маҡсатлы йәштәр булыуын тағы ла бер тапҡыр раҫлай. Ғорурланабыҙ!" - тине Радий Хәбиров.

Ксения КАЛИНИНА.

ТЕЛҺӨЙӘР

ЭСМӘЙЕЛЛЕ КҮҢЕЛДӘР

Берәйһе менән юлға сыҡһаң да, күршең йомошҡа инһә лә, эсмәйелле бул, тип өйрәтә ололар. Эсмәйеллек эстәтте лә ишер. Боронғо бик тәрән мәғәнәле һүҙҙәребеҙ һүҙлектәрҙә генә йәшенеп ятмаһын, телмәребеҙгә лә йоҡһон, тип, иҫебеҙгә төшөрәйек.

Эсергәнеү. Тән температураһы күтәрелеүҙе шулай атайҙар. *Һалҡын тейеүҙән эсергәнһәң, тирләтә торған үләндәр эс. Эсергәнеү ваҡытында ятып тороу ҙа хәйерле.*

Эсерәңке. Эсерәңкенең мәғәнәһе - һыу эсеүсән. *Эҫелә эсерәңкегә әйләнәһең. Эсерәңке малға һыуын әҙер торһон.*

Эсмәйелле. "Кеше күңелле, кеше ыңғайлы, изге күңелле" тигәнде белдергән һүҙ. *Хеҙмәттәшебеҙ - эсмәйелле зат. Туғандар ҙа эсмәйелле.*

Эсмәлек. Эсмәлек эсергә яраҡлы һыу сығанағын белдерә. *Томбойоҡло тәрән күл, эсмәлегем булған күл (халыҡ йыры). Тау итәккәйҙәре шишмәлек, һыуһындарың баҫыр эсмәлек (Т.Карамышева).*

Эстәт. Тауҙа өйөлөп ятҡан эре-эре таш була эстәт. *Эстәт араһында ла ҡылған көмөш сәсен ялбырата. Ә бер ҡарағай эстәтте ярып уҡ ҡалҡып сыҡҡан.*

Шулай итеп, һүҙ-лөғәтебеҙ эсмәлектәй таҙа булһын.

НУРБИКӘ әҙерләне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

АТТЫҢ ШӘБЕ - КЕШЕЛӘ,

ҡатын шәбе - күршелә

Йәшем етте ҡыр(ы)ҡҡа, эшем китте ширыҡҡа.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Аҡылдың бик аҙы ғына тотоноуҙан туҙа, күп өлөшө ҡулланылыш тапмай тутыға.

(Каролина Бови).

Өлкән кешегә сабырлыҡ матурлыҡ өҫтәй.

(Поль Эллиот).

Яуызлыҡ унық менән көрәшһендәр өсөн булдырылған, ә көйәнтәгә элеп үлсәр өсөн түгел.

(Иосиф Бродский).

Күп идеялар бер кеше аңындағыға ҡарағанда күптәр аңына күсереп ултыртҡанда яҡшыраҡҡа, камилыраҡҡа әйләнә.

(Оливер Холмс).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер уҡытыусының фәлсәфә һатырға, үҙен ижади эҙләнеүсән кеше итеп күрһәтергә тырышыусы шәкерте була. Бер саҡ Алла тураһындағы уйҙарға сумып ултырған был шәкерткә бик ныҡ мохтажлыҡ кисергән бер фәҡир мөрәжәғәт итә. Шәкерт уны тыңлап та тормаҫтан, "Алла ярҙам итер", ти ҙә, уйланыуын дауам итә. Фәҡир кеше уны борсоғаны өсөн ғәфү үтенә һәм ары китә. Шунан был фәҡир эргәһенә үҙенең ярҙамын тәҡдим итеп, икенсе бер кеше йүгереп килә.

Был хәл тураһында уҡытыусыһы ишетеп ҡала һәм шәкерте янына килеп, шулай тип телмәр тота: "Күрәһең, был фәҡир һинән ярҙам һорағанда йөрәгеңдә Алла булмағандыр. Алла һәм Унық һөйөүе был фәҡиргә ярҙам итергә тип йүгереп килгән кешенең йөрәгендә ҡунаҡта булғандыр. "Алла ярҙам итер", тип дөрөҫ әйткәнһең, теге кеше йөрәгендәге Алла үҙенең Һөйөүе аша изгелек тыуҙырған һәм ул кешенең ҡулдары менән фәҡиргә ярҙам иткән. Ә бит ул ярҙам итеүсе Алланы эҙләп, көн-төн баш ҡатырып, уйланып та ултырмаған, сөнки Алла унық йөрәгендә урынлашҡан. Әммә ул быны хатта белмәй ҙә. Улар Унық менән баш һәм тән кеүек үк бер бөтөн, баш күрә, ишетә, уйлай һәм нимә эшләргә икәнен күрһәтә, ә тән шуны үтәй. Ә һин Алла хаҡында көндәр буйы уйланып ултырһаң да, Унық менән бер бөтөн булыуға өлгәшә алмағанһың. Шуны хәтереңдә тот: мохтаж кеше менән осрашҡанда кем күҙҙәрен ситкә күсермәй, үҙенең йөрәген бикләмәй, ҡулдарын йоҙроҡҡа төйнәмәй, ярҙам һорап ҡысҡырған тауыш ишеткәндә ҡолаҡтарын ҡапламай, шул саҡта ғына йөрәге менән Хоҙайҙы күрә, Унан килгән хәбәрҙе ишетә, Ул ебәргән бүләкте тоя ала. Башҡалар мохтажлығына күҙҙәрен йомған кеше үҙенең эргәһендә торған Хоҙайҙы ла күрмәйәсәк..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Башҡортостан Республикаһы буйынса Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығында теркәлде:
ПИ №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 26030

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан Республикаһы Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.
Тел.: 8 (347) 226-99-48.
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

Баш мөхәррир	253-25-44
Хәбәрселәр	252-39-99
Матбуғат таратыу	252-39-99

График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30.07.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 30.07.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 31.07.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2487
Заказ - 1330